ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ
# Киске Өфө
3-9 октябрь (карасай) 2020
№40 (926)
kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ҡарасайҙа бар бер көн** 3

**Ҡартлығым - шатлығым,** ә йәшлегемә ҡайтырға һис теләмәҫ инем 6

**Бишек йырҙарын йырламаһаҡ,** туған телебеҙҙә һөйләшмәһәк... 8-9

**Кем ҡайыған үрәнәгән,** ҡотло булһын ҡулдәгең! 12-13

**ТВ-программа** 14









***Мөхтәрәм йәмәғәт! Арзанға яҙылып ҡалығыҙ!***

***Республикабыҙҙың һәр районы-ҡалаһында, иң төпкөл ауылдарҙа ла 1 октябрҙән 10 октябргә тиклем иғлан ителгән ун көнлөктә 2021 йылдың беренсе яртыһына ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә - 635 һум 82 тингә яҙыла алаһығыҙ. Был мәғлүмәтте йәнәшәләге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине.***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Беҙ балаларыбыҙҙы матур итеп тәрбиәләп, аҫрап, бар капиталыбыҙҙы уларға һалып, үҙебеҙҙең тыныс ҡартлыҡты тәьмин итәбеҙ, шулаймы?

***Әкрәм КӘЙЕПҠОЛОВ, Баймаҡ районы, Сыңғыҙ ауылы:*** Элегерәк, эйе, һеҙ әйткәнсә була торғайны: беҙҙең быуын, мәҫәлән, ата-әсә, мәктәп тәрбиәһе алып үҫте. Шуға күрә лә был быуын кешеләрендә яуаплылыҡ тойғоһо көслө булды: ата-әсәһе, уҡытыусылары, иптәштәре һәм, әлбиттә, бер ҙә юғары һүҙ түгел - тыуған иле алдында. Ул быуындың ата-әсәләре олоғайып, үҙаллы донъя көтә алмай башлаһа ла улар ҡараулы һәм хәстәрлекле булды, сөнки улар балаларының берәйһе ғаиләһендә тыныс, татыу шарттарҙа ғүмер һөрөүҙәрен дауам итте, ейән-ейәнсәрҙәрен тәрбиәләүгә ҙур өлөш индерҙе. Хәҙер ҙә ундай ғаиләләр бар, әлбиттә, айырыуса ауылдарҙа был традиция һүнмәгән әле, ләкин ҡарттарҙың да, йәштәрҙең дә үҙ алдарына йәшәргә теләгәндәре һаман арта бара. Замана килендәре лә бик үҙгәрҙе, элекке кеүек, иренең өлкәнәйгән ата-әсәһен ҡарап-тәрбиәләп йәшәргә бөтәһенең дә ҡулынан да, теләгенән дә килмәй. Ҡала ерендә шуғалыр ҙа өлкәндәр күберәк осраҡта үҙ алдарына көн күрә.

"Тыныс" ҡартлыҡтың икенсе төр варианттары ла беҙгә яҡшы мәғлүм: ҡарты вафат булған (ғәҙәттә, ирҙәр ҡатындарынан күпкә алдараҡ китә теге донъяға) әбейҙәрҙең ни эшләмәй, ни өйләнмәй ятҡан улдарын аҫрап йәшәргә мәжбүр булыуы. Был инде үҙе бер фажиғә оло кеше өсөн. Ярай ҙа, йәше үтеп бөткән улының холҡо тыныс булһа - юҡ шул, улар, ғәҙәттә, эскесе һәм әрәмтамаҡ әҙәмдәр. Эшләмәй, әсәһенең хәйерсе пенсияһын талап, ҡайһы саҡта хатта ҡул күтәреп, эсеп ятыуҙы ғына белә ундайҙар. Шуның өсөн дә һеҙ әйткән "тыныс ҡартлыҡ", ғөмүмән, бөгөнгө заманда мөмкинме икән ул?

Ирле-ҡатынлы тигеҙ йәшәп, оло йәшкә еткәндәрҙе лә барыбер ниндәйҙер уй-хәстәрҙәр борсойҙор, тием, сөнки, баяғы әйтмешләй, бөгөн заманы шундай игелекһеҙ: йә туҡтауһыҙ реформалар, йә стихия афәттәре, йә бынауы пандемия хәүефе... Балаларға килгәндә, хәҙер бит уларҙы "тәрбиәләүҙе" интернет тулыһынса үҙ ҡулына алды, тиерлек, үҙегеҙ ҙә күреп торағыҙ. Ата-әсәһе бәләкәй генә балаһына ла планшет йә смартфон алып бирә лә, артабан тәрбиәне интернетҡа тапшырып ҡуя. Йәнәһе, мыжып бимазаламаһа, әүрәп ултырһа, булды. Ә бының киләсәгебеҙгә бик етди ҡурҡыныс менән янауы башына ла килмәй уларҙың, киреһенсә, балаһының смартфонда, "компик"та шәп итеп өйрәнеүен мәртәбә күрә. Бындай "тәрбиә"нең эҙемтәһе ниндәй булыр, әлегә бер кем дә асыҡ әйтә алмаһа ла, уның яҡшыға түгеллеген һәр кем аңларға тейештер.

**(Дауамы 2-се биттә).**

## МӘҒАРИФ

# ӘЛДӘ УҠЫТЫУСЫМЫН!



**Үткән аҙнала Ғафури районында уҙған Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының төбәк-ара форумы Башҡортостандан һәм Рәсәйҙең башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәренән 250-гә яҡын кеше йыйҙы. Башҡорт теле йылына арнап ойошторолған форумға Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров та килде һәм ҡатнашыусылар менән аралашты, форум сиктәрендә уҙған фекер ҡорҙары һөҙөмтәһендәге тәҡдимдәрҙе тыңланы, залдан яңғыраған һорауҙарға яуап бирҙе.**

Республика етәксеһе форумда ҡатнашыусыларҙы сәләмләп, былтыр оло съезд уҙғарылыуы, унан һуң башҡорт телен үҫтереү йүнәлешендә бик күп эштәр аткарылыуы тураһында телгә алды. Артабан һүҙен башҡортса былай тип дауам итте: "Хөрмәтле уҡытыусылар, донъяла ике миллионға яҡын башҡорт йәшәй. Уларҙың бер миллион ярымы - Рәсәйҙә, бер миллион 172 меңе - Башҡортостанда. Ҡайҙа ғына йәшәһәк тә, бөтәбеҙҙе лә башҡорт теле, башҡорт тарихы, башҡорт әҙәбиәте берләштерә, бәйләп тора. Беҙ бары тик Башҡортостанда ғына башҡорт телен һаҡлау һәм өйрәтеү, уны үҫтереүҙе ойоштора алабыҙ икәнде барыбыҙ ҙа аңлайбыҙ. Шуға был мөһим эште бергә тормошҡа ашырабыҙ", - тине Радий Фәрит улы. Артабан ул һүҙен башҡорт телен ҡулланыу даирәһен киңәйтеү хаҡында дауам итте һәм Хөкүмәттә, Дәүләт Йыйылышында, район хакимиәттәрендә уҙғарылған кәңәшмәләрҙә башҡортса сығыш яһаусыларҙың һаны артыуы, бының да бик кәрәкле ғәмәл икәнен билдәләне. Шулай уҡ республика етәксеһе 2018 йылда булдырылған Башҡортостан Башлығы грантының һөҙөмтәһен, Башҡорт телен үҫтереү фонды эшләгән биш ҡушымтаны ла телефондан ҡулланыуы тураһында, төньяҡ-көнбайыш башҡорттары диалектына бәйле проекттарҙың да мөһимлеген, был йүнәлештә эштәрҙе дауам итеү кәрәклеген белдерҙе. "Бынан бер аҙна элек коллегаларым бик матур бүләк бирҙеләр миңә. Ул - "Эшлекле башҡорт теле" китабы. Башҡорт теле - ул дәүләт теле. Шуға күрә был китап күптән кәрәк ине. Коллегаларға таратырға ҡуштым. Хакимиәт башлыҡтары ҡарарға, өйрәнергә һәм ҡулланыуға индерергә тейеш. Тағы ла бер проект - полилингваль гимназиялар тураһында әйтергә теләйем. 2024 йылға тиклем беҙҙә 15 полилингваль гимназия асыласаҡ. Әле өс гимназия бар. Икеһе - Өфөлә, береһе - Стәрлетамаҡта. Полилингваль гимназия ул башҡорт телен өйрәнеү, үҫтереү буйынса локомотив булырға тейеш, тип уйлайым", - тип тамамланы сығышын Башҡортостан Башлығы.

**(Дауамы 5-се биттә).**

12+

✓ *Икенсе яҡтан, ул хаҡлы ла һымаҡ. Беҙҙә бит күпме генә эшләмә, ҡартайғас, бөгөнгө быуын кеүек, барыбер хәйерсе көнөнә ҡалып, 10 мең пенсияға ҡарап ултырырһың. Ярай ҙа әле, унының да бөтөрмәһәләр.*



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Беҙ балаларыбыҙҙы матур итеп тәрбиәләп, аҫрап, бар капиталыбыҙҙы уларға һалып, үҙебеҙҙең тыныс картлыкты тәьмин итәбеҙ, шулаймы?

(Башы 1-се биттә).

***Таңһылыу ЙӘНТҮРИНА-РӘХИМҒОЛОВА, хаҡлы ялдағы уҡытыусы:*** Һеҙ ҡуйған һорау хаҡында уйланып ултырҙым да, һүҙҙе үҙемдең атаәсәйемдән башларға булдым: улар беҙҙе нисек тәрбиәләне, мораттарына өлгәштеме улар? Ә беҙ үҙебеҙ нисек тәрбиәләргә тырыштыҡ балаларыбыҙҙы? Ата-әсәйебеҙ беҙҙе ауыҙҙарынан һуңғы ризыҡын бүлеп биреп тигәндәй, күнелдәребеҙгә гел генә изгелек орлоҡтары һалып тәрбиәләне. "Таш менән атҡанға аш менән ат", "Күрше хаҡы - Тәңре хаҡы", "Оло һүҙен тыңламаған - оролған да бәрелгән", "Кеше һүҙен кешегә һөйләмә", "Кеше юлын бер ҡасан да арҡыры ҡыйып үтмә" һәм башҡа шундай бик күп фәһемле һәм күркәм тәрбиәне һүҙ аша ла, үҙҙәренең тәртибе, йәшәү рәүеше менән дә беҙгә һеңдерҙеләр. Атайыбыҙ, үкенескә, беҙ - ғаиләләге балаларҙың дүртеһе лә - юғары уҡыу йортонда уҡып йөрөгәндә, һуғышта алған яраларынан мандымай мәрхүм булып ҡалды. Әсәйебеҙ Камал Минһаж ҡыҙы Баймаҡ районының Ишбирҙе мәктәбендә ғүмере буйы директорҙың уң ҡулы - уҡыу-уҡытыу буйынса урынбаҫар булып эшләне һәм бер эш хаҡын дүрткә бүлеп, беҙгә ярҙам итте, янғыҙы беҙҙең барыбыҙға ла юғары белем алып сығыуға бөтә көсөн һалды. Шулай итеп, үҫеп етеп, белем алыуыбыҙға ғына түгел, беҙҙең дөрөҫ йүнәлештә йәшәүебеҙгә лә көс һалды атай-әсәйебеҙ. Ә беҙ мәңге улар алдында бурыслы булып ҡалдыҡ. Әммә ул бурысыбыҙҙы үҙебеҙҙең балаларыбыҙға дөрөҫ, намыҫлы һәм тырыш кешеләр итеп тәрбиәләүебеҙ менән ҡайтара алабыҙҙыр, тип уйлайым. Атай-әсәйебеҙ кеүек үк, беҙ - дүрт бер туғандар ҙа балаларыбыҙҙың һәр береһенә күркәле белем, тәрбиә бирергә тырышабыҙ. Тәрбиә менән бер рәттән, уларҙы матди яҡтан тәьмин итеү ҙә кәрәк булды. Үҙемдең улыма килгәндә, атаһы менән бергәләп, уны уҡытыу өсөн мөмкин булғандың барыһын да эшләнек, тип уйлайым. Һәм, шөкөр, ул беҙҙең өмөтөбөҙҙө аҡланы: юғары уҡыу йортон ҡыҙыл дипломға тамамлап, сит илдә унышлы эшләп йөрөй, беҙҙе бер ҡасан да онотмай, хәлебеҙҙе белешеп, һәр саҡ ярҙам итеп тора. Юғиһә бит балаларҙың да төрлөһө бар. Баяғыса, Әкрәм ағай әйтмешләй, ҙурайғансы ата-әсәһе елкәһен кимереп ятыусылар ҙа әҙ түгелдер бөгөн. Ояһында ни күрһә, осҡанында шул була, ти халыҡ мәҡәле. Беҙҙең балалар, шөкөр, беҙгә олоғайған көнөбөҙҙә - төп таяныс, шатлыҡ, ҡыуаныс ҡына. Бөгөнгө үлсәм менән әйткәндә, бизнесҡа ла бит күпме капитал һалаһың, шул тиклемен алаһың. Ни сәсһәң, шуны урырһың, тигәнде лә яҡшы беләбеҙ. Тәрбиәлә лә тап шулай килеп сыға.

***Миңлехан БИКБАЕВ, Сибай ҡалаһы:*** Ҡайһы бер ғаиләләр өйләнешеп, бала донъяға килгәс тә уны кеше итеүгә бөтөн көстәрен, аҡсаларын, ваҡыттарын йәлләп тормайынса үҫтерергә тырыша: уны төрлө секцияларға, түңәрәктәргә йөрөтөп, ниндәй өлкәгә ҡыҙыҡһыныуы, теләге барлығын асыҡлап, дөрөҫ йүнәлеш биреүгә өлгәшәләр. Тик былдай ата-әсәләр, үкенескә, әллә ни күп тә түгел. Баланың шөғөлләнеүе өсөн тейешле шарттар булған ҡалаларҙа, район үҙәктәрендә күберәк шундай яҡшы ғәҙәт бар, тик бына ауыл ерендә балаларға күберәк эш, хеҙмәт аша тәрбиә бирелә. Был да насар түгел, әлбиттә, киреһенсә, ҡала балалары алдында уларҙың хәле, бер ниндәй ҡала шарттарына ҡарамаҫтан, өҫтөнлөрәктер ҙә, бәлки, сөнки пианино, скрипкала уйнарға, теннис һуғырға өйрәнеп тә эш рәте белмәгән йәштәр үҫеп сығыуы бар. Бында ата-әсә үрнәге бик мөһим. Үҫеп еткәс тә уларҙа атаәсәләренә ҡарата мәрхәмәтле, хәстәрлекле, кеселекле мөнәсәбәттә ҡалыуҙарында рухи тәрбиәнең әһәмиәте ҙур.

Ә рухи тәрбиә ҡала-ауыл араһына бүленмәй, ул барыһы өсөн дә - бер: кеше булыу. Ғәҙәттә аҡыллы, маҡсатлы балалар тормошта үҙ юлдарын, бәхеттәрен табалар һәм үҙҙәрен кеше итеүгә көс һалған ата-әсәһен ташламайҙар. Шуға ла ата-әсәләргә бала тәрбиәләгәндә бик ҡыйыу һәм йүнсел булырға, аҡсаларын да, ваҡыттарын да йәлләргә ярамай, шәхси мәнфәғәттәрҙе лә хатта онотоп торорға тура килгәләй. Шул уҡ ваҡытта баланы артыҡ бәпләп, һәр ваҡыт "кесә аҡсаһы" бирергә өйрәтеп, теләгән бер нәмәһен һатып алып, ҡотортоп ебәрергә лә кәрәкмәй, юғиһә, ундай балалар тиҙ генә урам йоғонтоһона бирелеп, наркотик, спиртлы эсемлектәр ҡолона әйләнеүе лә оҙаҡ түгел. Иң мөһиме, бала бәләкәйҙән эшләргә, аҡсаның нисек табылыуын үҙ күҙҙәре менән күреп, тир емешен татып өйрәнеүе мөһим. Бала тәрбиәләү шуға күрә үҙе бер оло хеҙмәт икәнде кеше иҫенән сығармаһын ине, юғиһә, бөгөн аҡса өсөн бала табыуҙар күбәйҙе, тигәнде лә ишетергә тура килгәләй. Аҡса, социаль пособиеһына ҡыҙығып бала табыу киләсәктә бындай ата-әсәгә, йәки ғәҙәттә яңғыҙ әсәгә, ҡарт көнөндә фажиғә булып ҡайтыуы ла бар...

***Айгүзәл ИРКЕНБАЕВА, юғары уҡыу йорто студенты:*** Балаларын матур итеп тәрбиәләргә, аҫрарға, уларҙы аяҡҡа - үҙ аллы тормош юлына баҫтырыу, кеше итеү хаҡына бар булған тапҡан-таянғанын һалырға һәр бер ата-әсә бурыслы, тик уларҙың бөтәһе лә быларҙы ҡартлыҡ көнөн страховкалау өсөн эшләйҙер, тип уйламайым. Моғайын, быны улар ата-әсә үҙлегенән сығып, тәбиғи һәм ирекле рәүештә, йөрәктәре ҡушҡанса эшләйҙер. Бала тапҡанһың икән, тимәк, башҡаса булыуы мөмкин дә түгелдер бит инде, уны кеше итеү өсөн бөтәһен дә эшләү теләге - бына нимә мәжбүр итә ғаилә башлыҡтарын тынғыһыҙ һәм ауыр бала тәрбиәһе хәстәренә. Мин әле йәш кеше, балам түгел, ғаиләм дә юҡ әлегә, ләкин үҙемдең ата-әсәйем миҫалында ла быны асыҡ күрәм. Әлбиттә, улар ҙа, һәр нормаль кеше кеүек, ҡартлыҡ көндәрен дә күҙ алдына килтерәләр һәм балаларының киләсәктә таяныс булырына өмөт бағлай торғандыр, ләкин икенсе юҫыктан ҡарағанда, был көнәлгәре балаң муйынына "камыт һалып " ҡуйыу, уның иркен сикләү булмаймы икән ул? Бындай уйҙар минең башҡа мин насар кеше булған өсөн килмәне, мин үҙем ундай ҡараште түгелмен, тик бына студенттар, йәштәрҙең ҡайһы берҙәренән шундай фекерҙәр ишеткәнем бар. Мәҫәлән, беҙҙең төркөмдә уҡыған бер егет мин вузды бөтөргәс тә "за бугор" (был уның һүҙҙәре) шылам, тип маҡтанды. Һин бит әсәйеңдең яңғыҙ ғына улы, нисек инде уны ташлап китәһең, тип һораны шул саҡ был егетте яратып йөрөгән ҡыҙ. "Әсәйемде бик яратам, ләкин мин уны ғүмер буйы һаҡлап, эргәһендә генә йәшәргә тейешме ни? Ниңә мин яҙылмаған закондың "заложниғы" (был тағы уның һүҙе) булып йәшәргә тейеш? Әсәйемдең хатаһын ҡабатларға теләмәйем. Минә үҙемдең киләсәгемде хәстәрләргә кәрәк, ә мин уны тик сит илдә генә күрәм", - тип шаҡ ҡатырғайны. Икенсе яҡтан, ул хаҡлы ла һымаҡ. Беҙҙә бит күпме генә эшләмә, ҡартайғас, бөгөнгө быуын кеүек, барыбер хәйерсе көнөнә ҡалып, 10 мең пенсияға ҡарап ултырырһың. Ярай ҙа әле, унының да бөтөрмәһәләр. Беҙҙең быуынға бит хәҙер пенсияға ла өмөт итеп булмаясаҡ: уны дәүләт халыҡтың үҙ елкәһенә ауҙармаҡсы, йәғни һәр кем үҙ ҡартлығын үҙе тәьмин итергә тейеш, күпме туплай ала, шуға ҡарап аяғын һуҙасаҡ. Шулай түгелме ни, йәмәғәт?

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

БЫНАҒАЙЫШ!



# АҠЫЛЛЫҒА БЕР ҺҮҘ - МАЯ,

## ахмаҡҡа мең һүҙ - зая

Бөгөн "коронавирус кире ҡайта" тигән һүҙбәйләнеште йыш ишетергә йә уҡырға тура килә. Ҡайтырға бит һуң ул әле бер ҡайҙа ла китмәгәйне, тик ниндәйҙер факторҙарға бәйле агрессияһы ғына йомшара төштө, ә хәҙер, күрәһең, вирус янынан һөжүмгә әҙерләнә. Был күренеште табиптар менән белгестәр "икенсе тулҡын" тип тә атай. Уның көсәйеүен күптәр тарафынан кисәтеү сараларын һанға һуҡмау, битлекһеҙ йөрөү, социаль дистанция нормаһын үтәмәү менән аңлатырға тырышыуҙар булһа ла, күрәһең, шуның менән бер рәттән төп сәбәп ошо осорға хас грипп һәм ОРВИ эпидемияһы башланыуында ла. Шуның өсөн ошо мәлдәрҙә табиптар халыҡты грипптан һәм пневмококктан прививкалар эшләтергә саҡыра. Был коронавирус йоҡтороу хәүефен кәметә, ти улар.

Шулай ҙа табиптар һәм медицинаның башҡа төр белгестәре бер ауыҙҙан һаман да битлек кейеп йөрөүҙе һәм хәүефһеҙ ара һаҡлауҙы кисәтеүҙән туҡтамай. Үкенескә, күпселек халыҡ был йәһәттән бөтөнләй туғарылды: тегендә-бында, магазинда, йәмәғәт транспортында һис бер ҡурҡыуһыҙ (тик был батырлыҡ түгел шул), иркен һәм оятһыҙ рәүештә үҙҙәрен генә ҡайғыртып (имеш, шулай уңайлы!), битлекһеҙ йөрөүҙән дауам итә. Әйткәндәй, бындай күренеш айырыуса Өфөлә киң таралған, ә райондарҙа был йәһәттән тәртип ҡатыраҡ ҡуйылған, тип һөйләй килгән кешеләр. Мәскәүҙә лә, сит илдәрҙә лә битлекһеҙ йөрөүселәр хәҙер юҡ, тип әйтерлек. Дөрөҫ, ҡайҙалыр Австрияла, Германияла, хатта ки Америка менән Италияла, Грецияла, Бөйөк Британияла битлек кейеүгә ҡаршы протест саралары булып алды алыуын, әммә полиция улар менән оҙаҡ һөйләшеп тормай: ныуыҡ һыуға ҡойондороп, ҡайһыһын ҡулға алып, ҡайһыһына штраф сәпәп, ҡыҙыуҙарын бик тиҙ һыуындырып тора. Һәм был дөрөҫ тә. Дөйөм тәртипкә буйһонорға теләмәгән бындай әҙәмдәр тотош йәмғәтселек фекерен белдермәй әле, улар ниндәйҙер бер төркөм йә ҡотҡоға бирелеүсән кешеләр, күрәһең. Ә бына шул уҡ Германияла табиптар, киреһенсә, битлектәр етешмәүгә ризаһыҙлыҡ белдереп һәм уны мотлаҡ кейеп йөрөргә саҡырып, митинг ойоштороҙо.

Башҡортостандағы хәлдәргә әйләнеп ҡайтҡанда, баш ҡалабыҙҙағы әлеге һаҡланыу саралары үтәмәүселәрҙе иҫәпкә алмағанда, республика етәкселеге коронавирус темаһын көн тәртибенән төшөргәне юҡ. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров хәлде даими контролдә тотоп, "Здравчас" форматында был турала әленән-әле онлайн-кәңәшмә үткәреп тора һәм унда пандемия шарттарында республикала һаулыҡ һаҡлау учреждениелары эше анализлана. Яңыраҡ был йәһәттән ашығыс медицина ярҙамы хеҙмәтенең үҫеш перспективалары ҡаралһа, төбәктәге компьютер томографияһы үҙәктәре эшмәкәрлеге лә тикшерелде. Республикала эпидемиолог

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда уҙған тәүлектә дауахананан тыш пневмония менән ауырыусылар һаны 169 кешегә артҡан. 2 октябрҙә Башҡортостанда 42 кешелә COVID-19 раҫланған. Пандемия башланғандан алып республикала бөтәһе 8873 коронавирус осрағы асыҡланған, 8551 кеше һауыҡҡан. Мәрхүмдәр һаны - 41. Рәсәйҙә барлығы 1194 меңдән ашыу кеше коронавирус йоҡторған, 970 меңдән ашыуы һауыҡҡан, һуңғы тәүлектә 9412 кеше сирләгән.

✓Республикала уҡыусыларҙың көҙгө каникулы 26 октябрҙән башлана, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Мәғариф һәм фән министрлығының матбуғат хеҙмәтенән. Балалар 4 ноябрь - Халыҡтар берҙәмлеге көнөнән һуң ғына мәктәпкә барасаҡ.

✓Башҡортостандың Сәйәси лидерлыҡ мәктәбенә уҡыусылар йыйыу башланды. Йәштәр араһынан яңы лидерҙарҙы билдәләү һәм республиканың ижтимағи-сәйәси тормошона йәлеп итеү төп маҡсаты булған мәктәптә һайлап алыу турын уңышлы үткән 18-ҙән 30 йәшкә тиклемгеләр тыңлаусы була ала. Ғаризалар 2020 йылдың 12 октябренә тиклем ҡабул ителә, икенсе этап онлайн әңгәмә рәүешендә уҙа. Уҡытыу 19 октябрҙән башлана.

✓Өфө дәүләт авиация техник университеты ғалимдары иттрий молибдаты нигеҙендә утка сыҙамлы яңы япма уйлап тапҡан һәм патент алған. Вуздың машиналар төҙөү технологияһы кафедраһы доценты Эдуард Варданян әйтеүенсә, 3 йыл элек ғалимдарға температура 1500 градус булғанда деталдең (авиация двигателенең турбина башы) эшмәкәрлеген тәьмин итеү бурысы йөкмәтелгән. Уларҙың эш һөҙөмтәһе Бөтә Рәсәй авиация материалдарын ғилми-тикшеренеү институтында уҙған түңәрәк өҫтәлдә юғары баһаланған.

✓Баймаҡта йылҡы ите эшкәртеү комплексы төҙөләсәк. Был проектты Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировҡа фермер хужалығы етәксеһе, эшҡыуар Фирҙәүес Хәлимов тәҡдим итте һәм "Инвестчас" барышында комплекс төҙөү 22,3 млн һумға төшәсәген әйтте. Предприятиела мал һуйыу, йылҡы һәм һыйыр итенән ярымфабрикаттар әҙерләү цехтары буласаҡ. Шул иҫәптән хәләл ризыҡ та эшләнәсәк. Продукция төбәктең мәктәп, дауахана һәм һатыу нөктәләренә сығарыласаҡ. Радий Хәбиров Хөкүмәткә комплекстың милек мәсьәләләрен хәл итеүҙә ярҙам күрһәтергә ҡушты.

БЫЛ АЙҘА...

**Ваҡыттың үтеүе - тиҙлегенә күҙ эйәрмәй! Аҡҡан һыу һымаҡ, тиер ине боронғолар. Һиҙҙермәй генә ҡарасай ҙа яҡынланы. Көн ҡыҫҡарҙы, эңер бик иртә төшә һәм, ғөмүмән, был айҙа төндәр генә түгел, иртә таң менән дә дөм-ҡараңғы була. Аяҙ төндәрҙә ай яҡтыһын мул һибә, йондоҙҙар ҙа ап-асыҡ күренә. Фенологтар әйтеүенсә, ҡарасай башҡа айҙарға ҡарағанда һауа торошоноң тотороҡлораҡ булыуы менән айырылып тора, ә шулай ҙа кем белә - был айҙа һуңлаған әбейҙәр сыуағын да, ҡар яуып һалып ҡуйғанын да күргән бар.**

# ҠАРАСАЙҘА БАР БЕР КӨН



Дөрөҫ, октябрҙә быңдай көтөлмәгән үҙгәрештәр һирәк була, күберәк йонсоу, быҫҡаҡ ямғырҙары менән күҙ алдына килә ул. Һәр хәлдә теге йәки был айҙа көн торошон алдан күрәҙәләүгә ҡарағанда, йылдар буйы йәшәп килгән халыҡ һынамыштарына һылтаныу күпкә ышаныслыраҡ.

Мәҫәлән:

- Ҡарасайҙа иртәнсәк үләндәргә ҡарлы ҡырау ятһа, көндөҙ йә кис ямғыр яуыр.

- Айҙың тәүге көнө һауала осоп барған торналар күренһә, бер-ике аҙнанан ҡаты ҡырауҙар төшөр.

- **3 октябрҙә** төньяҡтан ел иҫһә, һыуыҡҡа тартыр, ә көньяҡтан - йылы килтерер.

- Төнгө күк йөҙөндә йондоҙҙар яҡты янһа, иртәгәһе көн ҡояшлы, йылы булыр.

- **5 октябргә** ҡайын япраҡтарын ҡоймаһа, ҡар оҙаҡ яумаҫ.

- **8 октябрҙә** тәүге ҡар яуһа, ысын ҡыш ноябрҙең 20-ләрендә башланыр, ай аҙағында урманда бәшмәк тапһағыҙ, ҡар оҙаҡ яумаҫ әле.

- Балан уңып, япраҡтары оҙаҡ йәшел көйө ултырһа, көҙ йылы килер.

- Миләш уңһа - йонсоу көҙгә, уңмаһа, көҙ ҡоро, ә ҡыш һәүетемсә килер.

Ҡарасайҙың иҫтәлекле көндәлеге ғүмер көҙөн кисереүсе халыҡ - Өлкән йәштәгеләр көнө **(1)** менән асыла. Замана ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, һәр кемгә лә ғүмер көҙҙәренең сыуаҡ, йылы һәм ҡыуаныстар менән тулы булыуын теләп, яҡындары, эргә-тирәләгеләре хәстәрлегендә йәшәргә насип итһен ине Хоҙай. Ысын булһа, киләһе йылдан уртаса пенсия күләме бер аҙ артасаҡ һәм 17 меңдән ашыу тәшкил итәсәк, тигән вәғәҙәләүҙәр күренеп ҡалды интернет селтәрҙәрендә. Иләнмәгән-һуғылмағанға әллә ни өмөтләнеп тә булмай, унан, "Справедливая Россия" фракцияһы лидеры Сергей Миронов әйтмешләй, пенсионерҙарға бынан файҙа булырмы икән, сөнки шуға ярашлы хаҡтар ҙа арта бара бит. Иң тәүҙә хаҡтарҙы тотороҡландырыу һәм иҡтисад нигеҙен нығытыу кәрәк, шуныһыҙ теге йә был аҙ килемле категория кешеләренә аҡса таратыу ғына фәҡирлектән ҡотолоу юлы түгеллеге бөтәбеҙгә лә яҡшы мәғлүм.

Республика көнө - 1990 йылда Башҡортостан суверенитеты тураһында Декларация ҡабул ителгән көн **(11)** - суверенитет төшөнсәһе ысынбарлығыбыҙҙан да, был туралағы документтарҙан да алып ташланһа ла календарҙа ҡыҙыл менән билдәләнеп, байрам булып иҫәпләнеүен дауам итә. Эйе, тарихтан барыбер уның айырым биттәрен йолҡоп алып ташлап булмай, тарихҡа кемдәрҙеңдер талабынса "корректировка" эшләп уны үҙгәртеү ҙә мөмкин түгел, бәхеткә. Ул көн - халҡыбыҙҙың ҡаҡшамаҫ ихтыярына шаһит булған тере тарих бите. Әйткәндәй, быйыл суверенитет тураһында Декларация ҡабул ителеүгә - 30 йыл, тик ниңә был турала ләм-мим? Хәйер, халҡыбыҙға байрам итергә форсат та юҡ: республикабыҙҙың әле бер, әле икенсе биләмәһендә ул быуаттар буйы көн иткән туған ергенәһен үҙ күкрәген ҡуйып ҡомһоҙ промышленниктарҙан яҡлау менән мәшғүл. Халыҡтан һорап-нитеп, һөйләшеп тә тормаҫтан, сит төбәктәрҙән бай компаниялар халыҡтың мал көткән туғайлыҡтарын, һутлы үләнле сабынлыҡтарын килеп баҫып алып, ҡеүәтле техника менән еребеҙҙе соҡой, алтын, баҡыр, таш, тағын әллә ниҙәр эҙләй - бөтөн файҙалыһын үҙләштереп, урындағы халыҡҡа йөҙө-йөрәге йыртылып, аҡтарылған яралы ер, гигант соҡорҙар, уларҙа йыйылған ағыулы һыулы яһалма быуа-күлдәр генә ҡалдырып китмәксе. Ярай ҙа, кәрәген алып, китеп кенә барһалар, юҡ, ерҙәребеҙгә аяуһыҙ яҫҡыныуҙар арҡандан-арта бара. Ә тиҙҙән яҡларлыҡ еребеҙ ҙә ҡалмаҫ, буғай: ошо көндәрҙә БР Дәүләт Йыйылышы депутаттары күпселек тауыш менән тәүге уҡыуҙа ер мөнәсәбәттәре тураһындағы законға урындағы муниципалитет ерҙәрен республиканың Ер һәм милек мөнәсәбәттәре министрлығы ҡарамағына күсереү тураһында үҙгәрештәр индерҙе. Был ҡарар киләсәктә ниҙәр күрһәтер, әйтеүе ҡыйын әлегә, һәр хәлдә ул халыҡ мәнфәғәтенән сығып эшләнгән аҙым булып, дөйөм республика именлеген ҡайғыртһа ине...

Ҡарасай, әйтелеүенсә, ҡара көҙҙөң йонсоу мәле булыуға ҡарамаҫтан, байтаҡ яҡты, сағыу һөнәри байрамдар һәм иҫтәлекле көндәргә бай: Халыҡ-ара музыка көнө **(1)**, Бөтөн донъя йылмайыу, Электрон почта, Халыҡ-ара социаль педагог көндәре **(2)**, Йыһан ғәскәрҙәре, Бөтөн донъя хайуандарҙы яҡлау **(4)**, Уҡытыусы, Халыҡ-ара табип, Бөтөн донъя архитектор, Халыҡ-ара торлаҡ көндәре **(5)**, Бөтөн донъя күреү һәләте **(8)**, Бөтөн донъя почта **(9)**, Бөтөн донъя психик сәләмәтлек (10), Ауыл хужалығы һәм эшкәртеү сәнәғәте хеҙмәтсәндәре, Халыҡ-ара ҡыҙҙар көндәре **(11)**, Башҡортостан Республикаһының Дәүләт гимны һәм Дәүләт гербы тураһында БР Законы ҡабул ителгән көн **(12)**, Халыҡ-ара стихия фажиғәләре хәүефен кәметеү **(13)**, Халыҡ-ара стандартлаштырыу **(14)**, Халыҡ-ара ауыл ҡатын-ҡыҙҙары көнө **(15)**, Бөтөн донъя икмәк **(16)**, Халыҡ-ара фәҡирлекте бөтөрөү өсөн көрәш **(17)**, Аҙыҡ сәнәғәте хеҙмәтсәндәре, Юл хеҙмәте эшсәндәре, Башҡортостан өлкә комсомол ойошмаһы барлыҡҡа килеүгә 100 йыл тулған көндәр **(18)**, Халыҡ-ара ашнаҡсы **(20)**, Финанс-иҡтисад хеҙмәте, Аҡ торналар байрамы **(22)**, Махсус тәғәйенләнеш подразделениелар, Халыҡ-ара Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы көндәре **(24)**, Ҡатын-ҡыҙҙарҙың тыныслыҡ өсөн көрәш көнө **(25)**, Халыҡ-ара мәктәп китапханалары **(26)**, Бөтөн донъя инсульт менән көрәш **(29)**, Сәйәси золом ҡорбандарын иҫкә алыу **(30)**, Бөтөн донъя гимнастика, Бөтөн донъя ҡалалар, Халыҡ-ара экономия көндәре **(31)**.

**Ҡарасайҙа тыуғандар:**

**2 -** дәүләт эшмәкәре, Башҡортостан милли хәрәкәтендә ҡатнашыусы, 1928-1930 йылдарҙа БАССР мәғариф халыҡ комиссары **Кәрим Иҙелғужиндың тыуыуына - 125 йыл** (1895-1937).

**14 -** шағирә, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, 1991-1998 йылдарҙа Татарстан Республикаһы Президенты Аппаратының милләт-ара мөнәсәбәттәр бүлеге референты, Ҡаҙан ҡалаһы башҡорттары Ҡоролтайы етәксеһе, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Халыҡтар дуҫлығы ордены кавалеры (сығышы менән Ишембай районынан) **Фирҙәүес Бәшироваға - 75 йәш** (1945).

**17 -** дәүләт эшмәкәре, 1925-1930 йылдарҙа БАССР Халыҡ комиссарҙары Советы рәйесе, СССР-ҙың Башҡарма Комитет ағзаһы **Әхсән Мөхәмәтҡоловтың тыуыуына - 125 йыл** (1895-1938).

**-** шағирә, педагог-методист, филология фәндәре кандидаты, Башҡортостан мәктәбенең атҡаҙанған уҡытыусыһы **Рәсимә Ураҡсинаның тыуыуына - 70 йыл** (1950-2015).

**-** яҙыусы, Башҡортостан Яҙыусылар берлеге идараһының әҙәби консультанты, яуаплы секретары, 1990-1992 йылдарҙа "Китап" нәшриәте директоры **Аҫылғужа Баһумановтың тыуыуына - 75 йыл** (1945-2005).

**25 -** яҙыусы, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, 1931-1937 йылдарҙа Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитеты рәйесе, 1934-1937 йылдарҙа БАССР Яҙыусылар берлеге рәйесе, БАССР-ҙың атҡаҙанған совет әҙәбиәте һәм сәнғәте эшмәкәре **Афзал Таһировтың тыуыуына - 130 йыл** (1890-1937).

**29 -** йырсы, композитор, йәмәғәт эшмәкәре, Мәскәү консерваторияһы ҡарамағында Башҡортостан бүлеген ойоштороусыларҙың береһе, БАССР-ҙың халыҡ артисы **Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың тыуыуына - 125 йыл** (1895-1937).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

хәүефһеҙлек мәсьәләһенә туҡталып, Радий Хәбиров былай тине: "Күп кенә Европа илдәре тағы ла коронавирус тотҡонлоғо аҫтында. Беҙҙең күршеләрҙә лә йоғошло сир менән ауырыусылар һаны арта бара. Был беҙгә лә килеп етеүе бар. Быңдай шарттарҙа көсөргәнешлекте бер аҙ йомшарта төшөүебеҙ күренде, быға юл ҡуйырға ярамай, әйҙәгеҙ, үҙебеҙҙе оҙайлы эшкә әҙерләйек: көҙгө-ҡышҡы осор ябай булмаясаҡ". Шуны иҫтә тотоп, Өфөлә COVID-19 пациенттары өсөн дауаханаларҙа 200 өҫтәмә урын булдырылды. Республика Башлығы грипҡа ҡаршы вакцинациялауҙы дауам итергә ҡушты. Һаулыҡ һаҡлау министры М. Забелин әйтеүенсә, гриптан вакцина эшләткәндәр һанын 2 млн кешегә еткереү ҡарала. РФ Президенты Владимир Путин яңыраҡ көсәйә барыусы пандемия шарттарында Рәсәй халҡына үҙҙәре һәм яҡындары хәүефһеҙлеге өсөн яуаплылыҡ тойорға ҡушып саҡырҙы. Иркенләп китергә, һиҙгерлекте юғалтырға һис тә ярамай. Эпидемия менән көрәш бөтмәгән әле, ул дауам итә, тип белдерҙе ул РФ Дәүләт советы президиумының киңәйтелгән ултырышында.

Күренеүенсә, зәһәрле сир мөмкин тиклем беҙҙе урап үтһен, йәки уны еңелерәк кисереү өсөн етәкселек барыһын да эшләргә тырыша, тик халыҡ аңына аңлатыу саралары ғына барып етмәй. Бәлки, был йәһәттән әҙәп һаҡлап тороу кәрәкмәйҙер - һүҙ бит йәшәү менән үлем тураһында бара. Ана бит, сит илдәрҙә генә түгел, Мәскәүҙә һәм башҡа төбәктәрҙә лә бер ҙә тәртипһеҙ кешенең хәтерен һаҡлап тормайҙар һәм был әлеге шарттарҙа кәрәкмәй ҙә. Бары тик тәртип, талап ителгәнде үтәү, үтәмәгәндәргә ҡарата ҡәтғи саралар күреү кәрәк. Әҙәпте аңламаған кешеләргә әҙәп телендә аңлатып булмай ул. Үҙен генә түгел, эргә-тирәһендәгеләрҙе лә бына шулай күрәләтә хәүефкә дусар итеүҙе, үлемесле сирҙе танырға теләмәүҙе ахмаҡлыҡ тимәй, башҡа ни әйтәһең? Ҡатыраҡ саралар ғына аңдарына килтерер, бәлки, ундайҙарҙы.

**Фирүзә ИШБИРҘИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Көҙ Башҡортостандан 4 меңдән ашыу кеше хәрби хеҙмәткә алына. Ғәскәри хеҙмәткә алыу кампанияһы 1 октябрҙән башланды, егеттәр фәнни частарға йүнәлтелә, шул иҫәптән "Эра" технополисына ла. Республиканың Хәрби комиссариатында хәбәр итеүҙәренсә, һалдаттарҙы коронавирус инфекцияһынан һаҡлау өсөн барлыҡ тейешле саралар күрелә.

✓Салауат башҡорт драма театры Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ноғман Мусиндың "Ике ир һәм бер ҡатын" повесы буйынса фантастик төш сәхнәләштерҙе. "Ғүмерҙең бер мәле" спектакле 2 октябрҙә күрһәтелде. Повесть буйынса инсценировканы Зөһрә Бураҡаева яҙған. Спектаклдә йәш ҡуйыусы режиссер Лиана Ниғмәтуллина сәхнәләштерә. Спектакль "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Кесе Ватан мәҙәниәте" проекты сиктәрендә бойомға ашырыла.

✓Рәсәй Хеҙмәт министрлығы аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙән булған балаларға түләүҙәр күләмен арттырырға ниәтләй. Был маҡсатта 95 млрд һум бүленә. "Әгәр ғаиләнең йән башына уртаса килеме йәшәү минимумының яртыһын түләгән осраҡта шул сумманы ҡапламай икән, киләһе йылдан бер балаға айлыҡ түләүҙәр күләмен төбәк йәшәү минимумына тиклем күтәреү планлаштырыла", - тип хәбәр итә "РИА Новости". Быға тиклем 3 йәштән 7 йәшкә тиклемге балаларға айлыҡ түләүҙәр 2020 йылда билдәләнгәйне, быға 170 млрд һум бүленгән. Әле 3,8 млн бала тәрбиәләнгән ғаиләләр шуны ала.

✓"Инвестчас" барышында Сибай һәм Баймаҡта миҙгелендә 30 тонна киптерелгән бейә һөтө етештереүсе цехтар төҙөлә. Эште "Экопродукт" компанияһы ойоштора, һынау өсөн цех 2021 йылда асыла. Предприятие эске баҙарға 450 мең литр бейә һөтө һәм ҡымыҙ етештереүҙән тыш, сит илдәргә лә сығарасаҡ. Дөйөм инвестиция хаҡы 676 млн һум, проектты тормошҡа ашырыу халыҡты 104 яңы эш урыны менән тәьмин итәсәк.

✓Өфөлә "Боронғо башҡорт кәсептәре замандаш оҫталар ҡулы менән" күргәҙмәһе асыла. Уны БР Һөнәр палатаһы менән берлектә В.И. Ленин Йорт-музейы ойоштора. Күргәҙмә Республика көнөнә арнала һәм башҡорттарҙың боронғо кәсеп төрҙәрен, уларҙың үҫешен сағылдыра. Ҡыҙыҡлы экспонаттарҙың береһе - башҡорт рәссамы Әлиә Байрамғолова һүрәте буйынса төрлө таштарҙан эшләнгән картина.

ҠЫҪҠАСА

# "ТЫНЛЫҠ СӘҒӘТЕ"

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "тынлыҡ сәғәте" тураһында законға ҡул ҡуйҙы. Законға ярашлы, көндөҙгө сәғәт 1-ҙән 3-кә тиклем күп фатирлы йорттарҙа һәм ятаҡтарҙа шау-шыулы ремонт эштәрен башҡарыу тыйыла.** "Тынлыҡ сәғәте"ндә законды боҙоусыларға штраф һалына. Граждандарҙы - 1 меңдән 2 мең һумға, вазифалы кешеләрҙе - 3 меңдән 5 мең һумға, юридик берәмектәрҙе 10 меңдән 15 мең һумғаса штраф көтә. Яңы төҙөлгән йорттарҙа улар файҙаланыуға тапшырылған ваҡыттан алып йыл ярым дауамында "тынлыҡ сәғәте" булмай. Был аварияны бөтөрөү йәки халыҡтың хәүефһеҙлеген тәьмин итеү менән бәйле ашығыс эштәр кеүек махсус осраҡтарға ла ҡағылмай. Яңы ҡағиҙәләр 2020 йылдың 3 октябренән ғәмәлгә инде.

✓ **Рәсәй Президенты В. Путин ылыҫлы һәм ҡиммәтле япраҡлы ағас төрҙәренән эшкәртелмәгән ағас-таҡталарҙы илдән сығарыуҙы тулыһынса тыйҙы.** "РИА Новости" хәбәр итеүенсә, һүҙ эшкәртелмәгән йәки ҡүҙ буяу өсөн генә, насар эшкәртелгән ылыҫлы һәм ҡиммәтле башҡа ағас төрҙәре тураһында бара. Президент енәйәткә урын булмаһын өсөн урман ҡырҡыуҙан алып, әҙер продукция етештереүгә тиклем бөтә эш сылбырына асыҡлыҡ индерергә ҡушты. Тыйыу 2022 йылдың 1 ғинуарынан көсөнә инә. Законһыҙ урман ҡырҡыу һәм уны эшкәртеү мәсьәләһе республика кимәлендә лә йыш ҡүтәрелә. Мәҫәлән, былтыр Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Ҡариҙел районында уҙған "Ресурстар, партнерлыҡ, интеграция" урмансылыҡ форумында ағас эшкәртеү мәсьәләһе ҡатмарлы булыуын билдәләгәйне. Башҡортостанда ҡырҡылған ағастың тауар етештереүгә тотонолған өлөшө 65-70 процент тәшкил итә, ҡалғаны ҡалдыҡтар булып иҫәпләнә. Үҙ сиратында, был ҡалдыҡтарҙың дөйөм күләменән 20 проценты ғына ағыулыҡ рәүешендә тотонола, 80 проценты ташлана.

✓ **Рәсәй банкы бөтә пенсионерҙарҙы "Мир" милли түләү системаһы карталарына күсереү ваҡытын 2020 йылдың 31 декабренә тиклем оҙайтты.** Был хаҡта ТАСС хәбәр итте. Тәүҙә пенсияны һәм башҡа социаль түләүҙәрҙе 2020 йылдың 1 июленә хәтлем милли түләү системаһы карталарына күсереү планлаштырылғайны. Әммә коронавирус пандемияһы шарттарында был эш 2020 йылдың 1 октябренә тиклем кисектерелде. Әле банк вәкилдәре хәбәр итеүенсә, пенсионерҙарҙың күбеһе Мир" картаһы менән ҡулланһа ла, ниндәйҙер сәбәптәр буйынса уны алмаған кешеләр бар. Шуға күрә был эш 31 декабргә тиклем оҙайтылған. Билдәләнеүенсә, хаҡлы ялдағыларҙың пенсияны альтернатив ысулдар, мәҫәлән, бер ниндәй ҙә карта бәйләнмәгән иҫәпкә, һаҡлыҡ кенәгәһенә алыу мөмкинлеге лә һаҡлана.

✓ **Башҡортостанда "Республикала демография хәлен яҡшыртыу" дәүләт программаһын булдырыу күҙаллана.** Был тәҡдим республика парламентында уҙған "Башҡортостандың демография киләсәге: заманды яңы талаптары" тыңлауҙары һөҙөмтәһе булып, Хөкүмәткә йүнәлтелгән. "Бер йыл эсендә беҙҙә халыҡ иҫәбе яҡынса 13 меңгә ҡыҫҡарҙы. 2019 йылда үлгәндәр һаны тыуымға ҡарағанда 17 процентҡа юғары. Бының тәрән социаль-иҡтисади сәбәптәре булыуын аңларға кәрәк, - тине был турала БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев һәм мәсьәлә буйынса төрлө яҡлы эшмәкәрлек талап ителеүен билдәләне.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БАШҠОРТ ЫРЫУҘАРЫ КАРТАҺЫ



**1 октябрҙә "Торатау" Конгресс-холл бинаһында Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты Башҡорт халҡының тарихы һәм үҫеше буйынса комиссияһының киңәйтелгән ултырышы үтте. Уның сиктәрендә "Башҡорт ырыуҙары һәм ауылдарының картаһы" проектының емештәре киң йәмәғәтселеккә күрһәтелде.**

Башҡорт ырыуҙарының айырым бер картаһын төҙөү, һәр ырыуҙың тамғаларын, атрибутикаһын өйрәнеү һәм заманса талаптарға яраҡлаштырыу ниәтендә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡорт геральдикаһы һәм ырыу атрибутикаһы буйынса айырым комиссия ойоштора. Бынан тыш, ултырышта Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы һәм Рәсәй геральдистар берлегенең уртаҡ ижад емеше - башҡорт ырыуҙарының гербтары күрһәтелде. Ултырыш сиктәрендә Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш өлөшө өсөн төҙөлгән башҡорт ырыуҙарының айырым картаһы һәм төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының мәҙәниәтенә, тарихына арналған "Без башҡортлар" тип исемләнгән китаптың исем туйы ла уҙҙы. Эшлекле һөйләшеүҙә башҡорт ырыуҙары вәкилдәре, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзалары һәм район-ҡала Башҡорттары ҡоролтайҙары етәкселәре ҡатнашты.

# ҺАЛЫМ ТҮЛӘМӘЙӘСӘКТӘР

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы "Алға" махсус иҡтисади зонаһы резиденттары өсөн һалым льготалары тураһында закон ҡабул итте. Республика Башлығы ҡул ҡуйған документ 2021 йылдың 1 ғинуарынан көсөнә инә.**

Махсус иҡтисади зона резиденттары биш йылға - табышҡа һалымдан, 10 йылға - йөк машиналарына, махсус техникаға, автобустарға транспорт һалымы түләүҙән, биш йылға - ергә һалымдан, 10 йылға компания милкенә һалымдан азат ителә.

2021-2022 йылдарҙа льготалар күләме яҡынса 600 миллион һумға баһаланған. "Яҡын арала был аҡса республика бюджетына инмәй, ләкин һөҙөмтәлә төбәк биргәнгә ҡарағанда күберәк алырға тейеш. Хәҙер Рәсәйҙә ошондай 33 майҙансыҡ бар, ләкин бөтә төбәктәрҙә лә түгел. Беҙҙә шундай зона булыуҙан файҙаланып, бынан республика үҫеше, халыҡтың именлеге өсөн күберәк файҙа алырға тырышырға кәрәк. Был осорҙа инвесторҙар 20 миллиард һум аҡса һалып, меңгә яҡын эш урыны булдырыр тип күҙ уңында тотола. Дөйөм алғанда, перспективалы инвестиция портфеле бөгөн, 4 мең самаһы яңы эш урыны булдырып, 100 миллиард һум кимәлендә баһалана", - тип иҫәпләй Башҡортостан парламенты спикеры Константин Толкачев.

"Алға" махсус иҡтисади зонаһы быйыл июндә Стәрлетамаҡ һәм Ишембай райондары биләмәһендә ойошторолдо. Әлеге ваҡытта уның үҙ етештереү майҙансыҡтарын төҙөй башлаған ике рәсми резиденты бар. Бер үк ваҡытта предприятиелар төҙөү өсөн кәрәкле инфраструктура ҡорола (һыу, газ, электр уты, юлдар), уға республика бюджеты 2025 йылға тиклем 6,3 миллиард һум бүлә.

# ЙӘШТӘРГӘ...



**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың һаулыҡ һаҡлау, социаль сәйәсәт һәм ветерандар мәсьәләләре буйынса комитеты рәйесе урынбаҫары Римма Үтәшева йәш ғаиләләргә йорт йәки фатир алыуға процентһыҙ кредит бирергә, ә уны түләүҙе балалар һанына ҡарап билдәләргә тәҡдим итте.**

Был турала ул Башҡортостандың демография киләсәгенә арналған ултырышта белдерҙе, шулай уҡ парламентарий ЗАГС органдарында өйләнешкән йәштәрҙән эшкә урынлашыу, торлаҡ һәм балалар табыу тураһында һорауҙарға яуап алырға кәңәш итә. Быһдай статистика яңы ғаиләләр һанын ғына түгел, уларҙың мөмкинлектәрен билдәләргә лә ярҙам итәсәк.

"Бала табыу өсөн яҡшы мәл - 21-29 йәш. Был студент булған осорға тура тура. Бәлки, ғаилә ятаҡтан бүлмә ала алыр. Бала тыуғас та, уҡыуҙы дауам итергә лә, аҙаҡ эш табыу өсөн дә ҙур ярҙам кәрәк. Калининград өлкәһендә 2020 йылдан "Студент" әсәлек капиталы тигән проект тормошҡа ашырыла. Был дәүләт вузы йәки ссузында уҡыған осорҙа, уны тамамлағандан һуң өс йыл эсендә бала тапҡан ҡатындарға 300 мең һум күләмендә бер таҡыр түләнә торған аҡса. Бюджет аҡсаһы йүнәлтмәле һәм торлаҡ, фатирҙы яҡшыртыуға, коляска йәки автомобиль өсөн махсус кресло һатып алыу тураһында документтар тапшырғандан һуң түләнә", - ти Римма Үтәшева.

Әлеге ваҡытта өсөнсө бала табыу ғына халыҡ иҫәбен минималь арттырыуға килтерә, тип иҫәпләй депутат. Һорау алыуҙар мәғлүмәттәренә ярашлы, 32 проценттан ашыу йәш ғаилә дәүләт бар яҡлап та ярҙам күрһәтһә генә өс йәки унан күберәк бала табырға теләй. Ә шул уҡ ваҡытта йыл һайын 750 меңдән ашыу аборт осрағы теркәлә, һуңғы 8 йыл эсендә кейәүгә сыҡҡан ҡыҙҙарҙың уртаса йәш күрһәткесе 25-34 йәшкә еткән, беренсегә бала табыусылар уртаса 29 йәштә. Росстат килтергән мәғлүмәттәргә иһә, 2019 йылда илдә халыҡ иҫәбенең тәбиғи кәмеү кимәле 260 мең кешенән ашыу тәшкил иткән, был һуңғы 11 йылда иң ҙур күрһәткес. БМО прогнозына ярашлы, Рәсәй 2025 йылға 11 миллион кешене юғалтыуы бар.

# БАЛАЛАР АҒЫУЛАНА



**Башҡортостанда 2020 йылдың һигеҙ айында 25 бала алкоголдән ағыуланған, тип хәбәр итте Роспотребнадзорҙың республика идаралығы.**

Әйтәйек, Өфөлә 13 бала спиртлы эсемлектәр ҡулланыу эҙемтәләренән вафат булған. Улар араһында туғыҙ айлыҡ сабый һәм бер йәшлек бала бар. Үлгәндәр араһынан дүрт балаға - ун өсәр йәш, бишәүһе 14 йәшлек үҫмерҙәр. Шулай уҡ Стәрлетамаҡ, Бөрө, Ишембай, Салауат, Дүртөйлө ҡалаларында, Салауат, Өфө райондарында балалар үлеме осраҡтары теркәлгән. Йыл башынан республикала 105 кеше хәмерҙән ағыуланып вафат булған. Спирт ҡулланыуҙан үлем осраҡтарының күбеһе - Өфөлә.

Ғинуар-август айҙарында наркотик матдәләр менән ағыуланыуҙың 96 осрағы теркәлгән, шуларҙың 65-е - үлемесле. Углерод окисынан 116 кеше ағыуланған, 90-ы йән биргән. Аҙыҡ-түлек менән ағыуланыуҙың 26 осрағы, шуларҙың 22-һе - бөшмәк менән, теркәлгән. Токсиколигик мониторингтың яҡынса мәғлүмәттәре буйынса, ғинуарҙан августҡа тиклем 1 638 химик этиологиялы киҫкен ағыуланыу осрағы күҙәтелгән, шуларҙың 380-е, йәки 23,2 проценты - үлемесле.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Өфө хакимиәтендәге сираттағы оператив кәңәшмәлә хакимиәт башлығының беренсе урынбаҫары Радмил Мөслимов үткән шәмбелә уҙған "Йәшел Башҡортостан - Йәшел Рәсәй" экология өмәһе йомғаҡтары менән таныштырҙы. Дөйөм ҡала өмәһендә барлығы 24 мең кеше ҡатнашҡан, 717 берәмек техника йәлеп ителгән, 120 майҙансыҡта 2700 ағас һәм 450 ҡыуаҡ ултыртылған. "Беренсе Май" мәҙәниәт һәм ял паркында Бөйөк Ватан һуғышы юнгалары хөрмәтенә "Соловецкий юнгалары" аллеяһы, Киров районының Мөбәрәков урамында юнармеецтар скверы булдырыла.

✓ Ҡала тормошон тәьмин итеү буйынса идаралыҡ начальнигы Антон Тристан "Башҡорт ихаталары" республика программаһы сиктәрендә быйыл барлығы 34 ихата (164 күп фатирлы йорт) комплекслы төҙөкләндерелә, тип хәбәр итте. Әлеге ваҡытта 3 ихата тапшырылған, тиҙҙән 8 ихатала эштәр тамамлана, тағы 5-е төҙөкләндерелә. Ҡайһы бер объекттарҙа эштәр яй бара һәм килешеүҙәрҙә билдәләнгән ваҡытҡа тап килмәй. Быһдай объекттар Октябрь районында - берәү, Совет районында - 4. Эштәрҙе башҡарыу ваҡытын боҙған өсөн подрядойошмаларына штраф санкциялары ҡулланыласаҡ.

✓ Өфөлә Мостай Кәрим урамында ике яҡлы хәрәкәт асыла. Бында юлды ремонтлау эштәрен октябрҙә тамамлау күҙаллана. Транспорт Киров урамынан Чернышевский урамына тиклемге араурыҡта ике йүнәлештә хәрәкәт итергә тейеш. Тиҙҙән бында махсус юл билдәләре ҡуйыла. "2021 йылдың яҙында "Арт-КВАДРАТ" ижад майҙансығы янында Коммунистик урамдан Чернышевский урамына тиклем 60 төптән ашыу йәш ағас ултыртыла", - тип белдерҙеләр Өфө хакимиәтендә.

✓ Өфөнөң Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһында һәм Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында башҡорт телендә "Урал батыр" анимация фильмы күрһәтелде. "Урал батыр" эпосы буйынса анимация фильмы һәм комикстар китабын "Аҡбуҙат" балалар журналы 2018 йылда алған Башҡортостан Республикаһы Башлығы гранты аҡсаһына эшләне.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

***✓ Республика етәксеһе бар тәҡдимдәребеҙҙе ыңғай ҡабул итте. Быға са булмаған күренеш бит был. Ә киләһе йылдың яҙ айҙарында башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының съезы ла уҙғарыласаҡ.***

*МӘҒАРИФ*

# ӘЛДӘ УҠЫТЫУСЫМЫН!

**(Башы 1-се биттә).**

**Теманы дауам итеп, Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары форумында ҡатнашҡан педагогтарҙың да фекерен тыңланыҡ.**

***Эльза Толомбаева, Өфө ҡалаһының "35-се белем биреү үҙәге" башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы:*** Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының төбәк-ара форумы яңы форматта, эшлекле шарттарҙа барыуы менән күңелгә ятты. 13 майҙансыҡта минең өсөн бик үк яңы булмаған, әммә мөһим темалар: юғары уҡыу йорттары менән белем биреү учреждениелары араһында үҙ-ара хеҙмәттәшлек формалары, юғары уҡыу йорттарында башҡорт телен уҡытыу, башҡорт телен дистанцион уҡытыу, федераль конкурстарҙа ҡатнашыу, республика гранттарын юллау тәртибе, ата-әсәләр менән уртаҡ тел табыу, тыуған яҡты өйрәнеү дәрестәрен алып барыу, башҡорт телендә мәктәп телевидениеһын ойоштороу, төньяҡ-көнбайыш диалекты шарттарында башҡорт теле һәм башҡа мәсьәләләр яҡтыртылды. Тәүге көндә үткәрелгән оҫталыҡ дәрестәрендә дистанцион уҡытыуға әҙер булған, мәғлүмәт, материалдар табырлыҡ яңы порталдар, сайттар менән таныштыҡ, стресҡа ҡаршы тороу, лидерлыҡ, һөҙөмтәле коммуникациялар, уңышҡа өлгәшеү ресурстары кеүек уҡытыусылар өсөн бик актуаль мәсьәләләр буйынса тренингтар үттек. Интерактив һәм мультимедиа ресурстарҙы күреп, уларҙы дәрестәрҙә ҡулланып, иң битараф баланың да иғтибарын йәлеп итергә мөмкин, тигән һығымтамды нығыттым был аралашыуҙарҙан һуң. Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров менән осрашҡанда яңғыраған эшлекле тәҡдимдәр күңелгә ятты. Мәҫәлән, мәктәпкәсә белем биреү учреждениелары хеҙмәткәрҙәре "Йыл тәрбиәсеһе" республика конкурсын башҡорт төркөмдәрендә эшләүселәр араһында айырым үткәрергә тәҡдим итте. Эшкә урынлашҡанда инглиз теленән сертификаттар булыуы хеҙмәткәргә өҫтөнлөк бирә, башҡорт теленән дә шундай сертификат булдырыу һәм эшкә алғанда өҫтәмә "плюс" итеп ҡарау кәрәклеге хаҡында ла тәҡдим яңғыраны. Башҡа милләт балаларына башҡорт телен уҡытҡан педагог булараҡ, минә иң мөһиме эшемә еңеллек килтерерҙәй "Мин башҡортса һөйләшәм" тигән онлайн платформа булдырыу һәм шул рәүешле дистанцион уҡытыуға ярҙам итеү тәҡдиме оҡшаны. "Elschool" берҙәм электрон проектты айырмалы рәүештә башҡорт теле буйынса эшләнгән платформаның етешһеҙ яҡтары булырға тейеш түгел. Республика етәксеһе бар тәҡдимдәребеҙҙе ыңғай ҡабул итте һәм бигерәк тә Башҡортостанда төрки телдәр буйынса халыҡ-ара олимпиада ойоштороуға ҙур ҡыҙыҡһыныу белдерҙе.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары форумдан күтәренке кәйеф менән ҡайтты. Бер коллегам "Бөрөләнеп кенә килгәйнем, сәскә атып ҡайттым", - тип ебәрҙе хатта. Республика етәкселегенең ябай уҡытыусылар менән күҙгә-күҙ ҡарашып, башҡортса һөйләшеүе һәм хөрмәт белдереүе шулай ҡанатландырҙы. Быға са булмаған күренеш бит был. Ә киләһе йылдың яҙ айҙарында башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының съезы ла уҙғарыласаҡ, тип вәғәҙәләне Радий Фәрит улы. Тимәк, күңел һалып эшләргә, һөнәри үҫешкә ынтылырға сәбәп бар.

***Фәйрүзә Үтәбаева, Мостай Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы:*** 20 йыл уҡытыусы булып эшләүем осоронда мәғариф өлкәһендә үҙгәрештәр, башҡорт теле уҡытыусыһына ҡағылышлы хәл-ваҡиғалар күп булды. Әммә нәҡ Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының төбәк-ара форумы форматында бындай сара үткәрелгәне юҡ ине. Беренсе көн Милли мәғариф буйынса ресурс үҙәк төрлө темаларға арналған 13 майҙансыҡ эшен ойошторҙо. Һәр уҡытыусы үҙенә кәрәк тип тапҡан оҫталыҡ дәрестәрен ҡарай алды, мин "Башҡорт теленән дистанцион уҡытыуҙы нисек алып барырға" тигәненән һайланым. Бөгөн был иң көнүҙәк тема һәм дистанцион дәрестең үҙ алгоритмы бар, кейс-пакеттар төҙөү, онлайн платформаларҙы дөрөҫ һайлау, эш төрҙәрен ваҡытты күп сарыф итмәй әҙерләй белеү кәрәк. Онлайн уҡыуға күскәс, быларҙың барыһын да һәр кемебеҙ үҙ тәжрибәһендә өйрәнгәйне, белемдәрҙе дөйөмләштерҙек, ниһайәт. Ни тиһәң дә, балаларға башҡорт теле интернет киңлегендә лә урын алыуын, уның үҙ даирәһе барлығын күрһәтеү бик мөһим. Был йәһәттән башҡорт теле уҡытыусыһы ла эшләрлек әҙер платформалар бар, ә унда ҡулланырлыҡ материалдар һирәк ине һәм күнегеүҙәр, һораулама, тест, кейстарҙы һәр кем үҙе әҙерләне. Дистанцияла уҡыу быны ошондай мөһим эштәрҙе атҡарыуға, интернет киңлегенә башҡорт телен индереүгә һәм уҡытыусыларға кәрәкле материалдарҙы туплау эшен яйға һалырға булышлыҡ итте. Әйткәндәй, башҡорт теле уҡытыусылары былтыр сентябрь айында уҡ Zoom платформаһын үҙләштерҙе. Ресурс үҙәге "Туған тел илселәре" тигән проект сиктәрендә алдынғы уҡытыусыларға тап ошо платформа аша башҡорт телен өйрәтеү бурысын ҡуйғайны. Улар араһында мин дә бар инем. Шулай итеп, башҡа предмет уҡытыусыларынан айырмалы, беҙ дистанцион уҡытыуға Zoom үҙенсәлектәрен белеп индек. Быйыл иһә Ресурс үҙәк эшебеҙҙе еңеләштерер тағы ла бер ғәмәл башҡарған: "Мир родного языка" тигән портал-навигатор ойошторол, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһына кәрәк булған бөтә материалды бер урынға туплаған.



Икенсе һайлаған оҫтаханам "Цифрлаштырыу шарттарында башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһының һөнәри компетентлығы" тип аталды. Унда М. Аҡмулла исемендәге БДПУ уҡытыусылары онлайн эш алымдарында QR-кодтарҙы ҡулланырға өйрәтте һәм ниндәй курстар ойоштораса ҡтары тураһында мәғлүмәт бирҙе. Уҡытыусы заман талаптарына яуап бирерлек булырға тейешлеген аңлайым һәм бөгөнгө уҡыусының ихтыяжын ҡәнәғәтләндерерлек, тимәк, дәресеңде көтөп алырлыҡ итеп ойоштороу еңел эш түгеллеген беләм.

Форумдың икенсе көнөндә биш тема буйынса фекер ҡорҙары ойошторолдо һәм мин "Туған телде өйрәнеүҙә яңы талаптар һәм уны уҡытыу методикаһын камиллаштырыу" бүлегендә ҡатнаштым. Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Фәнүр Мөхәрәм улы Йәғәфәров алып барған ҡор ысын мәғәнәһендә төплө тәҡдимдәр майҙанына әүерелде. Тағы "Лидерлыҡ - хәҙерге заман уҡытыусыһының төп компетенцияһы" тип аталған тренингта ла булып өлгөрҙөм әле. "Башҡаға дөйәләй талабың булғансы, төймәләй даланың булһын" тип юҡҡа әйтмәйҙәр бит. Даланды ла үҫтерә белергә кәрәк.

Ғөмүмән, форум барышында Башҡортостан Башлығы Радий Фәрит улы Хәбировтың да башҡорт теленә һәм был өлкә белгестәренә булған иғтибарын тойҙоҡ. Шуны аңланым: беҙҙе тап башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булараҡ ихтирам итәләр, иғтибар бүләләр. Ана бит, беҙгә ниндәй ҙур ышаныс белдерәләр! Эшебеҙҙең мөһимлеген аңлайҙар, аңларға тырышалар. Үҙебеҙҙән үк кәңәш һорайҙар, теләктәребеҙҙе үтәрлек юлдар эҙләйҙәр. Шатланып, күңелем үҫеп ҡайттым. Әлдә уҡытыусымын!

***Ғәлиә Кәлимуллина, Ә.-З. Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернаты уҡытыусыһы:*** Форумға Ишембай районынан 6 кешенән торған делегация барҙыҡ һәм ойоштороусылар ҡушыуы буйынса төрлө фекер алышыу майҙансыҡтарында эшләнек. Бөтәбеҙҙе лә, билдәле булыуынса, тәү нәүбәттә дистанцион уҡытыуға арналған майҙансыҡ эше ҡыҙыҡһындырҙы.

Борсоған һорауҙар күп, әлбиттә. Туған телебеҙ - белем усаҡтарының ғына түгел, кеше, шәхес булараҡ, тәү сиратта, үҙебеҙҙең йөкмәткебеҙ, булмышыбыҙ, рухыбыҙ. Бына ошо ҡиммәттәр форум тәҡдим иткән ялтырауыҡ тәтәйҙәр, ҡурсаҡтар, заманса әүрәткестәр араһында юғалып ҡалмаҫмы йәки, бер көн килеп, ул ҡулайламаларҙы уйлап табыуға сарыф ителгән аҡсалар кеүек елгә осмаҫмы? Телебеҙ - гаджеттар өсөн ҡулайлаштырылған ҡушымта ғына түгел бит, беҙҙе бар итеүсе, беҙҙе кеше итеүсе мәңгелек ҡиммәт. Бына ниндәй борсоулы уйҙар менән ҡайттым мин беҙҙең һөнәри форумдан.

Форумға килгәндә үк мин башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәренә сәғәттәр арттырыуға асыҡлыҡ индерелмәҫме икән, тип өмөтләнгәйнем. Оҙаҡ йылдар башҡорт мәктәбендә эшләгән уҡытыусымын, башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрен 6 сәғәт уҡытҡан ваҡыттарым да булды, 3 сәғәт тә. Бына хәҙер юғары синыфтарҙа был предметтарға берәр сәғәт бүленә, бер уҡыу йылында 34 сәғәт. Ошо ғына ваҡыт эсендә, бөтәһе ни бары тәүлек ярымда, уҡыусы нимә өйрәнеп, нимә белеп сыға ала? Мәҫәлән, 10-сы синыфтар менән XX быуат әҙәбиәте формалашыуы темаһын башлайбыҙ. Ул үҙ эсенә үткән быуаттың 30-сы йылдар, Бөйөк Ватан һуғышы осоро әҙәбиәтен ала һәм 7 яҙыусы, 6 шағир ижадын, бынан тыш әҙәбиәт теорияһының үҙенсәлектәрен өйрәнәбеҙ. Ә 11-се синыф программаһында хәҙерге башҡорт әҙәбиәте тураһында төшөнсә булдырыу бурысы ҡуйылған: 7 прозаик, 9 шағир һәм 2 драматург ижады бирелә. Беҙ башҡорт әҙәбиәтен өйрәнеүгә пародия ғына яһамайбыҙмы икән? Ошо һорау мине нисә йыл борсой, һәм мин уға, ҡыҙғаныс, съезда ла, форумда ла яуап таба алманым. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәренең сәғәттәрен арттырып булмауын да аңлайым, сөнки юғары синыфтарҙы Берҙәм дәүләт имтиханына әҙерләгән коллегаларҙың, уҡыусыларҙың үҙҙәренең дә ризаһыҙлығы артыуы бар. Ә ул арарала башҡорт теле үҙаллы тормошҡа баҫырға әҙерләнгән, үҙаңы формалашып килгән йәштәрҙең тормошонан ҡыҫырыҡланып, мәктәптәрҙәге башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинеттары теленә генә әүерелә бара. Был форумда шуныһы ғына шатландырҙы: Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров беҙҙе аңларға тырыша, ишетергә теләй һәм борсоған һорауҙарыбыҙҙы үҙенә төбәп әйтә, һөйләшә алдыҡ.

**Сәриә ҒАРИПОВА
яҙып алды.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Юғары температуранан

❖ Эҫелә тән ҡыҙып, температура күтәрелеп йөрөгәндә йүкә, ромашка һәм үгәй инә үләне сәскәләренән, гөлйемештән әҙерләнгән сәй файҙалы. Нәтижәлерәк булһын өсөн лимон ҡушырға ла мөмкин.

*Ер еләге йәки ҡарағат япраҡтары һәм лимон һуты ҡушып әҙерләнгән төнәтмә тирләтә, шуға температураны 1-2 градусҡа түбәнәйтергә ярҙам итә.

*Бөтнөк үләне (мята) лә температураны яҡшы төшөрә. 1 балғалаҡ үләнде йылы һыуға йәки сәйгә ҡушып, көнөнә 1 тапҡыр эсеү ҙә етә. Был сәй юғары температуранан ғына түгел, баш ауырығанда ла ярҙам итә.

### Укроп төнәтмәһе

❖ Йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен укроп орлоҡтары төнәтмәһе ярҙамында дауаларға була. Уны әҙерләү өсөн 2 ҡалаҡ ыуылған укроп орлоғон термосҡа һалырға һәм ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға, 30-40 минут төнәтергә һәм һөҙөргә. Төнәтмәне көнөнә 3-5 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда яртышар стакан эсергә. Был дауаны атеросклероз булғанда (бигерәк тә баш мейеһе тамырҙары атеросклерозынан), гипертонияның башланғыс осоронда, хроник коронар етешмәүсәнлек, тынысландырыу сараһы итеп ҡулланырға була. Укроп төнәтмәһе артериаль һәм күҙҙәге баҫымды түбәнәйтә.

### Ҡурай еләге

❖ Ҡурай еләгенән шешеүгә һәм органдарҙың склерозына ҡаршы, организмды нығытыуға булышлыҡ иткән дауа әҙерләргә була. Бының өсөн 30 грамм ҡурай еләге емешенә 300 мл ҡайнар һыу ҡойорға һәм талғын утта 10 минут ҡайнатырға, 2-3 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Төнәтмәне шешенеүгә ҡаршы һәм тирҙе сығарыу өсөн көнөнә 2 тапҡыр 1-әр стаканлап эсергә. Шулай уҡ һалҡын тейҙергәндә, грипп менән сирләгәндә, ревматизм, атеросклероз булғанда һәм организм хәлһеҙләнгәндә ҡулланырға. Әммә бөйөр сирҙәре һәм подагра булғанда ҡурай еләген ҡулланыу ҡәтғи тыйыла. Йөклө ҡатын-ҡыҙҙарға был үҫемлектең япраҡтарынан яһалған төнәтмәне 36-сы аҙнаға тиклем эсергә ярамай, емештәрен танауҙағы полип һәм бронхиаль астма менән ауырығанда ашамаҫҡа.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*✓ Төп тәғәйенләнешебеҙҙе үтәп, бер генә мәртәбә бирелгән ғүмеребеҙҙең ҡалған өлөшөн заяға үткәрмәй, уның ҡәҙерен белеп, ошо йәшкә килеп етеүебеҙ өсөн Раббыбыҙға шөкөр итеп йәшәргә тырышайыҡ, ҡәҙерле тиҫтерҙәрем!*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

Шулай итеп, Көньяҡ Урал, көньяҡ Урал буйы һәм Урал аръяғы территорияһында йәшәгән малсылыҡ менән көн күргән башҡорттарҙың ҡайыу сәнғәтен өйрәнеү алымдар һәм орнаменталь сараларҙың күп төрлөлөгөн күрһәтә. Бөтә ҡайылған әйберҙәр өҫтәлмәлек кенә түгел, ә халыҡтың йола мәҙәниәтенә тәбиғи рәүештә тығыҙ бәйләнгән булған.

Уларҙың күбеһе туй йолаһын башҡарыу өсөн тәғәйенләп әҙерләнгән.

Малсылыҡҡа бәйле көнкүрештең үҙенсәлеге ҡулланылышта булған әйберҙәрҙә лә сағылыш тапҡан: сергетыштар, аҫмалы муҡсалар, урын тартмалары, ҡымыҙ көбөһө япмаһы, сәңгелдәк япмаһы биҙәлгән. Йыш ҡына был әйберҙәрҙең ерлеге кейеҙ йәки буҫтау булған, биҙәүҙә йөн еп ҡулланылған. Был үҙенсәлектәр халҡы ни бары XX быуат башында ғына ултыраҡ тормошҡа тулыһынса күскән һәм малсылыҡ яҡшы үҫешкән төбәктәрҙә (Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышы, боронғо Силәбе өйәҙенең көнсығышы) айырыуса ныҡ сағылған.

Шул уҡ ваҡытта, ҡаҙаҡ һәм ҡырғыҙҙар кеүек башҡорттар, бер ҡасан да тип әйтерлек, кейеҙҙең үҙен ҡайып биҙәмәгәндәр: кейеҙҙе ҡаплаған туҡыма ябыуҙар, тула йәки буҫтауға ҡушып тегелгән тар туҡыма һыҙаттары ҡайылған, был башҡорттар көнкүрешендә туҡымалар иртә ҡулланыла башлауы тураһында һөйләй.

Тикшереүҙәр өсөн һайлап алынған төбәк ҡайыуында элмәк йөйҙәр өҫтөнлөк итә. Улар күп төрлө: киң таралған элмә (тамбурная цепочка) һәм ҡуш элмәнән тыш ҡайһы бер төбәктәрҙә беренсе урынға киң элмә һәм элмәле типсеү йөйө сыҡҡан. Ҡуш элмә алымын таралыу өлкәһен билдәләүсе билдә тип иҫәпләргә була: Өфө ҡалаһы параллеленән төньяҡҡа ҡарай бындай ҡайыуҙар бик һирәк осраған.

Урал буйы, Урал аръяғының көнсығышында һәм Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышы территорияларына хас урындағы үҙенсәлектәр һуңғы быуаттар дауамында формалашҡан. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, уларҙа боронғо тарих сағылыш тапҡан. Көньяҡ-көнсығыштың ҡуш элмә традицион алымы ярҙамында башҡарылған ҡусҡарлы орнаменттан торған ҡайыу комплексы бик үҙенсәлекле. Уның тамырҙары боронғо төрки тарихына, Себерҙең көньяғына бәйле. Көньяҡ-көнбайыш һәм көнсығыш Урал аръяғы башҡорттарының ҡайыуҙары Урта Азия халыҡтарының ҡайыу традицияларына тура бәйләнгән. Урал аръяғының көнсығышындағы хисаплы ҡайыу өлгөләрендә көтөлмәгәндә төркиҙәргә тиклемге, бәлки, сармат ҡатламы табыла (был башҡорттарҙы ҡарағалпаҡтар менән яҡынайта); башҡорттар уғырҙар менән дә бәйләнеш тотоуы мөмкин булған.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*БАЙРАМ УҢАЙЫНАН*

**Бер мәл бер нисә ҡарт сыуаҡта йыйылышып гәпләшеп ултыра икән. Һәр кемеһе үҙенең йәш сағын хәтерләй, егет сағында нисек ғәйрәтле булғанын иҫләп, хәҙер инде ҡартайғас, ҡарыуы ҡайтыуы хаҡында уфтана. Ә арала берәү һис кенә лә бошонмай: "Минең көсөм ни - хәҙер ҙә нәҡ йәш сағымдағы һымаҡ ул", - ти икән. "Кит, булмаҫ нәмәне һөйләйһең, - ти ҡорҙаштары. - Уны һин ҡайҙан беләһең?" "Ҡайҙан тип ни, беҙҙең өй янында ғәйәт ҙур бер таш ята. Ана шул ташты мин йәш сағымда күтәрә алмай торғайным, хәҙер ҙә күтәрә алмайым..."**

# ҠАРТЛЫҒЫМ - ШАТЛЫҒЫМ,

## ә йәшлегемә ҡайтырға һис теләмәҫ инем



"Үткән ғүмер, ҡартлыҡ тураһында әңгәмә башлаһаң, күпселек, ысынлап та, йәшлеген иҫкә алып уфтана... Вайымһыҙ бала сағыбыҙҙы, шат мәктәп йылдарын, беренсе мөхәббәтебеҙҙе, унан шаулы студент ваҡытын, ғөмүмән, ғаилә ҡороп, бала-сағалы булып киткән мәлгә тиклемге дәүерҙе һәр кемебеҙ иң яҡшы хәтирәләр итеп һаҡлап киләбеҙ. Бәғзеләрҙең, ниндәй генә йәштә булыуҙарына ҡарамаҫтан, үҙҙәрен һаман йәш итеп тойғолары килеүе лә һиҙелә. "Йәшлегемә атлап түгел - йүгереп ҡайтыр инем...", тип һағыштарға батыусылар, ана шул матур мәлен гөрләп аҡҡан яҙғы ташҡын һыуҙарға, йә иһә тиҙ генә шиңгән сәскәгә тиңләп йырҙар сығарып йырлағандар ҙа бар. Беҙҙең (хәҙерге быуын ҡарттарының тип әйтәйек) йәш ваҡытыбыҙ пионерия һәм комсомолия тарафынан тәрбиәләнеп, коммунистар партияһына алмашҡа әҙерләнеү менән үтте инде... Коммунизм дәүерендә айырыуса "модала булған" Тыуған илде хәстәрләү, һаҡлау, хеҙмәткә булған һөйөү менән бер рәттән, әлбиттә, һәр тере йән эйәһе өсөн тәбиғи, ике енес вәкиле араһында булған мөхәббәт хаҡында ла иҫләмәй булмай. Күпселек бына шул мәлен айырыуса һағыныусан бит. Кемдер үҙенең һөйгәне менән ҡасандыр ҡауыша алмағанына ғүмер буйы үкенеп бөтә алмай, икенселәр, киреһенсә, һөйөп-һөйөлөп ҡауышып та, бергә бәхетле йәшәп китә алмауы өсөн ҡайғыра. "Их, тағы бер ғүмер булһа икән..." - тип үкенеүселәр ҙә юҡ түгел.

Йәшлегебеҙҙе күпме генә һағынһаҡ та, нисек кенә мәңгеләштерергә хыялланһаҡ та, ғүмер тигән нәмә үтә бара, хатта уҡ һымаҡ оса, тип әйтер инем. Ғүмеребеҙҙең "баласаҡ", "йәшлек" тип аталған гүзәл мәлдәре, ысынлап та, кисә генә булып үткән һымаҡ. Уҙған ғүмерҙе һағынып, ниндәй генә фәлсәфәләр һатһаҡ та, кемдер әйтмешләй, үткән - үткән инде. Әммә һәммәбеҙҙең, әлегә тере кешеләрҙең, аҙмы-күпме булһа ла киләсәге бар. Тағы күпме йәшәргә ҡалған икән, тип әллә ни һағышлы уйҙарға бирелмәй генә, киләсәктә Аллаһ Тәғәләгә өмөт бағлап, йәшәүҙең мәғнәһен дөрөҫ аңлап, артабан йәшәргә тырышырға кәрәк, тип һанайым. Кемебеҙҙер балалары өсөн бар нәмәһен йәлләмәй, уларҙы аяҡҡа баҫтырып өлгөрөп ҡалайым тип тырыша, уларға белем биреү яғын ҡарай, икенселәр, ҡәҙерлеләренә өйҙәр һалып, мөмкин тиклем мулыраҡ донъя малы ҡалдырырға тырыша. Ә кемдер: "Ярай, ана, ун һигеҙ йәшегеҙгә тиклем һеҙҙе ҡарап үҫтерҙек, аръяғын үҙегеҙ ҡарағыҙ", - тип ғәзиздәрен ҡырға эш эҙләргә сығарып ебәрә. Кемебеҙҙеңдер бала-сағалары, ысынлап та, тормош тотҡаһына баштан уҡ ныҡлап тотоноп, үҙенә яҡшы һыңар табып, уның менән бергә донъя көтөп, ҡәҙимге йәшәп ала ла китә. Ә бер аҙ сибегерәктәре... тормоштоң бейек-бейек, көслө тулҡындарына ҡаршы тора алмай - юғалып та ҡала. Оло үкенескә, беҙҙең быуынды, унан һуңғыларҙы ла фәҡәт ошо донъя ғына бар икән дә, кеше тик шуның өсөн генә йәшәргә тейеш, тигән рухта тәрбиәләгәндәр.

Үлгәндән һуң әҙәм балаһының мотлаҡ мәңгелек Ахирәт тормошона аяҡ баҫасағы хаҡында күп йәштәр, хатта бәғзе оло быуын вәкилдәре лә бер ни белмәй. Бына ошо бөйөк хәҡиҡәтте белмәү ҙә бик күптәрҙең тормош ауырлыҡтарына ҡаршы тора алмай, Аллаһ Тәғәлә ҡуйған һынауҙарҙы үтә алмауҙарының сәбәпсеһе булыуына шикләнмәйем. Ныҡлы инаныуымса, уҙған ғүмер хаҡында уйланған хәлдә лә, һәр кешенең башында: "Мин был донъяла нимә ҡалдырам һәм Ахирәткә үҙем менән нимә алып китә алам?" - тигән уйҙар йөрөргә тейеш. Билдәле, беҙ баҡый донъялыҡҡа үҙебеҙ менән кәфендән башҡа бер матди нәмә лә алып китә алмайбыҙ, тик тереклектә ҡылған яҡшы һәм яман ғәмәлдәребеҙ генә беҙҙең менән буласаҡ. Аллаһ Тәғәлә һәммәбеҙ өсөн мотлаҡ тип ҡушҡан ғибәҙәттәребеҙ, Уға әйткән зекерҙәребеҙ, доғаларыбыҙ, кешеләр өсөн эшләгән яҡшылыҡ һәм яуызлыҡтарыбыҙ менән генә ҡаласаҡбыҙ. Барлыҡ йыйған мөлкәтебеҙ был донъяла ҡаласаҡ... "Хәҙер инде үлһәм дә үкенмәйем", - тип әйтерлек итеп йәшәр өсөн был донъяла ла ниҙер ҡалдырғы килә бит әле, йәмәғәт. Минең ныҡлы инаныуымса, хатта ошо хаҡта һүҙ йөрөткән хәлдә лә, матди нәмәләр икенсе планғараҡ ҡуйылырға тейеш. Ә иң беренсе урында - ғәзиз балаларыңа тәрбиә биреү мәсьәләһе булыуы кәрәктер. Аҡмулла олатайыбыҙ "иң әүәл кәрәк нәмә", тип атаған имандың һәммәбеҙҙең йөрәгендә булырға тейешлеген һәм уның ни икәнен һәр кемебеҙ үҙ балаһына өйрәтергә бурыслы. Иманлы булыу, ата-әсәгә ихтирамлылыҡ, илһөйәрлек, эшһөйәрлек рухы балаларың өсөн үҫтереп ҡалдырылырға тейешле мираҫ ағасының олоно булып торорға тейештер.

"Йәшлегеңә ҡабаттан ҡайтыу мөмкинлеге килеп сыҡҡан хәлдә, нишләр инең?" тигән һорау бирһәләр, мин һәр саҡ һис икеләнеп тә тормаҫтан: "Ҡайтмаҫ инем!"- тип яуап бирәм. Нәҡ әлеге мәҡәлә башында килтергән "бошонмаҫ" ҡарт һымаҡ. Сөнки, ҡасандыр йәшлек менән аңлы, йә иһә аңһыҙ ҡылған хаталарымды, ҡырын эштәремде, гонаһтарымды һис кенә лә ҡабатлағым килмәй. Ә бына хәҙерге мәлемде иң бәхетле сағым, тип һанайым. Оло йәшкә етеп, балаларымдың үҙаллы тормош ҡороп ғүмер итеүҙәрен, үҫеп килгән ейән-ейәнсәрҙәремдең шат йөҙҙәрен күреп, көн дә шуның өсөн Аллаһ Тәғәләгә шөкөр итеп йәшәү дәүеремде үҙемдең иң гүзәл мәлем тип тә атар инем. Үҙ балаларыңа, башҡа йәштәргә өгөт-нәсихәттәр, файҙалы кәңәштәр биреп, уларҙы иманға өндәп, ғүмереңдең ҡалған ваҡытын шундай изге ғәмәлдәргә бағышлау борон-борондан беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған. Йәш егеттәрҙең аҡһаҡалдар биргән кәңәштәргә ҡолаҡ һалыуы, ҡыҙҙарҙың ағинәйҙәр нәсихәттәрен үтәү ғөрөф-ғәҙәттәре халҡыбыҙҙың быуындан-быуынға күсеп килә торған иң яҡшы йолалары булған. Ил тормошон, ундағы ҡайнап торған ҡатмарлы эштәрҙе, әлбиттә, йәштәребеҙ бына тигән итеп алып бара. Йәш быуындың эшенә артыҡ тығылмай ғына, унда-бында төҙәткеләп тороу, әлеге мәлдәге әҙәп, холҡоң менән уларға үрнәк була алыу, үҙеңде "аҡһаҡал" итеп хис итеү - үҙе бер оло бәхет. "Әлеге мәлдәге", тип юҡҡа ғына әйтмәнем, сөнки, хәҙерге йәштәрҙе күпме генә тәнҡитләһәк тә, беҙҙең үҙебеҙгә лә ҡасандыр йәш саҡта шаянлыҡ, дыуамаллыҡ, хатта бер аҙ ғына йүләрлек һымаҡ сифаттар хас ине бит...

Оло кеше булыу бәхетен бик күптәр татый ҙа алмай, үкенескә. Олпат йәшкә түгел, ир уртаһына ла етмәгән көйө күптәр был донъяны ташлап китеп барғылай. Ана шуларҙың иң күбеһе, дөрөҫөн әйткәндә, иртә китергә үҙҙәре үҙҙәренә сәбәп ҡылыуы үкенесле. Эскелек менән тәүҙәрәк мауығып, унан шул шайтандың ҡолона әүерелеп, ҡырҡ-иллегә лә етмәгән көйө яҡты донъя менән хушлашыусы ираттар (хатта бәғзе ҡатын-ҡыҙҙар ҙа!) хаҡында уйланам йыш ҡына. Шул уҡ ваҡытта, тирә-яғыма бағам да, ейән-ейәнсәрҙәре менән гөж килеп, шул ғәзиздәрен етәкләп йөрөүсе тиҫтерҙәремдең бер аҙ һыр баҫҡан, әммә бәхетле йөҙҙәрен күреп һөйөнөп бөтә алмайым. Һәммәһенең иңендә күп тормош тәжрибәһе булған, барыһы ла был тормошта үҙ урынын тапҡан, нимәгәлер өлгәшкән ошо оло кешеләргә ҙур ихтирам менән бағам. Күптәренең иман юлында булыуы айырыуса ҡыуаныслы. Күптән түгел, ана шундай таныштарымдың береһен - байтаҡтан бирле күрмәгән синыфташ ханымды осраттым. Мөслимә кейемендәге мөләйем йөҙлө был ҡәрҙәшемдең бер туған ҡустыһына Ҡөрьән-Кәрим китабы бүләк итергә алып китеп барыуы хаҡында ишеткәс, уғата шатландым. Шундай тиҫтерҙәремдән үҙ яҡындарының, балаларының, ейән-ейәнсәрҙәренең уңыштары хаҡында ишетеп, уларҙың шатлыҡтарын уртаҡлашам. Бәғзе берәүҙәр ниндәйҙер булһа берәй сире хаҡында ла эс серҙәре менән бүлешеүсән. Ҡасандыр доктор булып эшләгән кеше булараҡ, уларға белгәнемсә ҡәҙәре кәңәштәр бирергә тырышам. Күп кенә сирҙәрҙең башлыса оло кешеләргә хас, тәбиғи булыуы хаҡында ла аңлатыу эшен алып барам. Изге Ҡөрьәндә Аллаһ Тәғәлә: "Мин ендәрҙе һәм кешеләрҙе Үҙемә ғибәҙәт ҡылыр өсөн генә барлыҡҡа килтерҙем", - тип әйтә. Бына ошо иң төп тәғәйенләнешебеҙҙе үтәп, бер генә мәртәбә бирелгән ғүмеребеҙҙең ҡалған өлөшөн заяға үткәрмәй, уның ҡәҙерен белеп, ошо йәшкә килеп етеүебеҙ өсөн Раббыбыҙға шөкөр итеп йәшәргә тырышайыҡ, ҡәҙерле тиҫтерҙәрем!

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*ЫРЫУЫҢ КЕМ?*

# ТӘРӘН ТАМЫРЛЫ БАШҠОРТБОҘ - ГӘРӘЙ БУЛА ЫРЫУЫБЫҘ



Тап ошо осорҙа Төньяҡ Ҡытайҙа Ляо ("Тимер") импераһы барлыҡҡа килә, уның нигеҙен кидань ханлығы хасил итә. Был империя тирәяҡтағы барлыҡ вағыраҡ ҡәүемдәрҙе үҙ ҡулы аҫтында тота. Цзубу халҡы ла Ляо императорына яһаҡ түләп торорға мәжбүр ителә. Улар кидандарға ҡаршы баш күтәрһәләр ҙә, император ғәскәренә ҡаршы тора алмай, шунлыҡтан X-XI быуаттар буйына кидань баҫымы аҫтында йәшәй. Баш күтәреп, еңелгән осраҡтарҙа уларҙың юлбашсылары аяуһыҙ язалана.

Тап ошо осорҙа Үҙәк Азияла көн итеүсе мәжүси күсмә ҡәбиләләр бер юлы 3 оло хәрби көс - буддистар (Ляо империяһы), конфуциансылар (Сун империяһы) һәм мосолман ғәскәрҙәре ҡыҫымына дусар ителә. Был хәл уларҙы, ситтән яҡлау табыу маҡсатында, христиан динен ҡабул итеүгә килтерә. Ошо хәл менән бәйле, кирәйттәр тарихи сығанаҡтарҙа үҙ исемендә телгә алына. Сирия авторы Григорий Абу-ль Фарадж бен Харун һижрәт буйынса 398 йылда (1007 йыл) былай тип яҙа: "... эске төркиҙәрҙең кирит исемле бер ҡәбиләһе Христосҡа инанды, һәм улар уның артынан эйәреүселәр булды, һәм уларҙың короле менән булған бер мөғжизәле хәл арҡаһында улар суҡынды". Йәнәһе, кирәйт ханы сүллектә аҙашып йәрәгәндә, уға изге Сергий килә һәм уға үҙ йортона юл табырға ярҙам итә. Шулай итеп, 200 мең кирәйт халҡы несториан йүнәлешендәге христианлыҡты ҡабул итә. Кирәйттәрҙең ханы Маркус исемен ала. Кирәйттәр менән бергә наймандар, онғоттар һәм башҡа төрки-монгол ҡәбиләләренең бер өлөшө шулай уҡ христиан диненә күсә.

1125 йылда Маньчжуриянан сыҡҡан чжурчжэн армияһы Ляо империяһын тулыһынса тар-мар итеп, Цзинь дәүләтенә нигеҙ һала. Кидандарҙың бер өлөшө көнбайыш тарафтарына ҡасып китһә лә, уларҙың күпселеге йәшәгән ерендә тороп ҡала. Шулай итеп, Төньяҡ Ҡытайҙа Цзинь империяһы хөкөм һөрә башлай. Цзинь императоры Агуда, тарҡалған Ляо империяһына оҡшатып, үҙ дәүләтенә "Алтын" исемен ҡуша. Шуға күрә башҡа халыҡтар императорҙы Алтын йәиһә Алтан хан, тип исемләп йөрөтә башлай. Чжурчжэндар менән көньяҡтараҡ урынлашҡан Сун империяһы араһында бәрелештәр башлана.

Ҡытайҙың үҙәк власы көсһеҙләнеү менән файҙаланып, кирәйттәр үҙ ханлығын иғлан итә. Хан Маркус III Бойороҡ хан титулын ала. Наймандарҙа юлбашсылары Инанч-Билге-Буку хан етәкселегендә үҙ ханлығын булдыра. Был ханлыҡтарҙа чиновниктар аппараты идара итә, һалымдар йыйыла, уйғыр яҙмаһы нигеҙендә документтар төҙөлә.

Байкал аръяғында, ошо халыҡтарға йәнәш, меркет ҡәбиләләре көн итә. Ә Көнсығыш Монголияла, Буир-Нур күле буйында татар исеме менән аталған халыҡ йәшәй. XI быуат филологы Мәхмүт Ҡашғари ошо татар ҡәүеме теленең төрки телдәренән айырмалы булыуын теркәп ҡалдырған. Тимәк, был татарҙар монгол телле халыҡтарҙан булған.

Цзубу ҡәбиләләре, үтә көсәйеп китеп, империя сиктәре буйындағы территорияға баҫып инеп, талай башлай. Әммә 1027 йылда улар император ғәскәренән еңелә. Әлбиттә, бындай хәлдәр Цзинь империяһына хәүеф тыуҙыра. Ә татар юлбашсылары чжурчжэндарҙы танып, улар ҡулы аҫтына инә. Цзинь императоры кирәйттәргә, наймандарға һәм башҡа вағыраҡ ҡәбиләләргә ҡаршы көрәштә татарҙарҙы бик оҫта файҙалана. Улар, император әмерен үтәү маҡсатында, төрлө хәйләләр ҡороп, баш күтәргән ҡәбиләләрҙең юлбашсыларын тотоп, империя ҡарамағына тапшыра. Мәҫәлән, Амбағай хан исемле бер монгол юлбашсыһы, вәғәҙәһенә ярашлы, үҙ ҡыҙын бер татар кенәзенә йәрәшер өсөн алып килә. Әммә уны бында тотоп алып, Цзинь императорына оҙаталар. Был хаҡта ул заман тарихсыһы Рәшид ад-дин былай яҙа: "Хитайҙарҙа ҡабул ителгән йолаға ярашлы, Алтан хан уны "ағас ишәккә" ҡаҙаҡлап ҡуйырға бойора, ул шунда үлә". "Монголдарҙың йәшерен тарихы"нда яҙылғанса, Амбағай хан үҙ үлеме алдынан халҡына васыят әйтеп ҡалдыра: "Бар халыҡ өсөн ҡаған һәм халыҡ хакимы булып, үҙ ҡыҙын үҙе оҙатып килгән кеше өсөн үс алығыҙ. Арымай-талмай үс алығыҙ, минең өсөн биш бармағығыҙҙың тырнаҡтарын юғалтҡанға тиклем генә түгел, ә барлыҡ ун бармағығыҙ бөткәнсе кәрәктәрен биреғеҙ".

Кирәйәт юлбашсыһы Маркус III Бойороҡ хан да мәкерле рәүештә татарҙар тарафынан үлтерелә. Ошо турала Рәшид ад-дин былай яҙа: "Ул саҡта татар ҡәбиләләре бик күп һанлы вә ғәйрәтле ине, шуға ҡарамаҫтан, улар даими рәүештә Хитай һәм Джурджэ (кидандарҙың Ляо империяһы һәм чжурчжэндарҙың Цзинь империялары. - **Ред.**) хакимдарына буйһоноусан булды. Был заманда татар кенәздәре башында Нор Бойороҡ хан исемле кеше булды. Уның йорто Бу-ир-наур тип аталған ерҙә ине. Бер саҡ ул, уңайлы мәлдән файҙаланып, кирәйттәр батшаһы Маркуз Бойороҡто әсир итте һәм уны Джурджэ хакимына оҙатты. Бынығы, "ағас ишәк"кә ҡаҙаҡлап, уны үлтерҙе..."

Ошо аяныслы хәлдәрҙән һуң монголдар һәм кирәйттәр дошмандарына үтә лә нығ үсле булып ҡала. Рәшид ад-дин мәғлүмәттәренә ярашлы, Амбағай хандан аҙаҡ юлбашсылыҡ иткән Хутула хан монгол ғәскәре менән Цзинь империяһы ерҙәренә баҫып инә, чжурчжэнь башлығы Алтан хандың ғәскәрен тар-мар итә, бик күп хитайҙар һәләк ителә, уларҙың мөлкәте талана. Ә үлтерелгән кирәйт юлбашсыһы Маркус III Бойороҡ хандың тол ҡалған ҡатыны Ҡотоҡай Херикчи ире өсөн үсен айырыуса хәйләле ысул менән атҡара. Ул үтә сибәр ҡатын-ҡыҙҙарҙан булып, Рәшид ад-дин яҙғанса, Херикчи тигән исем "балҡып тороусы", "тулҡынландырғыс" тигәнде белдереп, "уның йөҙө балҡып тороп, сибәрлеге менән тулҡынландырып торған өсөн уны шулай атап йөрөткәндәр".

Ҡотоҡай Херикчи, ирен язалағандан һуң татарҙар менән килешергә теләге бар икәненә һылтанып, үҙ ирен үлтереүсе Нор Бойороҡ ханға һый мәжлесе өсөн йөҙ һарыҡ бәрәне һәм ун бейә ебәрә. Ул шулай уҡ байрам мәжлесе башланыу алдынан йөҙ ундыр ҡымыҙ килтерергә вәғәҙә итә. Мәжлес башланыу менән арбаларға тейәлеп килтерелгән ундырҙар (бик ҙур күн тоҡтар) эсенән кирәйт яугирҙары килеп сығып, "татар батшаһын тотоп алдылар һәм уны, шулай уҡ шунда булған татар ҡәбиләләре әмирҙәренең күбеһен үлтерҙеләр".

Шулай итеп, бер яҡта монголдар һәм кирәйттәр, икенсе яҡта чжурчжэндар (цзиндар) һәм татарҙар торған үлемесле алыштар башланып китә. Тәү мәлдәрҙә ҡайһы ҡәүемдәрҙең өҫтөнлөк алаcағын билдәләү мөмкин булмай. Әлбиттә, үҙәк власть тарафынан тупланған империя ғәскәрҙәре бик дәһшәтле көс була. 1161 йылда чжурчжэн һәм татарҙарҙың берләштерелгән ғәскәре монгол далаларына каратель походына сыға, монголдар был көскә ҡаршы тора алмай, уларҙың ханлығы тамам тарҡатыла. Был тарихи мәлде тикшеренеүсе Б.Я. Владимирцов бына нисек тасуирләй: "XII быуаттың икенсе яртыһында монгол олоҫонон ҡеүәте татарҙар тарафынан юҡҡа сығарыла, уларҙы цзиндар үҙ маҡсаттарында, үҫеп килеүсе күсмә халыҡтың тынлыҡ бирмәгән һөжүмдәренән тиҙерәк ҡотолоу өсөн бик оҫта файҙалана".

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 39-сы һанда).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Бөтмәҫ дандары ҡалды

Эскадрон командиры, өлкән лейтенант Фәрүәз Сабитов: "Әгәр Мәҡсүтов булмаһа, был алыштың нисек бөтөүен әйтеүе ауыр булыр ине", - тип өҫтәне. Мәҡсүтов юғары наградаға лайыҡ ине, һәм ул уны алды - Боевой Ҡыҙыл Байраҡ орденын. Сабитов үҙе тураһында һөйләмәй. Ә ул бит Кесе Борки янында иҫ китмәле батырлыҡ һәм түҙемлек күрһәтте: эскадрон ҡамауҙа тороп ҡалды, әммә сигенмәне һәм дошмандың бөтөн атакаларын да кире ҡаҡты. Ф.Ш. Сабитовтың шәхси иҫәбендә - илленән ашыу дошман һалдаты һәм офицеры, ә эскадрон өс йөҙҙән ашыу гитлерсыны юҡ итте. Эскадронға яңы рубежға күсергә приказ бирелгәс, Ф.Ш. Сабитов атакаға күтәрелгәндәрҙең тәүге рәтендә булды. Дошман ҡулсаһы өҙөлдө, эскадрон ҡамауҙан сыҡты һәм яңы рубежда оборонаға күсте.

Был алышта Сабитов яраланғайны, әммә үҙенең эскадронын ҡалдырып китмәне. Уның батырлығы ла лайыҡлы баһаланды: ул да Боевой Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән билдәләнде.

- Ә был беҙҙең атаҡлы пулеметсыбыҙ Ғатаулла Хөсәйен улы Хөсәйенов, - тип, йылмая биреп, Ф.Ш. Сабитов мине үҙенең һалдаты менән таныштыра.

Пулемет майҙансығы яҡшы итеп тигеҙләнгән, пулемет матур итеп маскировкаланған. Прицел целигынан бөтөн атыу секторы яҡшы күренә. Пулеметсы Хөсәйеновҡа 35 йәш. Ул Тәтешле ауылынан. Уның пулеметы таҙартылған, ленталар патрондар менән йыйнаҡ итеп тултырылып, тартмаларға һалынған. Бар нәмәлә лә тәртип, хәрби ҡоралға һөйөү тойола.

Ғ. Х. Хөсәйенов үҙен Борки ауылы эргәһендә, эскадрон оборонала торған саҡта танытты. Дошман һөжүм иткәндә бер нисә тапҡыр алға, немецтарҙың флангыһы яғына шыуышып сыға, уларҙың атакаға күтәрелеүен аңдып тороп, дошманға үлемесле ут аса. Бер көн эсендә дошман эскадронды дүрт мәртәбә атакалай, әммә Хөсәйеновтың ҡыйыулығы һәм ҡурҡыу белмәүе һөҙөмтәһендә был атакалар дошмандың ҙур юғалтыуҙары менән кире ҡағыла. Озерки ауылына һөжүм иткән саҡта Ғ.Х. Хөсәйенов дошман минометы расчетын һәм боеприпастар тейәлгән ике йөк арбаһын юҡ итә. Пулеметсының батырлығы танылмай ҡалманы: ул да Боевой Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнде.

...Эңер төшә башланы. Мин тағы Т.Т. Кусимовтың команда пунктындамын. Телефондан М.М. Шайморатовҡа полк оборонаһын тикшереү һөҙөмтәлере хаҡында хәбәр итәм. Һөйләшеп тә бөтмәнек, дошман команда пунктын утҡа тота башланы. Телефон ағас аҫтына ҡуйылғайны. Ағас кинәт шытырлап ауып китте, минең менән йәнәш ятҡан телефонист ауыртыныуҙан ҡысҡырып ебәрҙе. Мина беҙгә яҡын ғына шартлаған, уның ярсығы телефонисты яралаған, ә минең өҫтөм бер аҙ тупраҡ менән ҡапланды һәм ҡолағым тонды. Бәхеткә күрә, яраланманым.

Иртән алғы крайҙы ҡарауымды дауам иттем. Ялан уртаһындағы ҡалҡыуыраҡ бер урында, көтмәгәндә, бик яҡын килгәс кенә, батарея командиры, лейтенант М.М. Гәрәевтың бик яҡшы итеп маскировкаланған күҙәтеү пунктына юлыҡтым. Ул бик иплән төҙөлгән. Землянкаһы - өс рәт бүрәнәле, ә амбразураһы ҙур арауыҡты күҙәтергә мөмкинлек бирә.

**Вәли ИҘРИСОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Хәҙер уйлап ҡараһам, көнө буйы ҡояшта янып сүп утау мине сыҙамлыҡҡа, башлаған эште аҙағына тиклем еткерергә өйрәткән. Ғөмүмән, тормошта осраған һәр эш, һәр кеше, һәр хәл-ваҡиға минең өсөн һабаҡ булды.*

# БИШЕК ЙЫРҘАРЫН туған телебеҙҙә

**Йондоҙло сәғәттәре күп уның… Мәктәптә, аҙаҡ педагогия училищеһында, һуңынан Башҡорт дәүләт университетында уҡығанда төрлө кимәлдәге конкурстарҙа, олимпиадаларҙа, ярыштарҙа еңеүсе исеменә лайыҡ булыу, 1994 йылда республика "Һылыуҡай" конкурсы тажын кейеү, хеҙмәт юлында шәхсән һәм уның етәкселегендә "Тамыр" каналы тапшырыуҙарының бөтә Рәсәй һәм халыҡ-ара фестивалдәрҙә ҡатнашып, күп тапҡырҙар лауреат һәм премияларға эйә булыу… Был тырышып һәм яратып башҡарған эшеңдең тәмен татыу ғына түгел. Уның әһәмиәте тәрәнерәктә: башҡорт балалар телевидениеһын донъяға танытыуҙа. "Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалы директоры, Шәйехзада Бабич исемендәге Башҡортостан Республикаһы дәүләт йәштәр премияһы лауреаты, Рәсәйҙең атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Гөлназ ҠОЛҺАРИНА менән әңгәмәбеҙ ошо хаҡта. Һәм ул турала ғына ла түгел.**

**Гөлназ Фәрит ҡыҙы, һеҙҙе ижади уңышҡа илткән юл, эшһөйәр, маҡсатҡа ынтылыусан итеп тәрбиәләгән ғаилә, үҙегеҙ үҫкән мөхит тураһында һөйләп китегеҙ әле башта…**

- Донъяға килгәндән алып, ғүмер буйы яҡын кешеләремдең һөйөүенә, ихтирамына һыйынып йәшәйем. Кеше өсөн, бигерәк тә бала өсөн, яратылып йәшәү бик мөһим. Был йылылыҡты бала саҡта атай-әсәй, апайҙар-ағайҙарым яғынан тойҙом. Аҙаҡ уҡытыусыларым, тиҫтерҙәрем, хеҙмәттәштәремдең ихтирамы уратып алды. Шулай ҙа, иң мөһиме, ғаиләмдең яратыуы, хөрмәтләүе. Һәр ваҡыт хәстәрлекле, наҙлы ҡараш тойоу мине иркә һәм эшкинмәгән итеп үҫтермәне, киреһенсә, ошо мине хәстәрләгән, хөрмәтләгән, яратҡан кешеләр өсөн яуаплы булырға өйрәтте.

Апайымдар хәтерләүенсә, мин бәләкәйҙән үҙаллы булғанмын, юҡҡа-барға мыжып, илап бармағанмын. Улар мине тубыҡтарынан төшөрмәй генә иркәләп үҫтерҙе. Гөлшат апайым мәктәптә уҡығанда мине һағынып, дәрестәре бөткәнен дә көтмәй, тәнәфестә йүгереп ҡайтып, мине яратып-һөйөп китә торған булған. Мин 11 балалы ҙур ғаиләлә тыуғанмын. Атайым - тракторсы, әсәйем сөгөлдөрсө булды. Ауыл ерендә иртәнге ҡараңғынан киске ҡараңғыға тиклем эшләһәң дә, йорт-хужалыҡ эше бөтмәһә лә, беҙҙең ғаиләлә белем алыуға, китап, гәзит-журнал уҡыуға ҙур иғтибар бирелде. Уҡыу башланһа, мәктәптән ҡайтып инмәй инек. Беҙҙә класстан тыш саралар, әҙәби кисәләр үткәреүгә, уҡыусыларҙың һәләтен асыуға, үҫтереүгә ҙур иғтибар бүленде. Ә йәйге каникулым дүртәр гектар сөгөлдөр утап үтә ине. Беренсе ҡатын утап бөтөүгә, икенсеһенең ваҡыты етә... Бер шулай йәйге каникулда лагерҙа ял итергә тура килгәйне. Сөгөлдөр тураһында һөйләһәм, тау-урманлы яҡтан килгән балалар уның нимә икәнен дә белмәй. Эй көнләштем шуларға. Хәҙер уйлап ҡараһам, көнө буйы ҡояшта янып сүп утау мине сыҙамлыҡҡа, башлаған эште аҙағына тиклем еткерергә, сифатлы итеп башҡарырға ла өйрәткән.

Ғөмүмән, тормошта осраған һәр эш, һәр кеше, һәр хәл-ваҡиға минең өсөн һабаҡ булды, тип иҫәпләйем. Мине һәр ваҡыт үҙенең һөнәрен яратҡан, эшендә бәхетен тапҡан, унан кинәнес алған, матди байлыҡҡа ҡарағанда рухи аҙыҡҡа өҫтөнлөк биргән, яҡшылыҡтың, изгелектең ҙур көскә эйә икәнен аңлата белгән кешеләр уратып алды. Мәктәптә уҡығанда рус теле уҡытыусыһы Зөлфирә Ильясоваға һоҡлана инем. Кейгән пальтолары, күлдәктәре, бейек үксәле туфлиҙары әле булһа күҙ алдында. Ысын педагог шулай булырға тейеш, тип уйлай инем. Киләсәктә уға оҡшап, яҡшы уҡытыусы буласаҡмын, тип хыял иттем. Матур кейемдәрен, хатта түй күлдәге менән аҡ бирсәткәһен алып килеп, йә Пушкин кисәһе, йә башҡа классиктарҙың ижадына арналған әҙәби кисәләр ойоштора ине. Улар шул тиклем матур үтә ине. Ә һәр дәресте бәләкәй генә инша яҙҙырыуҙан башлар ине. Бөгөнгө күҙлектән сығып, үҙемдең тиҙ генә уйлап сығарыу, сценарий яҙыу һәләте миңә тап ошондай дәрестәрҙә һалынғандыр, тип уйлайым.

**Салауат педагогия училищеһына уҡытыусы булыу теләге алып килгәндер инде…**

- Ул заманда, башҡа бөтә ерҙәге кеүек, беҙҙә лә яҡшы уҡығандар, йәғни мәктәпте яҡшы билдәләренә тамамлағандар - медицина йәки педагогия училищеһына, ә уртаса өлгәшкәндәр Стәрлебашҡа СПТУ-ға бара ине. Мин дә 8-се класты "бишле"гә генә тамамланым һәм, киләсәктә уҡытыусы булып эшләйем, тигән яҡты ниәт менән педучилищеға индем. Училищела уҡыу бик ауыр булды. Һүрәт төшөрөргә лә, баянда уйнарға ла, ҡул эштәренә лә өйрәнергә кәрәк. Башланғыс класс уҡытыусыһы барыһын да белергә тейеш. Әммә бәләкәйҙән эшләп үҫкәс, мәктәптә алған белемем дә булышлыҡ иткәндер, ауырлыҡҡа бирешмәнем. Тик "бишле"гә генә, Ленин стипендияһын алып уҡыным. Башҡорт теле уҡытыусыһы Фруза Хәбибуллинаның дәрестәрен яраттым. Ул студенттарға бик иғтибарлы, кешелекле ине. Әсәйҙең йылы ҡанаты аҫтынан яңы сыҡҡан 14-15 йәшлек ҡыҙҙарға әсәйҙәрсә хәстәрлекле булды. Үҙенә лә, студенттарға ла талапсан булды, олимпиадаларға ентекле әҙерләп, етәкләп тигәндәй алып барыр ине. Шул йылдарҙа башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса республика олимпиадалары башланды. Унда еңеп, имтиханһыҙ Башҡорт дәүләт университетына уҡырға индем. Шулай итеп, башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты студенты булып киттем.

**Бәләкәй саҡта уҡ уҡытыусы булырға теләүегеҙ тураһында әйттегеҙ. Тимәк, телевидениела эшләү бала саҡ хыялы булмаған. Ә уға алып килгән һуҡмаҡ ҡайҙан баш алды?**

- Эйе, мин уҡытыусы булырға теләнем. Педучилищела уҡығанда уҡ новатор уҡытыусы булам тип, уҡытыуҙың яңы алымдарын, алдынғы методикаларҙы күҙәтеп барҙым. Сухомлинский, Амонашвилины һәм башҡаларҙың төп педагогия идеяларын, тәжрибәһен өйрәнеп, методик эшкәртмәләр өҫтөндә эшләй башлағайным. Ҡайһы берҙәре "Башҡортостан уҡытыусыһы" журналында баҫылып та сыҡты.

Телевидениела эшләү башҡа ла инеп сыҡҡаны булманы. Педучилищела уҡығанда башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса республика олимпиадаһында үҫмерҙәр һәм йәштәр тапшырыуы өсөн Рәмис Дәүләтбаев менән Гәүһәр Батталова минән интервью алғайны. Луиза Азамат ҡыҙы Фархшатова ошо әңгәмәне ҡарап, мине хәтеренә һалып ҡуйған. Минең БДУ-ға уҡырға килгәнемде белеп, беренсе курс аҙағында уҡ ул мине телевидениеға, яңы ғына асылған "Тамыр" телерадиостудияһына эшкә саҡырҙы. Мин, өлкән кеше саҡырғас барайым, тип кенә барҙым. "Өфөгә уҡырға тип килдем, эшләргә иртәрәк әле", - тинем. Луиза апай "Иләү" радио тапшырыуына бер-ике сценарий яҙып килтереүемде һораны. Имтихандарҙы тапшырып, бер аҙнанан редакцияға килдем. Луиза Азамат ҡыҙы яҙмаларымды ҡарап сыҡты ла, бар, студияға яҙылырға, тип сығарып та ебәрҙе. Тележурналист Сәрүәр апай Суринаның Арыҫлан исемле улы менән яҙҙырҙыҡ тәүге "Иләү"ҙе. Шунан үҙенән-үҙе телевидение эшенә инеп кителде. Луиза Азамат ҡыҙы баштан уҡ ҙур маҡсаттар ҡуйып эшләргә өйрәтте. Ауыл балалары артыҡ тыйнаҡ була бит. Луиза апай күккә күтәреп маҡтай, үҙебеҙгә ышаныс уята ине, талабы ла ҡаты ине уның.

**Ижади биографияғыҙҙа тағы бер сағыу ваҡиға бар - һеҙ Башҡортостандың мәҙәни тормошондағы иң ҙур ваҡиғаларҙың береһе булған "Һылыуҡай" республика конкурсында ҡатнашып, 1994 йылда төп призды яуланығыҙ. Башҡорт һылыуы тажын кейеү хыялығыҙ инеме һәм был сараның милли идеяһын нимәлә күрәһегеҙ?**

- Педучилищела уҡығанда "Йәшлек" гәзитенә әүҙем яҙыша торғайным. Үткән быуаттың 90-сы йылдар башында, яңырыу осоро тулҡынында, милли тойғо, рухи күтәренкелек үҫеш алған ваҡытта, был баҫма темалар төрлөлөгө менән ныҡ айырылды, ул бигерәк йәштәр араһында бик популяр ине. Туған телебеҙгә, мәҙәниәтебеҙгә, тарихыбыҙға ҡағылған көнүҙәк мәсьәләләр киң яҡтыртылды унда. Йыл аҙағында улар йыл дауамында яҙышҡан, мәҡәләләре уҡыусыларҙа ҡыҙыҡһыныу тыуҙырған авторҙарын дәртләндереү маҡсатында беренсе тапҡыр үҙ баҫмаһының лауреаттарын билдәләне: Сәлмән Ярмуллин, Нәркәс Сөләймәнова һәм тағы берәү, исеме иҫтән сыҡҡан, араһында мин дә бар инем. Яңы йыл алдынан "Йәшлек" гәзите беҙҙе "Матбуғат йорто"на бүләкләргә саҡырҙы. Өфөгә кис көнө килеп төштөм, мине ҡустым ҡаршы алды. Икәүләп баш ҡаланың яҡты, матур урамдары буйлап китеп барабыҙ. Бөтә кеше урамда. Ул ваҡыттағы ҡараңғы, бандит ҡалаһы тип иҫәпләнгән Салауаттан һуң бында шул тиклем рәхәт. Бер кем бер нәмәнән ҡурҡмай. Шунда Өфө минең күңелгә инеп урынлашты... "Һылыуҡай"ҙа ҡатнашыуым ошо республика йәштәре өсөн сыҡҡан баҫмаға туранан-тура бәйле. Был конкурста ҡатнашыу тураһында уйлап та ҡарамай инем. Ул осорҙа йыл һайын йәй көнө Йылайыр районында бик ҙур итеп "Башҡорт йәштәре көндәре" үткәрелә ине. Шунда билдәле хореограф Гөлназ Аҡназарова етәкселегендә "Ирәндек" халыҡ бейеүҙәре ансамбле солистары менән йәштәр байрамына барҙыҡ. Сара сиктәрендә "Башҡорт батыры", "Башҡорт һылыуы" кеүегерәк төрлө номинацияларҙа конкурстар үткәрелә ине. Тик йөрөргә яратмайым бит инде мин. Гөлназ Вәкил ҡыҙы: "Гөлнәҙек, ҡатнаш, әйҙә, конкурста", - тип дәртләндерҙе. Әҙерлек юҡ. Талаптар арыу ғына. Роберт Юлдашев ҡурайҙа, Фәтих туғаным баянда уйнап, ниндәйҙер халыҡ йырын әҙерләй һалдыҡ. Бейеүгә ҡытлыҡ юҡ ине, "Бишбармаҡ"-ты бейенем, буғай. Алып барыусы Ғәлиә Кәлимуллина ине шикелле. Сетерекле һорауҙар менән арыу ғына яфаланы сәхнәлә. Халыҡ шул тиклем ихлас ҡарағаны хәтерҙә. Ярыш-һынауҙарҙы үтеп, еңеүсе исемен яуланым. Бәйгенән һуң жюри ағзалары менән һөйләшеп тора инек, бер оло ғына ағай килеп, вәт рәхмәт, дастуйын ҡыҙға бирҙегеҙ еңеүҙе, тип маҡтап китте. "Башҡорт йәштәре көндәре"ндә ойоштороусы булып йөрөгән Таһир ағай Ишкинин 1994 йылдың яҙында икенсе тапҡыр үткәрелгән "Һылыуҡай" республика конкурсында ҡатнашырға саҡырҙы.

Конкурстың милли идеяһына килгәндә... Ил буталған 90-сы йылдарҙа беҙҙең халыҡҡа "Һылыуҡай" кәрәк булыуы шаҡ ҡатырлыҡ, бер ҡараһаң. Тик башҡорт халҡы нескә, зауыҡлы халыҡ, матурлыҡты күрә, матурлыҡҡа ҡыуана белгән халыҡ. "Һылыуҡай" ул заманда, ана беҙҙең ниндәй гүзәл, аҡыллы ҡыҙҙарыбыҙ бар, әсә булып, матур балалар тыуҙырасаҡ, милләтебеҙҙе үҫтерәсәк, тип ғорурланыу, өмөтләнеү өсөн кәрәк булғандыр, тим. Һуңғы ваҡытта үткәрелгәндәре тураһында, сараның төп маҡсаты юғалды, тигәнерәк хәбәрҙәр ишетелеп ҡала. Әммә үткән быуаттың туҡһанынсы йылдарында үткәрелгән конкурс менән бөгөнгөһө араһында айырма эҙләргә кәрәкмәй, минеңсә. Бөтә нәмә үҙгәргән ваҡытта был сара ла бер урында торорға тейеш түгел, тип уйлайым. Беҙ үҙебеҙ ҙә икенсе төрлө заманда йәшәйбеҙ. Конкурстың барыбер милли идеяһы тороп ҡалды, тип иҫәпләйем, сөнки ул әле лә туған телендә аралашҡан, халҡыбыҙҙың йолаларын белгән башҡорт ҡыҙҙарын ылыҡтыра. Жюри ағзалары ла, элекке кеүек үк, абруйлы мәҙәниәт, сәнғәт, йәмғәт эшмәкәрҙәре. Хәҙер конкурстың телевизион проекты эшләнде, шуға күрә ул дауам итә һәм дауам итһен, тип уйлайым. Милли үҙаң - үҙ халҡың, телең, мәҙәниәтең һәм тарихың менән ғорурлыҡ хисе лә. Матурлыҡ конкурсы был тәңгәлдә ҙур роль уйнауына шигем юҡ.

**Карьера эшләүсе ҡатын-ҡыҙҙар йыш ҡына ғаилә бәхетенән мәхрүм ҡала. Һеҙ нисек итеп ғаилә менән эшегеҙҙе йәнәш алып бара алдығыҙ?**

- Мин карьера эшләмәйем бит, бары тик эш эшләйем. Балаларым да, Зариф та минең өсөн "Тамыр" ни тиклем ҡәҙерле икәнде белә, таный. Зариф минең эшемде юғары баһалай. Рәхмәт уға! Ҡыҙыбыҙ Гәлсәр өсөн "Тамыр" бәләкәйҙән шатлыҡ, ижад утрауы булды. Бәләкәй сағында мин уны: "Пианинола ике сәғәт шөғөлләнмәһәң, "Тамыр"ға вокалға бармайһың", - тип ҡурҡыта торғайным. Иң ҙур яза шул ине уның өсөн. Тәүлек әйләнәһенә съемкалар, дәрестән ҡасып, концертта ҡатнашыуҙар, тамағы ауыртҡан саҡта ла студияла йыр яҙҙырыуҙар - былар барыһы ла Гәлсәр өсөн норма ине. Улым Урал:

**✓ *Хәҙерге заманда сәйәсәттә, иҡтисадты һәм йәшәйеште анализлаған тапшырыуҙар урыҫ телендә лә юҡ тиер инем. Ҙур телевидение анализлау, һығымта яһау кеүек етди әйберҙәр менән булышмай тиерлек.***



# ЙЫРЛАМАҺАҠ,

## һөйләшмәһәк...

"Һинең башың шәп эшләй, сөнки һин "Тамыр"ында туҡтамай ижад итәһең, уйлап сығараһың, һинең эшең шәп!" - ти. Быйыл йәй кешеләр етешмәгәндә "Бирешмә!"нең съемкаларында ихлас ярҙам итеп йөрөнө. Балалар минең дә, Зарифтың да күңел биреп, ҡайсаҡ хәлдән тайғансы эшләүҙе күреп үҫә. Был бик мөһимдер. Яраткан эш эш булыуҙан туҡтай ҙа һинең тормошоңа әүерелә. Мин ғаилә менән берәй ергә бармаһаҡ, берәй ҙур эш эшләмәһәк, отпуск, ял көндәренең мәғәнәһен күрмәйем. Шуға алмаған отпуск көндәре әллә күпме йыйылып киткән, кадрҙар бүлеге әйләнгән һайын иҫкәртә.

**Билдәле булыуынса, телевидение кешеләргә йогонто яһауҙың ҡеүәтле инструменты. Һеҙҙең хеҙмәт биографияғыҙ тотош ошо киң коммуникация сараһы булған "Тамыр" телеканалы директоры сифатында ижади эшмәкәрлек менән бәйле. Һеҙҙең өсөн нимә ул ижад һәм был тәңгәлдә ниндәй уңыштарығыҙ бар?**

- Телевидение иң беренсе - производство, сәнәғәт ул. Ижадҡа урын бик әҙ ҡәҙимгә телевидениела. Тик "Тамыр" ни өсөндөр ижад итеп була торған мөхит булып сыҡты. Беҙҙә, көн уҙҙы, сабата туҙҙы, тип йөрөп булмай. Һәр саҡ ниндәйҙер сәм, яңылыҡ осоп йөрөй баш өҫтөндә. Беҙҙең режиссер, рәссам, мөхәррирҙәр күп ҡарай, күрә, гел эҙләнә. Береһе яңы проектҡа тотонһа, икенсеһе ҡыҙышып, сәмләнеп йөрөй. Егәрле, алсаҡ, ғәмле, сәмле тамырҙарға гел рәхмәт әйтәм. Минең талаптарға түҙгәндәре өсөн, иҫкәрмәләрҙе аңлап ҡабул иткәндәре өсөн, тыңлағандары һәм ишеткәндәре өсөн рәхмәт! Ижад, үсеш өсөн сәм бик кәрәк сифат. Ә ижад - ул донъяны үҙенсә асыу ғына түгел, асышыңды, табышыңды башҡаларға еткерә белеү һәләте лә, тип иҫәпләйем. "Тамыр"ҙы Рәсәй кимәлендә уникаль канал тип атайҙар. Баштараҡ фильм-әкиәттәр менән аптырата инек ҙур фестиваль жюриҙарын. Бер төбәктә лә телевизион фильм-әкиәттәр төшөрөлмәй ине, һеҙ ниндәй аҡсаға нисек төшөрәһегеҙ, тип таң ҡала торғайнылар. Балаға әкиәткә төрөп бирелгән мәғлүмәт ҡиммәтләрәк. Әкиәт уның күңелен үҫтерә, рухын нығыта. Икенсе яҡтан, режиссер, оператор, бөтә команда өсөн әкиәт төшөрөү - ижади үсеш ул. Шуға ла юҡты бар итеп, йыл һайын бер-ике фильм-әкиәт төшөрөргә тырышабыҙ. Башҡортостанға "ТЭФИ" Бөтә Рәсәй конкурсында тәүге еңеүҙе - беренсе "Бронза Орфей"ҙы беҙҙең "Ҡоралай" фильм-әкиәте алып ҡайтты. Хәҙер инде "Тамыр"ҙың "Бронза Орфейы" һигеҙ дана булып китте. "Шихандар сере", "Ҡамыр батыр", "Шүлгәнташ" фильм-әкиәттәре лә бик күп конкурстарҙа лауреат булды.

Әлегә уйлаған-ниәтләгән, хатта тотонорға ҡурҡыбыраҡ торған эштәребеҙ ҙә бойомға аша бара. Үҫмерҙәр өсөн "Бирешмә" сериалының икенсе миҙгелен төшөрәбеҙ. Бюджетһыҙ сериал эшләүҙең ниндәй этлек икәнен беләбеҙ. Шуға сценарий әҙер булғас, режиссер Гөлсәсәк Игебаева, мөхәррир Гөлшат Ғәлиуллина менән яҙын һөйләшкәндә икеләнеүемде йәшермәнем. "Тағы тамуҡҡа инергә ризаһығыҙмы ни?" - тип кире өҫтөләй ҙә бирҙем. "Ожмахҡа үлгәс эләгербеҙ әле - төшөрәбеҙ", - тине Гөлшат. Ошондай ижади йәндәргә рәхмәтем сикһеҙ!

Йәш быуын телевизор ҡарап бармай тип уйлай инек. Тик уларҙың күңеленә яҡын, ҡыҙыҡлы контент эшләһәң, ҡарай икән. "Бирешмә" сериалы иҫбат итте быны. Тәүге сезонды Яңы йыл алдынан ун көн рәттән кисе сәғәт 9-ға эфирға ҡуйҙылар. Дүртөйләмә, Янауылмы яҡтарында линияла авария булыу сәбәпле БСТ күрһәтмәгән, сериалдың тәүге серияһын ҡарай алмағандар. Яңынан күрһәтеүҙе һорап, әллә күпме яҙҙылар, шылтыраттылар. Аҙаҡтан үҫмерҙәрҙең көтөп алған байрамы Ғашиҡтар көнөнә тура килтереп, сериалды тотош ютуб каналына һалдыҡ. Уны яратып ҡарағандарҙың күп булыуын ютубтағы просмотрҙар һаны ла дәлилләне. Сериалды үҫмерҙәр генә түгел, төрлө йәштәгеләр яратып ҡараны. Һәр кем үҙенә ҡағылған фраза, яҙмышын сағылдырған ваҡиға, күңеленә яҡын мәғәнә тапты "Бирешмә"лә. Бер ҡатындың яҙғанын гел күңелемдә йөрөтәм: "Ниһайәт, кисә "Бирешмә"не тотош ҡарай алдым. Ун серияһын да бер тынала ҡараным. Күңел шул тиклем тулды. Ундағы сафлыҡ! Ундағы матурлыҡ! Әйтеп аңлатырлыҡ түгел. Гөлгөнәнең өләсәһе "Әсәйһеҙ ҙә, хыялһыҙ ҙа нисек йәшәр балаҡай" тигәйне, йырылып киттем. Төнө буйы илап сыҡтым. Мин бит әсәйһеҙ ҙә, хыялһыҙ ҙа йәшәнем, йәшәйем..."

Өсөнсө йыл рәттән "Ҡош юлы. Балалар" проектын эшләйбеҙ. Унда гитарала уйнап йырлаған үҫмерҙәр ҡатнаша. Улар күп түгел, 15-20 генә, әммә бик сифатлы сығыштар, үҙенсәлекле балалар. "Ҡош юлы" хәрәкәте йәштәренә, остаздарға, режиссер - егәрле, йыйнаҡ Ләйсән Мәзитоваға рәхмәт. Үҫмер осоро - кеше ғүмерендә иң ҡатмарлы осор тип уйлайым. Шуға, уларға таяныс булырҙай, йүнәлеш бирерҙәй проекттар эшләргә тырышабыҙ. Ғөмүмән, мин әйткәнем бар инде, бала саҡ - ғәмһеҙ саҡ, тигән менән риза түгел мин. Бик ҡатмарлы осор ул. Көн дә үҙенең тулы хоҡуҡлы кеше икәнен иҫбат итергә тура килә балаға. Үҙ юлыңды эҙләү, тиҫтерҙәрең алдында үҙ йөҙөңдө һаҡларға, атаәсәһенең өмөтөн аҡларға тырышыуҙар һәм башҡалар. Балаға тиң итеп ҡарау, уны аңлау, гел ыңғайына ла ҡуймай - азатлығын да сикләмәй, таяныс булыу өсөн өлкән кешегә аҡыл да, сыҙамлыҡ та кәрәк.

"Тамыр"ҙың яңы проекттарынан "Нурбостан" телевизион анимация сериалын билдәләп үткем килә. Уның тураһында идея 5-6 йыл элек үк барлыҡҡа килгәйне, концепцияһын, геройҙарын күптән яҙғайныҡ. Былтыр уны эшләүгә грант бирелде. Геройҙар шәп, сағыу, матур. Башҡорт балаһы белергә тейешле тарихи ваҡиғалар, брендтар буйынса эшләйбеҙ. Балаларға ғына түгел, ата-әсәләргә лә оҡшар тип өмөтләнәбеҙ.

**Һеҙҙең яңы прект - "Бишек йыры"на килгәндә бәйгелә балалар ҙа һәм оҫталар ҙа ҡатнаша булып сығамы? Аңлауыбыҙса, бишек йыры ул төбәп әйткәндә бала йоҡлатыусы ҡатын-ҡыҙҙың - әсәйҙең, өләсәйҙең йыры. Ни өсөн проектҡа балаларҙы, бишек яһаусы ағас эше оҫталарын - кәсепселәрҙе индерергә булдығыҙ? Был тәңгәлдә бәйгенең маҡсаты киңәйеп һәм үҙ тәғәйенләнешенән тайпылып китмәйме?**

- "Бишек йыры" - ул бәйге генә түгел. Ә бөгөнгө бәләкәс ҡыҙҙар - буласаҡ әсәләр. Бишек яһаусы оҫталарҙы ла мин кәсепселәр тип кенә атамаҫ инем. Бишек юнып ҡына әллә ни аҡса эшләп булмайҙыр ул. Бишеккә халҡыбыҙҙың фәлсәфәһе, рухи байлығы, тип ҡарайбыҙ. Үҙ ҡулдары менән ҡыҙҙарына бишек эшләгән Денис Өмөтбаев, Шәһит Хамматовҡа рәхмәт. Мин үҙ балаларымды сәңгелдәктә бәүетеп үҫтермәгәнем өсөн шул тиклем үкенәм. Нишләп башҡа килмәгәндер ул уй? Күберәк йәштәр сәңгелдәктең мәғәнәһен аңлаһын, сабыйҙарын бәүетһен, бишек йырын көйләһен, тип теләйбеҙ. Ә бәйге ул сәбәп кенә, ошо ниәтте күберәк кешегә еткереү форматы ғына.

Ун йылдан ашыу элек "Тамыр"ға рәссам Владислав Байрамғолов килгәйне. "Башҡорт бишек йырҙары яҙмаһы кәрәк, "Колыбельные мира" анимацион циклында эшләйем. Бер серияны башҡорт йырына арнарға ине", - тигән ниәтен белдерҙе ул. Беҙ ҡыуанып, фондта булған бишек йырҙарын күсереп бирҙек. Владиславҡа матур ниәте өсөн рәхмәт, тик килеп сыҡманы, ахыры. Илленән ашыу халыҡтың бишек йырҙары буйынса анимацион фильмдар араһында башҡорт йырын тапмаһыҡ. Шул ваҡытта уҡ башҡорт бишек йырҙарын сифатлы итеп яҙҙырып, аудио альбом эшләргә, телевизион проект итеп тә башҡарырға тигән хыял уянғайны. Концепцияһын күп гранттарға биреп ҡараныҡ, ниһайәт, быйыл "Әсә йөрәге" әсәләр советы рәйесе Гөлшат Әхәт ҡыҙы Ибраһимова менән бергә грант оттоҡ һәм әле ең һыҙғанып эшләйбеҙ. Пандемия мәлендә, йәйге эш осоронда ҡатнашырға теләүселәр булмаҫмы икән, тип икеләнгәйнек. Шөкөр, ғаризалар күп килде. Күрәһең, проекттың идеяһы халыҡ күңеленә хуш килде. Барлыҡ ҡатнашыусыларға ла балаларға ла, әсәйҙәргә, өләсәйҙәргә, оҫта атайолатайҙарға ҙур-ҙур рәхмәт! Йөҙҙән ашыу ҡатнашыусы араһынан жюри артабанғы этапҡа - съемкаларға геройҙар һайлап алды. Әле режиссер Ләйсән Солтанғолова, мөхәррир Гөлназ Ишемғолова, оператор Раушан Артыҡов Башҡортостанды арҡыры-буй гиҙеп, съемкаларҙа йөрөй. Шул тиклем матур ғаиләләр, тип ҡыуанып бөтә алмайҙар. Тиҙҙән беҙ геройҙарҙы Өфөгә саҡырып, йырҙарын яҙҙырабыҙ, фотосессия эшләйбеҙ. Октябрь уртаһынан тапшырыуҙар эфирға сыға башлай. Ә ноябрь аҙағында Әсә көнөндә ҙур байрам-концерт эшләйәсәкбеҙ.

**Бөгөнгө көндөң башҡорт телендәге тапшырыуҙары мәҙәниәт һәм сәнғәт сиктәрен генә яҡтырта. Ә сәйәсәтте, иҡтисадты һәм йәшәйеште анализлағандары, үкенескә ҡаршы, юҡ. Йәш алып барыусылар, телейондоҙҙар әҙерләүсе мәктәпкә ошо һабаҡты индереү тураһында уйланғанығыҙ юҡмы?**

- Хәҙерге заманда сәйәсәтте, иҡтисадты һәм йәшәйеште анализлаған тапшырыуҙар урыҫ телендә лә юҡ тиер инем. Ҙур телевидение анализлау, һығымта яһау кеүек етди әйберҙәр менән булышмай тиерлек. Тапшырыуҙар мәғлүмәт һәм пропагандаға йүнәлтелгән. Аңлы рәүештә шулай эшләнәме, әллә яңылышмы, әйтә алмайым. Төпкә төшөп анализлай башлаһаң, кәрәкмәгән нәмәләр килеп сығыуы бар. Ә былай, саптырып ҡына өҫтән генә үтеп китһәң, йәтеш тә инде. Беҙ балаларҙы фекер төйнәргә, ваҡиғаларға үҙ ҡараштарын булдырырға өйрәтергә тырышабыҙ. "Тамыр селтәре" тигән мәктәп студиялары селтәрен булдырҙыҡ үткән йылда. Республиканың ун мәктәбе менән эшләйбеҙ. Балалар төшөргән социаль роликтар беҙҙе таң ҡалдырҙы. Ток-шоу ҙа ойошторҙоҡ. Тик әлегә коронавирус арҡаһында эш туҡтабыраҡ тора. Башҡортса публицистика, документалистика булдырыу-булдырмау беҙҙең үҙебеҙҙән тора. Сикләүҙәрҙе кеше үҙе уйлап сығара. Ҡурҡаҡлыҡтанмы, ялҡаулыҡтанмы, белмәйем.

Яңыраҡ "Тамыр" "Медиабренд" исемле хәтәр генә конкурста еңеүҙәр яуланы. Унда жюрила сит ил медиа белгестәре күп. Беҙ федераль каналдар менән бер рәттән ярышып, өс еңеү яуланыҡ. Башҡорт ауылы балалары тураһында, кейеҙ баҫыу, күн эшкәртеү, бәлеш бешереү кеүек һәр башҡортҡа яҡын булған төшөнсәләрҙе сағылдырған роликтар барыһын да таң ҡалдырҙы. Күптән түгел генә "ТЭФИ-kids" Рәсәй милли премияһы финалына "НТВ" һәм "Карусель" каналы менән бер рәттән "Тамыр" сыҡты тип хәбәр иттеләр. "Тау-тау хәбәр"ҙең балалары, әгәр жюри ғәҙел булһа, еңеү беҙҙеке буласаҡ, тип һалдырҙылар. Улар ике дәғүәсенең тапшырыуҙарын ҡарап өлгөргән икән. "Тау-тау хәбәр" кеүек көн дә тура эфирҙа эшләгән башҡа балалар тапшырыуы юҡ. Беҙ бит пандемия мәлендә үҙизоляцияла ла эфир эшләнек, тиҙәр. "Балалар хаҡлы", - тип көлә баш режиссер Әҙилә Һунарғолова.

**Шулай итеп, һәр башҡорттоң балаһы башҡорт телле, моңло, рухлы булып үҫһен өсөн баһалап бөткөһөҙ эштәр эшләй "Тамыр" телеканалы. Милли кейемдәребеҙ, милли ризыҡтарыбыҙ менән генә лә беҙ үҙебеҙҙе донъяла таныта алабыҙ. Әммә үҙебеҙ туған телебеҙҙә һөйләшә белмәһәк, һөйләшергә теләмәһәк, бишек йырҙарын йырламаһаҡ йәки йырлай белмәһәк, әкиәттәребеҙҙе үҙ телебеҙҙә ишетмәһәк, тыңларға теләмәһәк, бөтә донъяла беҙҙе таныуҙары кәрәкме ул? Үҙен башҡорт тип иҫәпләгән һәр атайәсәй шул хаҡта уйланһын ине...**



**Лена АБДРАХМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

## ДЕКЛАРАЦИЯ

Рәхимов бөгөн башҡа көндәгегә ҡарағанда ла иртәрәк уянды. Бала саҡтан уҡ шулай иртә торорға гәҙәтләнде. Ауыл ерендә ни кеше оҙаҡлап йоҡлап ятмай. Мортаза ла шуға өйрәнгәйне. Ҡалаға күскәненә инде күпме йылдар, әммә элекке гәҙәтен ташламаны. Бөгөн уянғас та тороп китмәйенсә, уйланып ятты бер аҙ. Нисек булыр көн? Һуңғы йылда һынауҙар күп булды, бөгөн шуларҙың береһеме, әллә иң олоһомо? Юғары Советтың бөгөнгө сессияһы бик күп нәмәне хәл итә. Башҡортостандың киләсәге, бәлки, уныҡы ғына түгел, уның менән бәйле күп илдәрҙең, халыҡтарҙың, миллионлаған кешенең яҙмышын билдәләйәсәк ул. Мортаза теләгәнсә барып сыҡһа, бер төрлө яҙмыш буласаҡ, килеп сыҡмаһа, башҡаса.

Йә, ярар, күп фәйләсүфләнеп ятҡансы, тормош ағышына ҡаршы атлау хәйерлерәктер, тип тороп, йыуынырға китте.

Ер йөҙөндәге халыҡтарҙың һәр ҡайһыһының үҙенсәлеге бар. Ана шул береһен икенсеһенән айыра ла инде. Үҙенсәлек кешеләрҙең физиологияһында ла, күбеһенсә холоҡ, гәҙәтендә сағыла. Мәҫәлән, башҡорт менән урыҫты бутау мөмкин түгел. Тышҡы ҡиәфәте буйынса ла, теле, холҡо йәһәтенән дә, фекер итеү яғынан да ныҡ айырыла улар. Әйтергә кәрәк, был үҙенсәлектәр халыҡтарҙа күп быуаттар һуҙымында барлыҡҡа килгән һәм улар нисек кенә үҙ-ара ҡатнашып, хатта бер ғаилә булып йәшәмәһен, барыбер һаҡлана һәм кешенең ғүмере буйына аҙым һайын үҙен белдерә тора.

Урыҫтарҙың йәшәү рәүеше нигеҙҙә ултыраҡ халыҡ булараҡ барлыҡҡа килгән. Уларҙың фекер итеүе лә ошо рәүешкә бәйле. Мәҫәлән, яҙ килеүе - ер эшкәртеүгә әҙерлек, йәй - шул ваҡыттағы баҫыу үҫемлектәрен үҫтереү, көҙ үҫкән уңышты йыйып алыуға бәйле. Уңышты бураларға һалып бөткәс, тормош көйөнөн ситкә лә китергә, башҡа нәмәне уйларға, ял итергә, күңел асырға мөмкин. Шуға тап ҡара көҙ мәлендә урыҫтарҙа байрамдар, туйҙар күп була. Буш ваҡытты улар бүтәнгә, әйтәйек, йыйылыштарға, үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе асыҡлауға, ауыл менән ауыл араһындағы килешмәүсәнлектәргә сарыф итергә мөмкин.

Башҡорттар, ҡаҙаҡтар, төркмәндәр, ҡырғыҙҙар, татарҙар - ғөмүмән, мал үрсетеү, мал бағыу менән шөғөлләнгән халыҡтарҙың үҙенсәлеге тап ошо шөғөл менән бәйле. Уларҙың ярты ғүмеренән күбеһе ат өҫтөндә үткән, кәүҙәләре лә шуға яраҡлашҡан: уртаса оҙонлоҡ, кәкрерәк аяҡтар, елдән һәм туҙандан һаҡланыуға яраҡлашҡан ҡыҫыҡ күҙҙәр, күҙ ҡыҫыҡлығы менән бәйле табаҡ бит. Улар ҡар иреп бөтөр-бөтмәҫтән малды ҡырға, яңы үләнгә ҡыуа. Ул саҡта үлән мал ҡабып өҙөрлөк кенә, башҡаға ярамай. Шуға малсылар үҙҙәрен тәбиғәт көйһөҙлөгөнән һәм тәнгә һыуыҡтан һаҡлар өсөн йә кейемгә (көнөн дә, төнөн дә уңайлы еңһеҙ һәм төймәһеҙ сәкмән. Тау кешеләре быны тик үҙҙәренең генә милли кейеме тип һанай. Бер уларҙыҡы ғына түгел), йә ҡыуыш ышыҡлана. Шуға күрә һәр ауыл тирәһендә "ҡабыҡ ҡыуыш" атамалы урындар бар, үлән булмағас, ҡыуышты ҡабыҡ менән ябаһың инде. Яҙҙан башлап ер туңғансы был халыҡтар малды яланда тота. Уларҙы көртәгә индергәс кенә еңел һулай, ҡулдары бушай. Башҡорттар һәм башҡалар ҡунаҡҡа йөрөшә, туй, йыйындар уҙғара башлай. Йәғни, былар ҙа уй-фекерҙәрен, урыҫтар кеүек, башҡа тарафҡа йүнәлтергә форсат таба. Йәғни, Рәсәйҙең барлыҡ халҡы ла уйлау һәләтен эштән ситкә бора. Уйлай-фекерләй башланыңмы, беренсе сиратта үҙенең тормошон башҡалар менән сағыштырырға, көнитмеш етешһеҙлектәрендәге гәйеплеләрҙе табыуға барып етә. Ә бындайҙар, әлбиттә, власть башында тороусылар. Шуға күрә Рәсәйҙә сәйәси күтәрелештәр көҙгө айҙарҙа була. 1905, 1917 йылғы революцияларҙы ал, 1814, 1863 йылдарҙағы болалар - башҡорт болаларының күбеһенең башланыуы ҡыр эштәре тамамланған мәлгә тура килә. Йәғни, был мәл - халыҡтарҙың тәбиғи күтәрелеш ваҡыты. Ошоно яҡшы төшөнгән ғалимдар менән сәйәсмәндәр ҙур сәйәси йыйындарҙы эштең тамамланыу осоронда ҡуймаҫҡа ынтыла. Әйтәйек, һуңғы осорҙа урындағы һәм үҙәктәге власть органдарын һайлауҙы йә яҙға (эштең башланған мәле), йә иртә көҙгә (эштең тамамланмаған осоро) ҡуйырға тырыша. Мәҫәлән, сентябрҙең тәүге ял көнө - Рәсәйҙә берҙәм тауыш биреү көнө. Был ваҡытта халыҡтың сәйәси күтәрелеше булмай. Власҡа ошо ғына кәрәк.




Башҡортостандың Юғары Советы Президиумы Суверенитет тураһында декларацияны ҡабул итеү-итмәү мәсьәләһен 10 октябргә ҡуйҙы. Был халыҡтың иң күтәрелеш мәле. Президиум ағзалары, әлбиттә, халыҡтың нык күтәрелә торған осоро көҙ икәнлеген самаламағайны. Был турала белмәнеләр ҙә, уларҙы өйрәтеүсе лә булманы.

10 октябрь Юғары Совет сессияһы буласағын иң алдан "Урал" башҡорт халыҡ үҙәгендә белделәр. Шунда уҡ үҙәктең етәкселәрен йыйып, бик тиҙ ҡарар сығарҙылар. Беренсенән, һәр ҡалала һәм районда "Урал" филиалдарының ағзалары халыҡ депутаттарын күреп һөйләшеп, суверенитет өсөн тауыш бирергә вәғәҙәһен алырға тейеш. Икенсенән, Өфөнән тыш, ҡала-райондарҙан сессия йортона килеп етер өсөн кешеләр билдәләргә, автобустар табырға кәрәк. Уларҙа килгән кешеләр сессия барасаҡ йортто уратып алырға, сессия эшен тыштан контролдә тоторға бурыслы. Өсөнсөнән, Башҡорт йәштәре иттифағы ағзалары һәм башҡа кешеләр сессия барған саҡта халыҡ араһында яҡшы тәртип булдырырға, ыҙғыш-талашҡа юл ҡуймаҫҡа тейеш. Әгәр провокациялар була ҡалһа, ундайҙарҙы милицияға тотоп бирергә кәрәк.

Татар халыҡ үҙәге лә йыйылды. Улар тик бер генә мәсьәлә ҡараны. Татар телен дәүләт теле итеү өсөн саралар күрелергә тейеш. Беренсе сиратта сессия барған йорт янына ошо турала лозунгтар күтәреп сығыу мотлаҡ.

Башҡа милләттәрҙең йүнәлешле ойошмалары юҡ ине, үҙҙәрен партия тип атаусылар, йә демократияны киңәйтеүҙе талап итеүселәр урамдарға сыҡмайынса, башҡа юлдар менән үҙ маҡсаттарына өлгәшеү сараларын күрергә булды.

Уға өлгәшер өсөн һәр ойошма үҙенең хәрәкәт ысулын эҙләне. Иң кәрәк һәм иң яҡшы ысул тип барыһы ла үҙҙәре эшләгәндә бөтә халыҡҡа еткереүҙе һананы. Бының өсөн бер нисә юл бар. Береһе - республика һәм ҡала, район гәзиттәрендә теләгәнде баҫтырып сығарыу, икенсеһе - шуны уҡ радио һәм телевидение аша кешеләргә еткереү. Ошо юлда иң йоғонтолоһо тип Айҙар Хәлим үҙенең эшен һананы. Ул Өфөнөң Совет майҙанында аслыҡ иғлан итергә булды. Татар телен башҡорт теле менән бер ҡатарҙан дәүләт теле итеп иғлан иткәнгә ҡәҙәр ятасаҡмын, тине һәм Совет майҙанында палатка ҡороп, аслыҡ иғлан итте. Уның ниәте, күрәһең, фәрештәләрҙең "амин" тигән мәленә тура килмәгәндер инде. Көндәр китте һыуытып, төндә һыу туңа башланы, көндөҙ ҙә йылы түгел, әле ямғыр, әле ҡар яуа. Иғлан иткәс, Айҙар тәүлек әйләнәһенә шунда ятырға тейеш бит. Янында һыуҙан башҡа бер нәмә лә юҡ. Ярай әле төн урталары үткәс, теләктәштәре иплəп кенә йылы аш алып килеп, тамағын туйҙырып китте. Был турала белеп ҡалырҙар тип шыртланы инде Айҙар үҙе. Тик белгәндәре һиҙелмәне. Шулай ҙа бер нисә гәзит, Айҙар халыҡты алдап ята, төнөн ашай, тип яҙып сыҡты буғай.

10 октябрҙә лә көндөң рәте булманы. Тәүҙә һирәк-һаяҡ ҡына төшөп торған ҡар шәбәйә барҙы һәм оҙаҡламай бөтә ерҙе ҡапланы. Иртүк махсус автобустарҙан төшкән, йә йәйәүләп килгән кешеләр Юғары Советтың сессияһы үтәсәк йортто ҡамап алды. Ҡулдарында - суверенитет талап иткән лозунгтар. Сессия башланырға ярты сәғәт самаһы ҡалғас, татар хәрәкәтенән бер нисә лозунг теҙмәнең иң ҡойроғонда ғына күренде. Яҡшы урындарҙы суверенитетсылар алып бөткәйне.

Сәғәт 10-сы яртыларҙа депутаттар килә башланы. Уларҙың һәр береһен манифестсылар ҡаршы алды, суверенитет буйынса нисек тауыш бирәсәген яҙып ала торҙо. Депутаттарҙың бер нисәһе генә суверенитет өсөн тауыш бирмәйәсәген белдерҙе.

Сессияны Юғары Совет рәйесе Мортаза Рәхимов асты һәм көн тәртибендә "Республиканың дәүләт суверенитеты тураһында декларация мәсьәләһе"н тикшерергә тәҡдим итте. Депутаттар уның менән ризалашты. Доклад өсөн һүҙҙе рәйестең үҙенә бирҙеләр.

Ул тәүҙә илдәге сәйәси, иҡтисади хәлде тасуирланы, һуңғы осорҙа тағы ла нығыраҡ насарайған хәл тураһында һөйләне, социаль һәм милләт-ара көсөргәнештең арта барыуына баҫым яһаны.

- Тормоштоң бөтә яғын да ҡамап алған көрсөк шарттарында Башҡортостандың етәкселеге үҙ халҡының мәнфәғәттәрен яҡларға бурыслы, - тине М.Ғ. Рәхимов. - Ә был Башҡортостандың дәүләт суверенитеты тураһында декларацияны ҡабул итеү талабын ҡуя. Декларация - ул Башҡортостандың артабанғы сәйәси, социаль-иҡтисади, мәҙәни-рухи үҫеше нигеҙенә ятасаҡ сәйәсәт һәм хоҡуҡ документы. Был беҙҙең бик ҙур иҡтисади мөмкинлектәребеҙ халыҡ мәнфәғәтендә файҙаланылһын өсөн кәрәк.

Башҡортостандың автономиялы республика статусы беҙҙең үҫеш өсөн аяҡтарҙы бәйләп торған тышауға әүерелде, шуға төбәктең эске һәм тышҡы йөкмәткеһен үҙгәртеү талап ителә.

Ҡайһы бер ҡала советтары һәм хеҙмәт коллективтарының, Башҡортостандың статусын үҙгәртеү өсөн бөтә халыҡ референдумын уҙғарырға кәрәк, тигән талапҡа яуап итеп, былай тим: беренсенән, референдум тураһында закон юҡ. Икенсенән, әгәр мәсьәләне Юғары Совет хәл итә ала икән, референдум ойошторолмай, өсөнсөнән, союздаш республикаларҙың бөтәһе лә, автономияларҙың байтағы декларацияны ҡабул итеп бөттө, улар референдум яһап торманы, дүртенсенән, декларация - шул тиклем киң, тәрән мәсьәлә, уны ябай ғына "эйе" йә "юҡ" тип кенә хәл итергә ярамай.

М. Рәхимов декларацияның төп үҙенсәлектәренә аңлатма биреп, бер бик мөһим мәсьәләгә туҡталды. Декларация республиканың артабанғы дәүләт хоҡуҡ акты буласаҡ, унһыҙ беҙҙе башҡа республикалар менән тиң хоҡуҡлы дәүләт тип иҫәпләмәйәсәктәр. Мәҫәлән, РСФСР Юғары Советы рәйесе Р.И. Хасбулатов 1990 йылдың 25 сентябрендә "Известия" гәзитендә, автономиялы республикалар дәүләт түгел, тип яҙҙы.

Докладсы бик күп һан, миҫал нигеҙендә Башҡортостанға үҙаллылыҡ алыу кәрәклеген раҫланы һәм үҙаллылыҡтың тормош хәлдәрен яҡшыртыуға нисек итеп йоғонто яһаясағын күрһәтте.

Ахырҙа докладсы, бойондороҡһоҙлоғо булмаған илде көнө-төнө хужаға хеҙмәт итеп, тамағы ашҡа туймаған, ятып йоҡларға урынды ишек төбөндә генә тапҡан хеҙмәтсе менән тиңләне. Бығаса Башҡортостан күпме генә тырышып эшләмәһен, социаль-иҡтисади хәл, торлаҡ, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, мәҙәниәт объекттары төҙөү йәһәтенән иң артта ҡалған төбәк булып ҡалды, тине.

- Үҙебеҙҙе үҙебеҙ хәстәрләмәһәк, беҙ берәүгә лә кәрәк булмаясаҡбыҙ. Шуға күрә республиканың дәүләт суверенитеты тураһында декларацияны ҡабул итеү - беҙҙең мөҡәддәс бурысыбыҙ һәм яҙмыш бүләк иткән берҙән-бер мөмкинлегебеҙ. Шуны файҙаланмаһаҡ, тарих беҙҙе ғәфү итмәйәсәк, - тип тамамланы һүҙен Мортаза Рәхимов.

Дүрт йөҙгә яҡын кеше ултырған зал шып-шым булып ҡалды. Уның ҡарауы, лозунгтар тотоп, тышта өшөй-өшөй торған халыҡ ҡул сабыуҙар, "ура" ҡысҡырыуҙар менән тынлыҡты шартлатты. Сессия эше тышҡа тауыш көсәйткестәр аша, республика телевидениеһы һәм радиоһы аша тура эфирҙа тапшырыла ине. Сессияны алып барған Демин артабанғы һүҙҙе Министрҙар Советы рәйесе М.П. Мирғәзәмовҡа бирҙе. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ул декларация проектын йә яҡлап, йә кире ҡағып йүнле фекер әйтә алманы, бары тик, баҙар иҡтисады шарттарында СССР һәм РСФСР сараларында ҡатнашыу өсөн Башҡортостан үҙ юлын билдәләргә тейеш, тип кенә әйтте.

Сессияның эшен артабан алып барыу дилбегәһен Рәхимов үҙ ҡулына алды.

- Докладты тикшереү өсөн 40-тан ашыу кеше теләк белдергән, - тине ул. - Кемдәр уларҙың рәтенә яҙылып өлгөрмәгән, ҡағыҙҙарығыҙҙы ебәрегеҙ, әле һуң түгел. Хәҙер доклад буйынса фекер алышыу тәртибендә һүҙ депутат Кавардаковҡа бирелә.

Кавардаков Юғары Совет иғтибарына КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетының V пленумы һәм Асҡын райкомының ҡарарҙарынан өҙөктәр уҡып ишеттереү менән сикләнде.

Артабан Рәхимов һүҙҙе бер-бер артлы Ғәлимовҡа, Уразбаевҡа, Аҙнағоловҡа, Ғимаевҡа бирҙе. Уларҙың дүртеһе лә докладты хупланы һәм үҙҙәре, һайлаусылары исеменән сессияға Башҡорт АССР-ның дәүләт суверенитеты тураһындағы декларация проектын нигеҙ рәүешендә ҡабул итергә тәҡдим яһаны.

- Хөрмәтле депутаттар! - тине Рәхимов. - Сығыш яһаусыларҙың төп фекерендә әйтелгән тәҡдимде тауышҡа ҡуям. Кем дә кем улар менән риза, ыңғай тауыш биреүегеҙҙе һорайым.

Ҡулдар бер ыңғай күтәрелде.

- Кемдәр ҡаршы? Ҡаршылар юҡ. Кемдәр битараф? Бындайҙар ҙа күренмәй. Шулай итеп, декларация проекты нигеҙҙә ҡабул ителә. - Рәхимов еңел һуланы, йөҙө йылмайыу менән тулды һәм үҙе лә һиҙмәҫтән ҡул сабып ебәрҙе.

Залдағы һәм йорттоң тышындағы кешеләр гөрләтеп ҡул сабырға тотондо. Тыштағылар:

- Йәшәһен Башҡортостан!

- Йәшәһен суверенитет! - тип һөрәнләргә тотондо.

**(Дауамы бар).**

*КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ*

# ОСТАЗЫҢ КЕМ БУЛДЫ?

**Борон-борондан ҡайҙалыр белем алып ҡайтҡан шәкерттән "Нимәгә өйрәндең?" тип һорамағандар. Ә "Уҡытыусың кем булды?" тип белешкәндәр. Ошо яуап барыһын да асыҡлаған.**



Эйе, баланың ниндәй булып үҫеүендә уҡытыусының өлөшө ифрат ҙур. Йәшәлгән ғүмер бейеклегенән ҡарайым да, тормошома ҙур йоғонто яһаған кешеләрем - атай, әсәй һәм уҡытыусыларым, тигән фекергә киләм. Беҙ - уҡытыусының абруйын таныған, уны баһалаған дәүер балалары. Һәр беребеҙгә тигеҙ иғтибар бүлгән, күңел йылыһын биргән уҡытыусыларыбыҙҙың хеҙмәте алдында бөгөн дә баш эйәбеҙ. Рәхмәт һүҙем - һоҡланғыс кеше, Күгәрсен районы Үрге Сирбай ауылында йәшәүсе уҡытыусым Гүзәл Ғиззәт ҡыҙы Фәхретдиноваға. Сирбай (Сарат) һигеҙ йыллыҡ мәктәбен тамамлаған һәр кем был исемде оло рәхмәт менән иҫкә ала. Сөнки был уҡытыусының бөтә ғүмере беҙҙең өсөн өлгө булып тора.

Күңелемдең йүгерек аттары бала саҡҡа әйләнеп ҡайта. Дүрт ауылдан - Сирбай, Дөмбәй, Сайыр, Етеболаҡтан йыйылған балалар әҙәбиәт дәресен көтөп алабыҙ. Ата-бабаларыбыҙ аманат иткән һүҙ ҡөҙрәтеме, әллә әҙәби геройҙарҙы, уларҙың күңел донъяһын беҙгә ихлас итеп еткергән уҡытыусыбыҙҙың оҫталығымы, һәр хәлдә, ошо сәғәттәр байрам кеүек ине. Ә күп тә үтмәй тағы бер шатлыҡ өҫтәлә: Гүзәл Ғиззәт ҡыҙы беҙҙең класс етәксеһе буласаҡ!

Эшсәнлеккә, башҡаларға ярҙам итергә, намыҫлы булырға, тәртипкә, өлкәндәрҙе ихтирам итергә, эскерһеҙлеккә өйрәтте класс етәксебеҙ. Шул уҡ ваҡытта тел байлығын, матурлығын, бөйөклөгөн күңелгә һалды, һүҙ ҡәҙерен белергә өйрәтте, күңелдәребеҙгә милли рух орлоҡтарын сәсте. Беренселәрҙән булып тыуған көн, дуҫлыҡ кисәләре ойоштorҙо. Бөгөнгө көндә лә класташтар осрашып, аралашып йәшәйбеҙ икән, тимәк, арабыҙҙағы йылылыҡты ошо кисәләр, байрамдар, өмәләр, уҡытыусыбыҙ фатихаһы биргән. Ауыл тарихын, тирә-йүндәге ер-һыу атамаларын өйрәнеү, өлкән йәштәге кешеләргә барып, йәнтөйәк тураһындағы риүәйәт, легендаларҙы яҙып алыу, тәбиғәткә сығып, уның тын алышын күҙәтеп, дәфтәргә төшөрөү матур хәтирә булып күңелдә йәшәй. Илһөйәрлек, телһөйәрлек шул мәлдәрҙә яралғандыр ҙа инде, тип уйланыла хәҙер. Көндөҙ дәрестәр, төштән һуң кластан тыш саралар, кисен дәфтәрҙәр тикшереү, план төҙөү. Өйҙә йәш балалары, донъя мәшәҡәттәре булған уҡытыусыбыҙ нисек өлгөрҙө икән барыһына?..

Һәр дәресе ҡыҙыҡлы, фәһемле ине уҡытыусымдың. Ул биргән тормош һабаҡтары күңелемдә йәшәй. Яҡты иҫтәлек булып, бер ваҡиға иҫкә төшә лә тора. Урта синыфтарҙа уҡыған саҡ булғандыр. Гүзәл Ғиззәт ҡыҙы бер-беребеҙгә ҡылыҡһырлама яҙырға ҡушты. Мин бер парта артында ултырған Алик класташым тураһында яҙырға тейешмен. "Алик гел һуғыша, тыңлашмай. Бөтәһен дә бокслай", тип теҙеп яҙып тапшырҙым. Уҡытыусыбыҙ барыбыҙҙы ла йыйҙы ла, күптәребеҙгә, шул иҫәптән миңә лә ғүмерлек һабаҡ бирҙе шул саҡ. "Бер ваҡытта ла кешеләр тураһында насар уйҙар йөрөтмәгеҙ, ауыр һүҙҙәр әйтмәгеҙ. Оҡшамаған насар яҡтары булһа ла. Иң тәүҙә уның яҡшы яҡтарын эҙләгеҙ!" тине. Дәрестән һуң эйәреп сыҡтым: "Ә ул кеше ныҡ насар булһа, бына Алик кеүек", - тип ныҡышам. "Ә ниңә һин уны насар тип уйлайһың? Малайҙар шуҡ, шаян, һуғыш суҡмары ла була инде ул. Һуңынан улар илен, ғаиләһен һаҡлар ир-егет булып үҫәләр. Иң мөһиме, күңеле матур булһын. Бына уйла әле, Аликтың бер яҡшы яғы ла юҡмы ней?"- ти уҡытыусым. Аҙыраҡ уйланам да: "Уның йылмайыуы матур", - тим. Ә ул: "Бына бит! Ихлас йылмая белгән кеше насар була алмай ул!" - ти.

Ғәҙәттә, мәктәп йылдары артта ҡалғас та, уҡытыусылар менән һирәк осрашаһың. Ә мин был йәһәттән бәхетлемен. Уҡытыусым ғүмерем буйына йәнәш барҙы, һәр йәһәттән уҡытыусым булып ҡалды. Тыуған ауылыма ҡайтҡан һайын, ваҡыт табып, уларға инеп сыға инем. Яҡты, ҡунаҡсыл, ҡотло өйҙәрендә уҡытыусым икенсе яҡтан тәрбиәләй. Ҡасан барма, өйҙә яңы бешкән икмәк еҫе, өҫтәл тулы милли ризыҡ. Күпереп бешкән икмәк, бәлештәр, ҡорот, яңы айыртылған ҡаймаҡ, бал, һөҙмә. Тормош иптәше Азат ағай менән шул тиклем йылы мөнәсәбәт, бер-береһен бер ҡараштан, бер ымдан аңлайҙар. "Бына нисек булырға тейеш ғаилә", - тип һығымта яһайым.

Ауылыбыҙҙа гөрләп үткән "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!", "Шәжәрә" байрамдарын ойоштороп, ҡайнап йөрөгән уҡытыусыбыҙ үҙенең фиҙаҡәрлеге менән беҙҙе лә эйәртә ине. Архивта ауыл тураһында материалдар туплау, шәжәрә ебен барлау, ойоштороу мәлдәре, һәм башҡа ваҡиғаларҙы әле лә һағынып иҫкә алабыҙ. Ваҡытын да, көсөн дә, хеҙмәтен дә, үҙ аҡсаһын да йәлләмәй бар эште күңелен һалып башҡарған яҡын кешебеҙҙең киң күңеле, оло йөрәге алдында баҙап ҡалдыҡ, һоҡландыҡ.

Йәмәғәтселек эше менән булышыуым да уҡытыусымдан. Йәмәғәтселек кимәлендә башҡарылған эштәрҙең барыһы ла кешеләр, тирә-яҡ, милләт, ил өсөн яуаплылыҡ тойғоһо менән башҡарыла. Тынғыһыҙ йәнле уҡытыусым кешеләр яҙмышы өсөн яуаплылыҡ тойғоһо менән йәшәй. Шуға ла ауыл тормошоноң уртаһында ҡайнап ғүмер итә. Ата-бабаларҙан ҡалған рухи ҡиммәттәрҙе үҫеп килеүсе йәш быуынға бөртөкләп тапшырыу, илде, телде, ерҙе һөйөргә, һаҡларға, яҡларға өйрәткән йолаларыбыҙға йән өрөү, тәбиғәтебеҙ сафлығын һаҡлау кеүек изге эштәрҙе үҙ иңдәренә алыусы ағинәйҙәр хәрәкәте барлыҡҡа килеү менән ауылыбыҙға йән, ҡот индереүсе ҡатын-ҡыҙҙарҙы тупларға керешә Гүзәл Ғиззәт ҡыҙы. Халҡыбыҙҙың йола-традицияларын тергеҙеп, ауылдың сәләмәт мөхитен тыуҙырыу өҫтөндә әүҙем эш башланы ауылым ағинәйҙәре. Милли кейем тегеп кейеп, ауыл байрамдарын йәмләп, ҡатын-ҡыҙҙар араһында тәрбиә эше башланылар. Килен булып төшкән еремдә ағинәйҙәр ҡорон етәкләргә тәҡдим алғас, уҡытыусыма йүнәлдем. Фатиха, кәңәш алыр өсөн. "Иң мөһиме күңелеңдә, булмышыңда ағинәйлек булһын, булдырырһың", - тине уҡытыусым. Рухланып, көс, дәрт алып, күңелем бөтәйеп ҡайттым унан. Бына шулай, уҡытыусыбыҙҙың оло йөрәге барыбыҙға ла етә. Бөгөн дә ауылдаштары ихтирамынан, уҡыусыларының һөйөүенән, абруйлы тамырҙарынан ҡөҙрәт алып йәшәй остазым.

Уҡытыусым, рәхмәтемдең, ихтирамымдың сиге юҡ. Һеҙ һалған һабаҡтарҙы бөгөн Ейәнсура районы Иҫәнғол башҡорт гимназияһы уҡыусыларының күңел кәрәҙҙәренә һалам. Изгелекте тик изгелек кенә тыуҙыра икәнен яҡшы аңлайым хәҙер.

**Нурия ҠУНЫСБАЕВА.**

*ҺАБАҠТАР*

# БАЛАЛАРЫҢА...

## матур тәрбиә бир



- Эй, ҡыҙым, килдеңме? Рәхмәт яуһын инде. Аяҡ тотмай башлағас, саҡырткайным шул, - инәй караутынан ҡалҡынды, әммә кәүҙәһенә көсө етмәй, кире ятты.- Эй Аллам, ҡартлыҡ - шатлыҡ түгел икән шул.

- Ҡыҙығыҙҙы көтә инегеҙме әллә, инәй, - бер әйткәндән ишетмәне, ҡабатлап һораным.

- Ә һин кем һуң? Мин бит филшер ҡыҙ тип торам. Танымайым, яҡыныраҡ кил, - инәй көс-хәл менән тороп ултырҙы, яулығы аҫтына ялпылдаған сәсен йәшерҙе, эргә-тирәһен һыпырып рәтләгән булды.

Аяғымды сисеп, карауат янындағы ултырғыстан урын алдым.

Ауылдың иң оло кешеһе тип ебәргәйнеләр мине уға. Ваҡытында "Утҡа инер, сабып барған атты туҡтатыр ҡатын" тип кенә йөрөткәндәр ауылдаштары. Был инәйҙең, ысынлап та, ауыл, район тарихында үҙ эҙе бар. Аслығын да, ялanғыслығын да, һуғыш һәм унан һуңғы йылдарҙың ауырлығын үҙ иңендә татыған. Ил иҡтисадын күтәреүгә, төбәкте алдынғылар иҫәбенә сығарыуға күп көс һалған. Тик һүҙем уның ниндәй маҡтаулы хеҙмәт юлы үтеүе тураһында түгел, ә ҡәҙер-хөрмәттә генә йәшәй торған осорҙа (инәй туғыҙынсы тиҫтәһен тултыра) япа-яңғыҙ көн күреүе хаҡында.

Аралашыуҙы, күҙгә ҡарап һөйләшеүҙе бик һағынған булһа кәрәк, карауатынан тороп, өҫтәл янындағы ултырғысҡа миңә ҡаршы ултырҙы. Өс ҡыҙ, бер ул тәрбиәләп үҫтергән. Йәшләй генә тол ҡалып, балаларына әсәй ҙә, атай ҙа булған.

- Һоратыусылар булманы түгел, булды. Тик балаларҙы үгәйһетеп, кеше күҙенә ҡаратып ултыртҡым килмәне, - тип башланы ул үҙенең һүҙен.

Дүрт балаһына ла заманына күрә яҡшы итеп туй яһап, ҡулынан килгәнсә үҙаллы тормош юлына баҫырға ярҙам иткән. Һикһәнгә тиклем мал-тыуарын да, ҡош-ҡортон да тотҡан. Бөгөн уның 13 ейән-ейәнсәре, алты бүлә-бүләсәре бар. Үҙе әйтмешләй, бер туйлыҡ, ике өмәлек. "Тик шул тиклем ҙур ғаиләле булып та ниңә яңғыҙы һуң бөгөн" тигән урынлы һорау тыуа.

Тағы бер ғаиләне миҫалға килтермәксемен.

Ҡасандыр күмәк бала тауышына күмелгән ҙур, әммә бик иҫкергән тағы бер өйгә үтәм. Ингәс тә корвалолдың ҡырҡыу еҫе танауҙы ярып инә. Ярым ҡараңғы бүлмәлә оло йәштәге бабай ҡара сәй эсеп ултыра. Мине күреү менән урынынан йәһәтләп торҙо. Үҙе: "Әсәһе, әйттем бит, балаларҙың береһе барыбер ҡайтыр тип", - тип миңә ҡаршы килде. Ул арала төпкө бүлмәнән билен бештән быуған хужабикә килеп сыҡты. Алты баланың береһе булһа ла ҡайтыр тип өмөтләнгән булған икән улар. Көнәлгәре көслө буран булып, йорт тулыһынса ҡар өйөмө уртаһында ҡалған. Шуға ла ҡарт әсә менән ата балаларының береһе булһа ла ҡайтып, "батшалар ҙа йәйәү йөрөй" торған урынға юлды булһа ла көрәп китер тип уйлаған.

- Балаларҙың һәр береһенең үҙ тормошо, хәсрәте бар, ҡайтмаһалар ҙа үпкәбеҙ юҡ инде ул, - уларға һүҙ тейҙергеһе килмәне ҡарттарҙың. Етем балаларҙың ҡарашы ни тиклем ҡыҙғаныс, үҙәккә үтерлек булһа, әлеге инәй менән бабайҙың күҙҙәре лә шул тиклем йәлләткес ине...

Эйе, итәк тултырып, бала үҫтереп тә, олоғайғас, яңғыҙлыҡта тилмергән әсәй-атайҙар байтаҡ арабыҙҙа. Бер үҙе йәшәгән яңғыҙ тигәндә аңлатмай бит әле, тиер кемдер. Бәхәсләшмәйем. Бер үҙе йәшәү менән яңғыҙлыҡ төшөнсәһе араһында айырма ла бар. Ысынлап та, бер үҙе йәшәп тә үҙен яңғыҙ тоймаған, киреһенсә, ошо яңғыҙлыҡҡа өҫтөнлөк биргән, балаларының, ейән-ейәнсәрҙәренең ығы-зығылы, шау-шыулы тормошонан ваз кискәндәр була. Ә кемдер балалары менән йәшәп тә үҙен яңғыҙ тойорға мөмкин. Тәүгеһе - ни эшләһә лә, ятһа-торһа ла, ауырыһа ла, йөрөһә лә - бер үҙе. Балаларына мәшәҡәт тыуҙырыуҙан йәки улыңмы-килененеңме, ҡыҙыныңмы-кейәүененеңме ҡырын ҡарауынан ҡурҡып, ә, бәлки, оялып яңғыҙ йәшәүҙе хуп күрә. Ҡулынан килгәнсә йорт хәстәрен үҙенсә башҡарып, үҙенә шунан йәм табып, көңгөр-ҡаңғыр йәшәүен дауам итә. Ундайҙар, ғәҙәттә, яңғыҙ тормошона бөтөнләй зарланмай.

Балалары, яҡындары араһында үҙен яңғыҙ тойғандарҙың хәле иһә аяныслыраҡ. Тыштан, бәлки, улай тойолмаҫ та. Ундайҙарҙың өҫтө бөтөн, тамағы туҡ булһа ла күңелдәре китек.

Бына тағы бер миҫал. Район ауылдарының береһендә ташландыҡ тигәндәй йорттоң тәҙрәһендә ут күреп ингәйнем. Өҫтәл янында ана йығылам, бына йығылам, тип хәлһеҙ генә инәй баҫып тора. Ҡулында - сынаяҡ. Йөрәк өйәнәгенән дарыу эсә ине ул.

- Ике йыл тирәһе элек биш-алты ай тирәһе кесе улымда тороп ҡайтҡайным да ул. Түҙерлегем ҡалмағас, ҡайтып, тағы ошонда йығылдым, -ти яңғыҙлығынан аҡланғандай. - Киленем дә, ейәнсәрҙәрем дә, хатта улым да мине ятһынды. Сығып киткәндә һаубуллашмайҙар, ҡайтҡанда ла иҫәнләшеү юҡ. Ашағанда ла бер-береһенә үсеккән һымаҡ, бер һүҙһеҙ ашайҙар ҙа тороп китәләр. Мин булғанға көйһөҙһөгөҙмө әллә, тип һорағайным, ризаһыҙлыҡ белдергәнемде генә көтөп йөрөгән кеүек, улым әллә нисә һүҙгә етте. Килен дә пенсиямды ҡыҙғаныу тураһында хәбәр һалды. Быға тиклем дә ҡайҙан булһа ла һүҙ минең пенсияға килеп терәлә ине. Аллаға шөкөр, пенсиям ҙур ғына. Шуны күрә алмай балалар, тора ла минең кеҫәләге аҡсаны һанайҙар. Ошо ваҡиғанан һуң ауылға ҡайттым да киттем.

Шунан яҡыныраҡ килеп:

- Бына әле байтаҡ пенсиям йыйылды. Мине ҡараһаң, һиңә бирермен, - тип ҡолаҡҡа шыбырланы.

Тәүҙә "таяҡҡа", һуңынан һуҡыр тингә эшләп, ҡартайғас ҡына ҡулына ысын аҡса тотҡан ҡайһы бер оло быуын вәкилдәренең, ысынлап та, аҡса йыйырға ҡомары уяна. Уны балалары менән бүлешеүҙән генә ҡурҡмай, хатта үҙҙәренән үҙҙәре ҡыҙғана, йәлләй. Үрҙә атап кителгән әбей ҙә аҡсаһын балаларына биреүҙән ҡурҡып, яңғыҙ йәшәй ине булһа кәрәк...

**Әммә нисек кенә булмаһын... Ҡарт әсәйең йәки атайың менән үҙ-ара ниндәй генә мөнәсәбәт урынлашмаһын, һин ғүмереңдең һуңғы көнөнә тиклем уларға бурыслы булыуыңды онотторға тейеш түгелһең, тип кенә әйтке килгәйне...**

**Ләйсән СӘЛИХОВА.**

*✓ Роза Юлдашбаева ғүмере буйы башҡорт милли кейемен художестволы-нәфис зауыҡ менән тергеҙеү өҫтөндә эшләй. Сигеү оҫталары араһында легендар шәхес булһа ла, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ул Рәссамдар союзы ағзаһы ла түгел.*



## ИНТЕРНЕТТАН



# АЛМА АША - ул диабеттан да файҙалы

■ Ғалимдар күберәк алма ашарға тәҡдим итә - был емеш мускулдар атрофияһын булдырмауҙың иң яҡшы ысулы тип табылған. Мускулдар атрофияһын булдырыусы сәбәптәр билдәле булһа ла, быға тиклем был сирҙән дауа табылмаған. Айова университеты тикшеренеүселәре мускулдар менән бәйле гендарҙың әүҙемлеген тикшергән ваҡытта был сирҙе булдырмаҫҡа ярҙам итеүсе компонентты алманың ҡабығында тапҡан. Ҡомаҡтарҙа үткәрелгән һынауҙар күрһәтеүенсә, был матдә мускул массаһын 15 процентҡа арттырырға булышлыҡ иткән. Бынан тыш, алма ҡандағы шәкәр күләмен, зарарлы майлы кислоталар һәм холестеринды кәметергә ярҙам итә. Табиптар фекеренсә, алманың тәбиғи үҙенсәлектәре диабеттан да файҙалы.

■ Американың Вирджиния университеты ғалимдары белдереүенсә, баш мейеһенең ҡартайыу процесы бик иртә башлана. Күп йылдарға һуҙылған тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, мейе әүҙемлегенең иң юғары мәле кеше 22 йәшкә еткәндә була. Эксперттар әйтеүенсә, 27 йәштә мейелә тәүге үҙгәрештәр башлана, ә 37 йәшкә еткәс, хәтер ныҡлап насарая башлай. Шулай ҙа артыҡ ҡурҡып китмәгеҙ, ти белгестәр, сөнки кеше ғүмер буйы нимәләр өйрәнә һәм был белем мейелә кеше ҡартайғансы һаҡлана.

■ Бөйөк Британияның биотехнологик компанияһы томаттан яңы дарыу уйлап сығарған. Тикшеренеүҙәрҙә йөрәк-ҡан тамырҙары менән сирләүсе 150 кеше ҡатнаша һәм уларҙың барыһында ла был препаратты ҡабул иткәндән һуң холестерин күләме кәмегән. Ғалимдар быны томаттарға ҡыҙыл төҫ биреүсе каротиноид ликопин менән бәйләй. Тиҙҙән был дарыуҙар Англия дарыуханаларында һатыла башлаясаҡ.

■ Телефон аша ойошторолған оҙайлы әңгәмәләр терһәк нервыһының тартылыуына килтерә. CNN хәбәр итеүенсә, шул сәбәпле ҡул бармаҡтары һыҙлай башлауы ихтимал. Был "сир"ҙе табиптар "мобиль терһәк" йәки кубиталь туннель синдромы тип йөрөтә. Америка хирург-ортопеды Леон Бенсон әйтеүенсә, һуңғы йылдарҙа бындай сир менән яфаланыусылар арта бара. Кешеләр, ғәҙәттә, ҡулдың ауыртыуына, хатта ойоуына зарлана. Бындай сиргә дусар булыусыларға ҡайһы бер осраҡта хирургик ярҙам кәрәк буласаҡ.

■ Бөгөн донъяла һәр икенсе оло кеше һәм бала мультивитаминдар ҡабул итә, әммә уларҙың файҙалымы, юҡмы икәнлеге тураһында бер кем дә уйланмай. Ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, бындай витаминдар ир-егеттәрҙең организмына бер нисек тә тәьсир итмәй. Мультивитаминдарҙы даими ҡулланған ҡатын-ҡыҙҙар һәм бөтөнләй витаминдар ҡабул итмәгәндәр араһында ла бер ниндәй ҙә айырма булмай сыҡҡан. Шуға ла ғалимдар төрлө витаминдар ҡатнашмаларына аҡса түкмәҫкә, ә йәшелсә, емеш-еләк, итте күберәк ашарға тәҡдим итә.

■ Эш урынында гөлдәр үҫтереү хеҙмәткәрҙәрҙең һаулығына ыңғай йоғонто яһай. Тикшеренеүҙәрҙә төрлө компанияларҙың 305 хеҙмәткәре ҡатнашҡан. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, офиста ни тиклем гөлдәр күберәк булһа, шул тиклем ауырып эшкә сыҡмаусылар һаны кәмерәк булған. Бүлмә гөлдәре организмды көсһөҙләндереүсе осоусы органик компоненттарға ла тәьсир итә ала.

## ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ

**Исеменән үк күренеүенсә, "Тамбур" халыҡ клубы төньяҡ-көнсығыш яҡта киң таралған ҡул эше кәсебен - тамбурлап-элмәләп ҡайый белгән оҫталарҙы берләштерҙе. Етәкселәре Сәйҙә Әхтәмова менән Венера Ғәлиәкбәрова тотона был эшкә - Билән ауыл Советы биләмәһендәге элекке ҡайыусыларҙы һәм уларҙың балаларын, һатылмай йә туҙмай ҡалған ҡайыулы әйберҙәрҙе эҙләп табып, онотолоп ҡалған һөнәрҙе яңынан тергеҙергә була. Әйтергә кәрәк, был эште ҡулына алған ҡатындарҙың күбеһе хаҡлы ялға сыҡҡан, улар төрлө һөнәрҙә эшләгән, балалар үҫтереп өлгөргән, ләкин тәү башлап дамберэнәгә (тамбурлап ҡайыу энәһе) тотонған тәүәккәлдәр була. Һәр кемеһенең әсәһе йә ҡартинәһе билдәле ҡайыусы булған, йорттарында, һандыҡ төптәрендә берәр ҡайылған алъяпҡыс йә ҡулъяулыҡ хәлендә генә булһа ла бер мираҫ һаҡланып, дөрөсөрәге, "иҫән" ҡалған. Унан һуң, улар был яҡтарҙа иң оҫта ҡайыусы һаналған Мәликә, Сабира, Зарифа, Хәсәнә инәйҙәрҙең ҡул эштәрен хәтерләй һәм уларҙың - Билән, Кәркәй, Ҡайып, Әшәй, Иҫке Маҫҡара ауылдарында йәшәгән дамберэнә оҫтаһы булған инәй-ҡәртнәйҙәренең Билән мәҙәниәт йортондағы ҡайыулы күлдәк, алъяпҡыс, ҡалпаҡ, эскәтер, тәҙрә ҡормалары, киндерҙән һуғылған мейес таҫтамалдары, ашъяулыҡтары һәм башҡа ҡул эштәрен үҙҙәренә өлгө итеп йөрөтә. Шулай итеп "Тамбур" халыҡ клубы иң ҡәҙерле ҡомартҡылар һаҡланған ошо музей-кабинетта ойоша ла инде.**

# КЕМ ҠАЙЫҒАН ҮРӘНӘГЕН,

## ҡотло булһын күлдәгең!



Төньяҡ-көнсығыш райондарҙа йәшәгән ҡатай, балаҡатай, дыуан, әйле, ҡошсо, терһәк, танып, көҙәй һәм шайтанкөҙәй ырыуҙарының милли башҡорт кейеме элмә-тамбур ҡайыуы менән биҙәлеүе хаҡында рус ғалимдары XIX-XX быуаттарҙа уҡ яҙа. Мәҫәлән, С.В. Руденко башҡорт ҡатындары кейемендә - күлдәк-ҡалпаҡтар, таҫтар-яулыҡтар - үлән-үҫемлек үрмәләре һәм ырыу тамғалары сигелеүен билдәләй, ә башҡорт этнографтары Светлана Шитова, Альмира Янбухтина, Елена Нечвалода башҡорт ҡайыу-сигеү һәм нағыш оҫталығын тикшерә, 1960-70-се йылдарҙа әллә нисә фәнни экспедиция үткәрә, монографиялар һәм каталогтар ижад итә.

### Роза Юлдашбаева - юғары баһа билдәһе

Япон халыҡ рәссамдарының тәжрибәһе нимә ти? "Халыҡ биҙәк-орнаменттарын ун йыл буйы тәфсирләп өйрәнмәйенсә тороп, рәссам үҙ биҙәктәрен кешегә күрһәтергә тейеш түгел!" Күренекле рәссам-дизайнер Роза Рафиҡ ҡыҙы Юлдашбаева башҡорт декоратив-биҙәү әйберҙәренә һәм милли кейемгә халыҡсан ҡайыу үрнәктәрен индереү буйынса бик күптән эшләгән шәхес. Ул 1965 йылда Мәскәү художество училищеһын, декоратив сәнғәт институтын тамамлай, ҡайыу-сигеү һәм декоратив биҙәү өлгөләре буйынса махсус белгес булып Башҡортостанға эшкә ҡайта. Өфөлә "Моделдәр йорто", "Ағиҙел" производство берекмәһе һәм "Салауат" күнтире кейемдәр ательеһында рәссам-модельер хеҙмәтен атҡара. Халыҡ һөнәркәсептәрен тергеҙеүгә ҡоролған "Ағиҙел" художество-сәнғәт комбинатында ике тиҫтәгә яҡын йыл баш рәссам булып эшләй. Уның талапсан һәм ентекле ҡарашы комбинат сығарған бер генә биҙәкте лә башҡорт милли зауыҡнан һәм үҙенсәлектәренән ситкә ебәрмәй, был йылдар - үҙе тотош бер эҙләнеү, даулашыу һәм еңеүҙәр яулау дәүере. "Ағиҙел"дә Роза Рафиҡ ҡыҙы һәм махсус белемле дизайнер-модельерҙар бергә башҡорт милли орнаменты менән биҙәлгән яңы кейем коллекциялары ижад итә, был уникаль эштәре һәр ваҡыт уңышлы килеп сыға. Роза Юлдашбаева коллекциялары "Ағиҙел" производство берекмәһенең данын күтәреп, башҡорт модельерҙарын илгә танытып, халыҡ-ара мода фестивалдәрендә һәм Бөтә Союз, Бөтә Рәсәй халыҡ-ара кейем конкурстарында еңә. Уның эшкә талапсанлығы һәм таланты хаҡында Башҡортостан Милли музейы фондына алынған, Нестеров исемендәге Башҡорт дәүләт художество музейында ҡуйылған эштәре асыҡ һөйләй.

Роза Рафиҡ ҡыҙы ғүмере буйы башҡорт милли кейемен художестволы-нәфис зауыҡ менән тергеҙеү өҫтөндә эшләй. Сигеү оҫталары араһында легендар шәхес булһа ла, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ул Рәссамдар союзы ағзаһы ла түгел, атҡаҙанған исемдәре лә юҡ. Роза Юлдашбаева башҡөллө эшкә күмелгән бер фиҙакәр йән булып ҡала: берҙән-бер оло мастерыбыҙ һаман да мәҙәни эштең алдында, конкурс-дефилеләрҙә төп баһаман һәм һөнәрмән һабағы бирерҙәй төп остаз.

Ҡайыулы кейемдең уңышлы моделдәрен ҙур производствоға ҡуйып, уларҙы теләгән бер кешегә һатып алырға мөмкинлек булырға тейеш, тип ҡайғыра ул бөгөн. Ҡасандыр 1980 йылдарҙа "Ағиҙел" производство берекмәһе етештергән ҡайыулы биҙәкле күлдәктәр, блузкаиткәтәр һ.б. бик популяр була, ҙур һорау менән халыҡҡа магазин-йәрминкәләр аша барып етә. Әгәр ҙә бөтә ҡатын-ҡыҙҙар ҙа тамбурлап ҡайылған кейемле булырға теләһә, уларға быны тәҡдим итергә, үрнәктәр эшләп бирергә кәрәк, ти оҫта.

Башҡортостан Халыҡ-ара Фольклориадаға әҙерләнгән мәлдә Роза Рафиҡ ҡыҙына йәнә бер идея тынғы бирмәй. "Боронғо ҡайыулы күлдәктәрҙе һандыҡта яткан йәки музейҙа торған өлгөләрҙән күсереп, яңы күлдәк-алъяпҡыс-ҡалпаҡ ҡайып кейҙеләр ҡатын-ҡыҙҙар, хуш, бик мәслихәт булды. Һәммә халыҡ уларҙың оҫталығын күрҙе, башҡорт ҡайыулы күлдәктәре милли байлыҡ икәнен белде, быныһы өсөн ҡайыусыларға мең рәхмәт. Ләкин эш артты! Беҙгә хәҙер артабан эшләргә, яңы заман кейемдәрен дә тамбур һәм башҡа сигеү-ҡайыу өлгөләре менән биҙәп өйрәнергә кәрәк. Беҙҙең башҡорт ҡайыусылары электән дә төрлө яҡлап өлгөргән, хәҙер бигерәк тә ижади эшләргә тейеш", - ти ул.

Баш ҡалала "Оҫталар мәктәбе" асырға, бөтә башҡорт сигеү-ҡайыу ысулдарын өйрәтергә хыяллана Роза Рафиҡ ҡыҙы. Теләүселәр ҙә етерлек бит! "Ошоға саҡлы республикала бер генә уҡыу йортонда ла башҡорт сигеү-ҡайыу техникаһы өйрәнелмәне. Был - һуш китмәле вайымһыҙлыҡ, яман ҡыҙғаныс хәл, - тип борсола Роза Юлдашбаева. - Уйлап-һанап ҡына ҡарағыҙ! Беҙҙең халыҡ оҫталары бик күп яҡлы, ғәжәп ябай һәм ифрат зауыҡлы нағыш, сигеү, ҡайыуҙар белгән һәм эшләгән. Тамбур-элмәнең генә дүрт-биш төрө бар, улары "ҡайыу" тип йөрөтөлә. Унан тыш, тағы ла башҡорт сигеүҙәре бар: ҡыя сәнсеү, саталау, ҡаҙ теше, сөмәрләү - бындайҙары "сигеү" тәрҙәре. Ә инде ярым саталау (тәре түгел), сатрашлау, кәкерсәкләү бергә туплау "нағыш" тип йөрөтөлә. Һәм башҡа сигеү-нағыш та осрай: мәрйенбисер менән сигеү, таҫма йәки шнур ҡушып сигеү, күпертеп йәки күтәрмәләп, сүпләп йә суҡлап сигеү төрҙәре менән байытылғандары ла була. Төрлө төбәктә йә ҡайыу, йә сигеү, йә нағыш тип әйтелһә лә, энә йә ырғаҡ менән төҫлө ептәрҙән биҙәк ҡоршап тегә торған боронғо кәсеп икәнен кеше аңлай".

Роза Рафиҡ ҡыҙы ҡул эше һөнәрмәндәре күргәҙмәләренән ҡалмай йөрөй, һәр ерҙә сигеү оҫталарын эҙләй. Комбинатта, ательеларҙа эшләгәндә лә сигеүсенең йәки машинаның эшен тикшереп, браклы-сифатһыҙ булмаһын, тип көйәләнеп үткән бит инде уның төп хеҙмәт дәүере. 2010 йылдарҙан ул Балаҡатай районы Билән ауылынан "Тамбур" халыҡ клубы ҡайыусыларының эшен ялыруыса диҡҡәт менән күҙәтә башлай. "Балаҡатайҙа бик яҡшы оҫталар бар бит, тел тейгеһеҙ эштәре. Ләкин нинә улар заманса кейемдәр ҡайыуҙы ла уйламай икән? Әгәр ҙә яҡшы дизайн, уңышлы модель менән тейешле туҡымала сигелһә, бындай кейемдәр бик тә кәрәк, барыһы ла һатып алыр ине", - тип тә борсола. Һәм үҙе балаҡатайҙарға тамбурлап ҡайылған заманса кейемдәр уйлап табырға тәҡдим итә, ҡайыулы модалы кейем барлыҡҡа килтерергә хыяллана. Оҫтаны ниәте тормошҡа аша. Бер аҙҙан ул Рәсәй дизайнерҙар берекмәһе ағзаһы Александр Анатольевич Кирдякин менән бергә Балаҡатай ҡайыусылары янына юлға сыға.

### "Ете елән" һәм "Ханымдар"

2016 йылда "Берҙәмлек"-"Содружество" халыҡ-ара фольклор фестивале ҡунаҡтарын Башҡортостандың төньяҡ-

көнсығыш районды ҡабул итте, төп тантаналы осрашыуҙар Мəсетле районында үтте. Егермелəп илдəн килгəн аллы-гөллө төркөмдəр бөгөнгө көн башҡорт милли кейем үрнəктəре менəн дə таныш. Байрамға бер дан булған "Һомай"фестивале - башҡорт милли кейеме һəм оҫталар күргəҙмəһе бар кешене хайран итте. Рəссам-модельер Роза Юлдашбаева, дизайнер-модельер Александр Данилович Кирдякин "Тамбур" халыҡ клубы оҫталары менəн бергə ижад иткəн "Ете елəн" коллекцияһы фестивалдə бик яҡшы баһа алды, гранпри яуланы. Музейҙарҙа ғына һаҡланған боронғо елəндəр араһында үҙенсəлекле елферҙəк итəклелəре осрай. "Ете елəн" өсөн тап шул фасон һайлана, киң итəкле елəндəр төрлөсə үҫемлек һүрəттəре менəн ҡайыла. Был үрнəктəрҙе Роза Юлдашбаева тəҡдим итə, ə ҡайыусылары "Тамбур" клубы оҫталары Сəйҙə Əхтəмова, Рəғиҙə Хафизова, Венера Ғəлиəкбəрова була.

"Һомай" фестивале ниндəй яңылыҡ менəн мəҙəни көндəлеккə уйылды һуң? Уны ойоштороусы Кəримə Кайдалова фекеренсə: "Тəүəккəл һəм маһир оҫталар үтə ялтырауыҡлы сəхнə кейемено əйлəнеп барған башҡорт милли кейемен сəхнəнəн кире халыҡ араһына һөйрəп төшөрҙө, йəғни көндəлек урамда, эштə, байрамда кейерлек зауыҡлы башҡорт кейемдəрен əҙерлəне".

Быны ошондай "түңкəрелештəр" барған "сепрəк донъяһы" - кейем моделдəре эсендə ҡайнаған дизайнерҙар "Һомай"ҙан һуң яңы ҡарашҡа кусте. Сигеү оҫтаһы һəм башҡорт кейеме белгесе Роза Рафиҡ ҡыҙы Юлдашбаева "Ханымдар" коллекцияһына ихлас тотондо: тəжрибəле дизайнер Александр Кирдякин менəн бергə яңы кейемдəрҙең конструкцияһын төҙөнө, үҙенең элекке уңышлы проекттарын тəҡдим итте, ни тиһəң дə, ҡасандыр ил күлəмендə енеп сыҡҡан моделдəр бит əле улар. Ҡайылған камзул, елəн, сапан, алъяпҡыстар ҙа шулай уҡ элегерəк һыналған һəм танылған моделдəрҙəн алынды. Был коллекция йəш ҡыҙҙар өсөн генə түгел, бөтə ҡатын-ҡыҙҙарға ла тəҡдим итерлек булырға тейеш, ти ул. Коллекциялағы һəр штрих, һəр композиция ҡоролошо, һəр деталдең буйы-арҡырыһы, ҡыҫҡалығы-оҙонлого, кейемдең туҡымаһы, уны бесеү лекалоһы - ентеклəп тикшерелде. Хатта был күлдəктəрҙе кейəсəк ҡатын-ҡыҙҙың йəше, 170 сантиметр буйы (180 см түгел!), тəн тулылығы - барыһы ла иҫəпкə алынды. Балаҡатай район мəҙəниəт йортона урта йəштəге зифа буйлы ҡатын-ҡыҙҙар саҡырылды. Улар ошо төбəктə уҡытыусы, адвокат, һатыусы, хужабикə, врач булып эшлəүселəр.

"Ханымдар" коллекцияһы моделдəрен тантаналы күрһəтеү-дефиле Билəн ауыл мəҙəниəт йортонда булды. Ҡатмарлы осорға ярашлы, залда тамашасы бик аҙ - ҡырҡ биш кешенəн артмай. Композитор Урал Иҙелбаев көйө ағыла, талғын ғына атлап бер-бер артлы моделдəр сəхнəнəн төшə һəм халыҡ алдына килə. Кешелəр һоҡланыуҙан башта аптырап ҡала, тора-бара һəр моделде көслө алҡыштар тулҡыны оҙата. Дефиле сабыр һəм тыйнаҡ, аҡыллы һəм тыныс темпта бара. Ҡыҙҙар бик килешле итеп башҡорт халыҡ бейеү хəрəкəттəренə эйəреп һəм үҙ дəрəжəлəрен белеп кенə коллекция моделдəрен тəҡдим итə. Уларҙа һəр аҙым һəм хəрəкəт һəлмəк һəм баҙыҡ. Шулай итеп, "Ханымдар" коллекцияһын Балаҡатай һылыуҙары асыҡ күрһəтə белде: əр-яңы һəм боронғоса тамбур ҡайыулы биҙəктəр, уларҙың Билəн үрнəктəренə хас үҙенсəлеге, фасон-формаларҙағы традиция һəм яңы һыҙаттар... Бер биҙəк-форма ла ситтə ҡалманы. Шулай булмай ни! Балаҡатай район мəҙəниəт йортоноң художество етəксеһе Əлфиə Ғабдулбарый ҡыҙы Баһаутдинова менəн хореограф Нина Васильевна Рябчик был һомғол буйлы һөйкөмлө йəш ҡатындар менəн бер ай буйы репетиция үткəрə. Һөнəрҙəре төрлө, телəктəре бер була тəүбашлап модель бурысын алған һылыуҡайҙарҙың: Эльвина Жəлил ҡыҙы Хөснуллина (бьюти-индустрия оҫтаһы), Лиана Владик ҡыҙы Рəхмəтуллина (инфраструктура белгесе), Гөлназ Фларид ҡыҙы Литвинова (район гəзите хеҙмəткəре), Луиза Мансур ҡыҙы Хурамшина (медицина университеты студенты), Айһылыу Рəйес ҡыҙы Талибова (МЧС диспетчеры), Диана Ишбулат ҡыҙы Хажина (мəҙəниəт йорто методисы), Лилиə Рифат ҡыҙы Рахманғолова (тəрбиəсе). Мəҙəниəт бүлеге етəксеһе Ковалева Татьяна Александровна, мəғлүмəт-методика бүлеге мөдире Кəримова Гөлназ Əнүəр ҡыҙы, күмəк саралар үткəреү режиссеры Драгунова Наталья Александровна һəм бөтə район өсөн ҙур ваҡиға була был эш.

Тырышлыҡ бушҡа китмəй, "Ханымдар" коллекцияһын күрһəтеүсе ханымдарға халыҡ аяғүрə баҫып ҡул саба, "афарин, рəхмəт" яуҙыра. Башҡортостан Республикаһының мəҙəниəт министры урынбаҫары Рəнис Рəйес улы Алтынбаев, Балаҡатай район хакимиəте башлығы Мəсғүт Рəшит улы Миңлеғəлин, уның урынбаҫары Лилиə Рəмил ҡыҙы Мулланурова, Билəн муниципаль ауыл Советы рəйесе Альберт Миңлеғəли улы Абдуллин, Билəн фермер хужалығы етəксеһе Əнүəр Жəлил улы Ғəлиəкбəров, телевидение дикторы, РФ-ның атҡаҙанған мəҙəниəт хеҙмəткəре Флүрə Ишбулат ҡыҙы Мурзина, ҡайыусы оҫталар, уҡытыусылар һəм хеҙмəт ветерандары - һəммəһе лə коллекцияны ижад иткəн остазды - Роза Рафиҡ ҡыҙы Юлдашбаеваны дəррəү ҡотланы. Ул - идея авторы, нисəмə йылдар буйы хыялланған эшен алға сығарыусы бəхет ҡошоноң эйəһе булды был мəлдə.

## Ҡайыусының эше - үҙе бер дан

Билəн йыйыны һəр ваҡыт яңы тарихи китап, табыш-асыштар менəн ҡыуандыра, ғалимдар сығышы һəм бəхəсе гөрлəп торған фəнни-ғəмəли конференциялар ҙа үтеп тора. Быйыл иһə, бишенсе тапҡыр үткəрелгəн сара яңыса төрлəнде, ул заман ҡушҡанса "битлек кейеп", тарихсылар һəм крайҙы өйрəнеүсе һəүəҫкəр эҙəрмəндəр урынына ҡайыу оҫталарының асыҡ төбəк-ара конкурсын һəм оҫталыҡ дəрестəрен иғлан итте.

Билəн йыйынына баш һалыусы уҙаман Əнүəр Ғəлиəкбəров əйтеүенсə, "ҡайыу-тамбур биҙəктəре бөтə Өфө йылғаһы буйлап, башынан тамағына хəтле нисəмə быуаттар йəшəгəн һəм йəшəйəсəк. Биҙəктəр беҙҙе табыштыра, тоташтыра, берлəштерə". Был көндə Билəн мəҙəниəт йортонда иртə таңдан үҙенсəлекле конкурс - "Тамбур ҡайыуы - төбəк-ара аралашыу билдəһе" регион-ара этнофорум да үтте. Ҡайыусылар төрлə яҡтан саҡырылды: Сəйҙə Əхтəмова (Билəн ауылы), Камилла Сабирова (Ҡайып ауылы), Лиана Ғафарова (Кəркəй ауылы), Рəғиҙə Хафизова (Ҡайып ауылы), Светлана Мелика (Билəн ауылы), Рəмзилə Шабанова (Яңыбай ауылы), Гүзəлиə Ишкинина (Дыуан районы Мөлкəт ауылы), Тəнзилə Ғəйнетдинова (Мəсетле районы Яңы Яуыш ауылы), Шəрғиə Яҡшыдəүлəтова (Белорет районы Инйəр ауылы), Рəғинə Ғиниəтуллина (Мəсетле районы Оло Ыҡтамаҡ ауылы), Һандуғас Ҡаландарова (Свердловск өлкəһе, Түбəнге Серге районы Өфө Шигере ауылы), Филүзə Хөснөтдинова (Салауат районы Ахун ауылы), Эльза Максиева (Пермь крайы, Барҙым районы Төндəк ауылы). Иң юғары оҫталыҡ, əлбиттə, "Тамбур" халыҡ клубы ҡайыусылары Сəйҙə Əхтəмова менəн Рəғиҙə Хафизоваларҙа. Был һəр кемгə асыҡ.

"Тамбур" халыҡ клубы ағзалары бөтə этнофорумды сағыу милли йола сығышы менəн биҙəне. Улар еңеүселəргə ҡайыулы таҫтамал һəм башҡа бүлəктəр əҙерлəп, йыйынға барыу йолаһын күрһəтте. Мəҙəниəт йортон биҙəгəн тамбурлы ҡул эштəре байрамса балҡып торһа ла, ауыл билəмəһе башлығы Альберт Абдуллин бик күптəрҙең телəге булып та шундай үҙенсəлекле һəм күптəн көтөлгəн сараны күрə алмауы өсөн көйөндө. "Өфө буйы башҡорттары һəм уларҙың тамбур үрнəктəре" фольклор байрамына, йəғни "Билəн йыйыны"на бөтə төньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда, Силəбе һəм Свердловск өлкəлəрендə йəшəгəн миллəттəштəребеҙҙе йыйып байрамдар үткəреүҙе башлаған Əнүəр Ғəлиəкбəров, Билəндə үҙ аҡсаһына ауыл тарихы музейын төҙөгəн Жəүриə Ҡəйүмова был эштəре тураһында: "Бер ғорурлыҡ беҙҙе күтəрə: билəндəр элмə-тамбур ҡайыулы башҡорт милли кейемен оло сəхнəгə сығарҙы, халыҡ байрамдарына, фестиваль һəм форумдарға, каталогтарға һəм күргəҙмəлəргə индерҙе. Ҡайыулы башҡорт кейемен бөгөн һəр кем таный һəм кейеп йөрөргə телəй. Оҫталарыбыҙ модельер, дизайнер, рəссамдар менəн бергə яңы кейемдəр ҡайып бирə, был - беҙҙең еңеү", - ти.

## Ҡунаҡтар - Ҡатай ырыуы йəштəре

2020 йылғы Билəн йыйынында ҡатай ырыуы йəштəре ҡатнашты. Боронғо башҡорт ырыуы булған ҡатайҙар быйыл туғыҙынсы мəртəбə ырыу-ара ҡəүемдəрен барлай: тауҡатай, инйəрҡатай, яланҡатай, олоҡатай, балаҡатай, ҡоҙғонҡатай, урманҡатай, иҙелҡатай тигəн тоҡомдары Оло Башҡортостандың билəмəлəрендə əле лə донъя көтə. "Ҡатай" йəки "кидан" тип тарихта яңығыраған ырыу ике мең йыл əүəл уҡ Уралтау буйында билдəле булған. "Ҡатай" һүҙенең "ҡытай" менəн, ҡояш сығышындағы Ҡытай иле донъяһы менəн бер ниндəй ҙə бəйлəнеше юҡлығын ғалимдар күптəн иҫбат итте. Һуңғы осорҙағы гаплотөркөмдəрҙе тикшереү һөҙөмтəһе лə бөтə фəнни даирəне шаҡ ҡатырҙы: ҡатай ырыуына ингəн был ҡəүемдəр Уралда бик борондан төплəнгəн бер халыҡ, төп башҡорт халҡы икəн. Ошондай ғилми һабаҡтар алып, уйынкөлкө менəн байып, этнография, фольклор хазиналарын барлауҙы ҡатайҙар быйылғы шарттарҙа ла туҡтатмай - интернет аша йыйын үткəрə. 2012 йылдағы тəүге Билəн йыйынына Ҡыйғы районы Абзай ауылы йəштəре килгəйне, төркөм башлығы: "Беҙ - оло ҡатайҙар, беҙҙең ауылда быйыл ҡатай ырыуы йəштəре йыйылды, ете районда, ситтə ҡалған өлкəлəрҙəн күптəр килде. Үҙебеҙҙə ат сабышы-бəйге, йүгереш, көрəш, һылыуҙар майҙаны ҡорҙоҡ, ə бында иң шəп көрəшсебеҙҙе алып килдек, һəм балаҡатайҙарҙың тамбурлы кейем байрамына ихлас ҡушылабыҙ", - тип сəлəмлəп торҙо. Быйылғы онлайн ярышта еңеүсе булған егеттəр Билəн ерендə уҡ атыуҙа уҙышты, һылыу ҡыҙҙар йырбейеүҙə гөрлəште. Бергəлəшеп төбəктə таралған "Сүрəкə" уйынын шаулаттылар.

**Шулай итеп, Балаҡатай районы Билəн ауыл мəҙəниəт йортонда һəм "Тамбур" халыҡ клубы оҫталары янында үткəн был көн бик күп төрлə яҡты уй-тəьҫораттарға, асыштарға бай мəл булды. Халыҡ үҙ асылын һəм тарихын, үҙенең киләсəк юлын һəм эштəрен асыҡ күргəндə генə шулай күк ҡабығы асылғандай һəр бер көңелдə яҡтыртып китə торғандыр.**

**Сəрүəр СУРИНА.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҒҮМЕРҘƏР ЗАЯ ҮТМƏҺЕН

## 41-се идея Ҡанаттарыңды ҡайырма...

Һин үҙең һайлаған һəр юлдың, ҡарарҙың мөһимлеген аңлайһыңмы? Һəр ҡарарың нимəгə килтерəсəген төшөнəһеңме? Ҡыҙыҡ фекер: үҙ тəртибебеҙҙең нескəлектəрен беҙ үҙебеҙ билдəлəйбеҙ, ə тəртибебеҙ, үҙ сиратында, килəһе ҡарарыбыҙҙы билдəлəй - һəм артабан шулай дауам итə. Əгəр һин кире ҡарар ҡабул итһəң, улар һинең өсөн артабан да кире ҡарар ҡабул итеүҙе еңелəйтеүсе кире фекер рəүешен үҫтерə. Əгəр ыңғай ҡарар ҡабул итһəң, был һинең өсөн килəсəктə лə ыңғай ҡарар ҡабул итеүҙе еңелəйтеүсе позитив фекерлəү рəүешен тəрбиəлəй.

Һəр һайлаған аҙымың тəбиғəте менəн бынан алдағыһына оҡшаш артабанғы ҡарарыңа илтеүсе тəбиғи һөҙөмтəгə килтерə. Мөғжиҙəсе-экспериментатор Лютер Бербанк бер ваҡыт беҙҙең ҡарарҙың мөһимлеген һүрəтлəүсе йəш һабан турғайы тураһында матур əкиəт һөйлəне. Йəш һабан турғайы атаһы менəн бергə осҡанда һабан турғайҙарының ниндəй яҡшы ҡош булыуы хаҡында уның һөйлəгəндəрен тыңлай. Ул һабан турғайҙарының башҡа ҡоштарға ҡарағанда бейегерəк оса һəм матурыраҡ йырлай алыуы хаҡында ишетə. Атаһы улына, һабан турғайы булыу - ул бик яҡшы ғаилəнəн сығыу, боронғо шəжəрəң булыу һəм матур, юғары тормош менəн йəшəү, тигəнде белдерə, тип ҡабатлауҙан туҡтамай. Лəкин йəш турғай бер ҡолағы менəн генə тыңлай, икенсеһен ергə йүнəлтə, сөнки аҫта юл буйлап ҡул арбаһы һөйрəгəн, бəлəкəй генə көмөш ҡыңғырау тотҡан бер кеше китеп барған була. Ул ҡыңғырауын шылтыратып бара; бəлəкəй һабан турғайы, ҡыҙыҡһыныуын еңə алмайынса, һабан турғайҙарына хас булғанса, ҡапыл ергə табан ынтыла: ул һайрап, матур, һомғол хəрəкəттəр менəн спираль яһап өҫкə күтəрелə лə, һуңынан ҡанаттарын йəйеп, ергə ынтыла.

Шулай итеп, бəлəкəй һабан турғайы атаһы эргəһендə осоп, үҙенең данлы шəжəрəһе тураһында тарихты тыңлай; лəкин ул ҡыңғырау шылтыраганын да ишетə. Ə ул аҫҡа төшкəс, кеше һабан турғайына ҡауырһындарына алмашҡа ер ҡорттары тəҡдим итə. Һабан турғайына был сəйер тойола, лəкин ул ер ҡорттарын бик тəмле аҙыҡ тип иҫəплəй, шуға күрə: "Бер ҡауырһын өсөн минə нисə ҡорт бирерһең?" - тип һорай. "Бер бөртөк ҡауырһын өсөн ике ҡорт", - тип яуап бирə кеше.

Шул саҡ һабан турғайы ҡанатынан бер ҡауырһынын һурып ала, уны ике ҡортҡа алмаша ла уларҙы ҙур ҡəнəғəтлек менəн ашап ҡуя. Һуңынан ул өҫкə атаһының эргəһенə осоп менə, атаһы бер нəмə лə һиҙмəгəндəр, тип өмөтлəнə. Ысынлап та, атаһы бер нəмə лə һиҙмəй ҡала. Был хəл көн һайын ҡабатлана. Бына бер көн иртəнсəк ҡанаттарын ҡағып, осоп китергə ынтыла ла, оса алмауын асыҡлай. Ул үҙ ҡанаттарынан шул тиклем күп ҡауырһындарын һурып биргəн, хəҙер улар уны һауаға күтəрə лə алмай. Ҡауырһындары ҡайтанан үҫеп сыҡҡансы күп айҙар үтə, был ваҡыт эсендə бəлəкəй һабан турғайы, ҡауырһындарын ер ҡорттарына алмаштырып, ниндəй ҙур ахмаҡлыҡ эшлəүен аңлай. Беҙҙең көндəлек ҡарарҙар менəн дə шулай уҡ килеп сыға. Беҙ яҡшы тəжрибəне йə тағы ла яҡшырағына алмаштырабыҙ, йə булмаһа, һабан турғайылай, "ҡауырһындарҙы" "ер ҡорттарына" алмаштырабыҙ. Һəр ҡарарың, һəр һайлаған юлың һине юғарыраҡ күтəргəндəн-күтəрə, йəки, киреһенсə, аҫҡараҡ төшөргəндəн-төшөрə.

**Роберт ЭНТОНИ.**

**(Дауамы бар).**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ЙӘШТӘРҘӘ ҺИҘЕЛҺЕН ҠАРТТАРҘЫҢ АҠЫЛЫ, ҠАРТТАРҘА ҺАҠЛАНҺЫН ЙӘШ КЕШЕ АСЫЛЫ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**39-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Битлз. Юлдашев. Аспид. Нағыш. Балет. Теорема. Алғасҡы. Ширин. Көркәк. Абаға. Ата. Инсан. Хант. Ауыл. Андыҙ. Ра. Ышан. Айран. Тағараҡ. Ноктюрн.

**Вертикаль буйынса:** Атнабаев. Ноғоманов. Сабатасы. Юлсы. Шайтан. Штык. Будда. Аҡлан. Скаут. Парикмахер. Акула. Завод. Ҡан. Баш. Итака. Инан. Ирга. Төн. Наҙан.

БЫЛ - ҠЫҘЫҠ

# ЙӘМҒИӘТ ҠАРТАЙТА...

**Психиатр Эллен Лангер 1979 йылда ошо тәжрибәне үткәрергә ҡарар иткәндә үк ҡыйыу теорияларҙы тағы ла ҡыйыуыраҡ итеп ғәмәлдә ҡулланып ҡарауға өҫтөнлөк биргән белгес репутацияһына эйә була. Эллен, ғәҙәттә, тәжрибәләрен пенсионерҙар менән үткәргән.**

Өс йыл алдараҡ ул Коннектикутта Арден-хаустағы ҡарттар йортонда геронтология өсөн революцион тәжрибә авторы булып танылa. Ул ҡарттарҙы, беҙ уйлағанса, әпәүләп тороу уларҙы ниндәй ҙә булһа сиргә ҡарағанда тиҙерәк ҡәбергә илтәсәк, тип раҫлай. Тәжрибә өйрәнелгән ярҙамһыҙлыҡ синдромын тикшереүҙең бер өлөшө булып тора. Миссис Лангер ҡартлыҡтың төҫһөҙ ореолын емереп, үҙебеҙҙе ҡасанға тиклем йәш тип иҫәпләйбеҙ, шул тиклем йәшбеҙ, тип раҫларға батырсылыҡ итә. Яңы тәжрибә өсөн ул уртаса 75 йәштәге һигеҙ ир-атты һайлай. Тәжрибәлә ҡатнашыусылар бер аҙна дауамында Нью-Хэмпшир штатында ғилми-донъяуи ихтыяждар өсөн йыһазландырылған монастырҙа йәшәргә тейеш була. Ҡарттар алда нимә көткәнен дә белмәй. Тик уларҙан үҙҙәре менән һуңғы 20 йыл эсендә сыҡҡан китап, журнал йәки фотолар алмауҙарын һорайҙар.

Һигеҙ ир-ат йортҡа килеп ингәс, аптырап ҡала. Әйтерһең дә, улар ҡабат үткәндәргә - 1959 йылға әйләнеп ҡайтҡан: аҡ-ҡара төҫтәге телевизор, иҫке пластинкалар, китаптар, календарҙар. Артабан тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ: уларға урамда ысынлап та 1959 йыл тип уйлап, шул ваҡыттағыса кейенергә ҡушҡандар. Йәғни, был ирҙәргә 75 түгел, бары тик - 55 кенә. Тәүҙә был мөмкин түгел кеүек ҡабул ителә. Нисек итеп тормоштоң һуңғы 20 йылын һыҙып ташлайһың? Әммә, тышҡы донъя менән бәйләнеш булмағас, ир-аттар үҙҙәрен бик тиҙ 1959 йылдағы кеүек тота башлай. Хеҙмәтләндереүсе персонал да икенсе мөнәсәбәттә була: бер кем дә ауыр сумканы күтәрешергә, нимәнелер күсереп ҡуйырға ярҙамлашмай, дарыу ашау һәм процедуралар үтеү тураһында иҫкәртмәй. Тәжрибәнең бер аҙнаһы иҫ киткес һөҙөмтәләр бирә: күптәрҙең һыны турая, мускулдары көс ала, күреүе (10 процентҡа) һәм хәтерҙәре яҡшыра. Йәғни, ҡартлыҡ йәлләп тормаған барлыҡ параметрҙар тергеҙелә. Бынан тыш, тәжрибәлә ҡатнашыусы 63 проценттың IQ кимәле баштағыға ҡарағанда юғарыраҡ булыуы асыҡлана. Иң мөһиме, ҡатнашыусылар йөҙгә лә йәшәрә: тәжрибәнән алда һәм унан һуң төшөрөлгән фотоларҙа ирҙәр уртаса өс йәшкә йәшерәк күренә.

**Йәғни, был тәжрибә үҙебеҙҙе тойоуыбыҙ беҙҙең тирә-яҡ мөхиткә һәм ул беҙгә көсләп таҡҡан моделгә туранан-тура бәйле икәнен раҫлай. Әгәр һин 70 йәштә үҙеңде олатай тип һанаһаң, ҡартлығыңа зарланһаң һәм юлды аша сығырға ярҙам һораһаң, үҙеңде ҡарт итеп тойорһоң. Әгәр социумдың мыжыҡ пенсионерҙарға ихтыяжына күҙ йомһаң, 115 йәшкә еткәндә лә үҙеңде 45 йәштәге кеүек хис итергә, оҙайлы, сәләмәт, әүҙем һәм бәхетле тормош алып барырға мөмкин. 2009 йылда Эллен Лангер үҙ тәжрибәләре нигеҙендә "Против часовой стрелки" (Counter Clockwise) бестселлерын яҙа.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Октябрь (Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ақшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 5 (18) дүшәмбе | 5:58 | 7:28 | 13:30 | 17:09 | 18:39 | 20:09 |
| 6 (19) шишәмбе | 6:00 | 7:30 | 13:30 | 17:07 | 18:37 | 20:07 |
| 7 (20) шаршамбы | 6:02 | 7:32 | 13:30 | 17:04 | 18:34 | 20:04 |
| 8 (21) кесе йома | 6:04 | 7:34 | 13:30 | 17:02 | 18:32 | 20:02 |
| 9 (22) йома | 6:06 | 7:36 | 13:30 | 16:59 | 18:29 | 19:59 |
| 10 (23) шәмбе | 6:08 | 7:38 | 13:30 | 16:57 | 18:27 | 19:57 |
| 11 (24) йәкшәмбе | 6:09 | 7:39 | 13:30 | 16:55 | 18:25 | 19:55 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры

**7 октябрь "Әлифбанан бер себеш"** (А. Кивиряхк), монодрама. 12+

**8 октябрь "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Калдырма, әсәй!" повесы буйынса) 12+

**9 октябрь "Әҙләнем, бәгерем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 12+

**10 октябрь "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия. 18.00 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**9 октябрь "Униженные"** (З. Биишева), драма. 12+

**10 октябрь "Үәт, исмаһам, ахырызаман!"** (М. Багаев), комедия. 18.00 16+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**5 октябрь** Башҡортостандың Т. Сәйфуллин исемендәге **Академия хор капеллаһы**, онлайн концерт. 6+

**6 октябрь "Марина Цветаева"**, әҙәби шишәмбе. 6+

**8 октябрь "Здесь встретил я свою любовь..."** 6+

**9 октябрь "Осенний концерт с камерным оркестром"** 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**6 октябрь "Тысяча и одна ночь"** (П. Васильев) 19.00 16+

**7 октябрь "Гадкий утенок"** (Г.-Х. Андерсен) 12.00, 16.00 0+

**8 октябрь "Гадкий утенок"** (Г.-Х. Андерсен) 12.00, 16.00 0+

**10 октябрь "Буратино"** (А. Толстой) 12.00, 14.00 0+

**"Гадкий утенок"** (Г.-Х. Андерсен) 16.00 0+

**11 октябрь "Красная шапочка"** (Ш. Перро) 12.00, 14.00 0+

**"Гадкий утенок"** (Г.-Х. Андерсен) 16.00 0+

АФАРИН!

# ХАЛЫҠ РАДИОҺЫ УЛ "ЮЛДАШ"!




**Ошо көндәрҙә барыбыҙ ҙа яратып тыңлаған, инде тормошто унан башҡа күҙ алдына ла килтермәгән "Юлдаш" радиоһы үҙенең 20 йыллыҡ юбилейын билдәләне. Шул уңайҙан уны тыңлаусыларға, радионың кисәге һәм бөгөнгө алып барыусыларына: "Юлдаш" радиоһы үҙенең 20 йыл эшләү дәүерендә Башҡортостан тарихында ниндәй үҙенсәлекле эҙ ҡалдырҙы?" - тигән һорау менән мөрәжәғәт иттек.**

***Рәсүл СӘҒИТОВ, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, "Юлдаш" радиоһының ижтимағи-сәйәси программалар бүлеге етәксеһе:*** "Юлдаш" радиоһының республика тарихында эҙе балҡып ята, сөнки уның асылған ваҡыты быуат менән быуат алмашынған тарихи мәл ине. Һәм "Юлдаш" та тормошобоҙға яңы һулыш, яңы алым, яңы аҙым, революцион үҙгәрештәр менән килеп инде. Ғөмүмән, "Юлдаш" барлыҡҡа килгән ваҡытта ҡорамалдар ҙа, магнит таҫмалары ла бик етешмәгән осор ине. Өҫтәүенә, алып барылған идеология арҡаһында күпселек тапшырыуҙар алдан яҙылды, яңылыҡтар һәм концерттар, бер нисә проект ҡына тура эфирҙа булыр ине. Был инде ҡалыплашҡан эш алымы ине һәм шул ваҡытта тик тура эфирҙа ғына тигәндәй эшләгән канал асылды. Тигәндәй, тием, сөнки беҙ, Башҡортостан радиоһының варисы булараҡ, уның эшләгән ысулдарын да ситкә типмәнек, әле лә яҙма тапшырыуҙар, мәҫәлән, радиоспектаклдәр, әҙәби уҡыуҙар, фондта һаҡланған яҙмалар, шулай уҡ тапшырыуҙы биҙәп ебәреү өсөн дә яҙмалар ҡулланыла.

Ошо үткән 20 йыл эсендә "Юлдаш" телебеҙ үҫешенә лә ҙур этәргес бирҙе тип уйлайым, сөнки беҙ бит быға тиклем яҙма телмәргә күнеккән булғанбыҙ. Ә киң мәғлүмәт саралары аша йәнле һөйләү теле бигүк яңғыраманы. Был бик кәрәк, сөнки матур һөйләү өлгөһөн беҙ барыбер ҙә киң мәғлүмәт саралары аша күрһәтергә тейешбеҙ, сөнки кеше ҡолағы менән ишетеп тә дөрөҫ һөйләүгә ынтыла. Был ынтылыш, бәлки, кеше үҙе иғтибар итмәйенсә лә барлыҡҡа киләлер, ә беҙҙең, радио журналистарының төп ҡоралы - һүҙ менән бергә йәшәү. Өҫ-башҡа ҡарап ҡаршы алыу ғәҙәттән сыҡмаған әле, һәм, йөкмәтке ни тиклем генә алтын булмаһын, форма көмөш саҡта баяғы алтын баҡырға ла әйләнеп ҡуя. Шул алтын баҡырға әйләнмәһен өсөн тырышабыҙ.

Шулай ҙа иң мөһиме - "Юлдаш" радиоһының тура тапшырыуҙары - ул халыҡ менән йәмәғәт ойошмаларын, власть даирәләрен бәйләп тороусы күпер, тиер инем. Сөнки халыҡ тура эфир барғанда шылтырата, һорауҙарын бирә, үҙен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуаптар таба, ә йәмәғәт эшмәкәрҙәре, вазифа биләүселәр проблемаларҙы асыҡлай.

Ғөмүмән, ғүмеремдең күпселек өлөшөн ошо радиоға бағышлағаныма, Алла бойорһа, киләһе йыл 30 йыл тулырға тора, ошонда эшләп йөрөүемә, үҙемдең фекерҙәремде радио тыңлаусыма еткерә алғаныма бик бәхетлемен, сөнки фекерең булып та фекерҙе еткерә алыу мөмкинлеге булыу - шулай уҡ һәйбәт нәмә.

Артабан да тыңлаусыларыбыҙ менән бәйләнештәребеҙ тығыҙ, ныҡлы булһын. Радио бит ул бөгөн киң мәғлүмәт сараһы ғына түгел, ә ниндәйҙер ижтимағи институтҡа әйләнде. Тыңлаусыларыбыҙ әйтеүенсә, хатта ошо радиоға ҡарап йәшәү бар: радио менән уянып, радио менән бергә йоҡлап китеү ғәҙәткә инә. Юлда барғанда ла "Юлдаш" - юлдаш. Ғөмүмән, радио - ул халҡыбыҙҙың дуҫы. Шул дуҫлыҡҡа ике яҡ та киләсәктә лә тоғро булһын ине.

***Зөлфиә БАСИРОВА, "Орнамент" журналының баш мөхәррире:*** Мин - Ырымбур ҡыҙы. Бала саҡта инәй-атайым Өфө, Ҡаҙан радиоһын ҡуйып, көнөнә самалы ғына ваҡыт арауығында халыҡ һәм эстрада йырҙары, яңылыҡтар тыңлай торғайныҡ. 2014 йылдан алып яҡташтарым, ауылдаштарым хәҙер тәүлек буйына рәхәтләнеп башҡорт телендә радио тыңлай ала. Был Башҡортостандан айырылып, үҙҙәренең тарихи ерҙәрендә йәшәгән башҡорттар өсөн шул тиклем ҙур шатлыҡ булды, хатта радиоһы булмағандар радиоалғыс алып ултыртты. Байрамға, ялға ҡайтҡанда үтеп киткән машина, күрше-тирә яҡтан моңло йыр, туған телдә шиғыр, әҙәби әҫәрҙәр, яңылыҡтар ишетеүе күңелле. Тимәк, тыуған яғыма манҡортлоҡ хәүефе янамай.

"Юлдаш" каналының республика халҡына һәм Башҡортостандан ситтә йәшәгән, вахтала эшләп йөрөгән милләттәштәребеҙ өсөн килтергән файҙаһы, тәьҫире әйтеп бөткөһөҙ. Милли мәҙәниәткә хөрмәт, ҡыҙыҡһыныу, башҡорт теленә ихтирам да ошонан киләлер. Милли әҙәбиәт һәм милли баҫмалар барып етмәҫлек ергә радио тулҡындары аша башҡорт өсөн донъя кендеге булған Башҡортостандың яңылыҡтары, көнитмеше, борсоған көндәлек мәсьәләләре, еңеүҙәре һәм ҡыуаныстары барып етә, милләттәштәребеҙ күңеленә республика өсөн борсолоу йәки ҡыуаныс шатлығы тыуыуға сәбәп була. "Юлдаш" каналының унда эшләп киткән, бөгөн хеҙмәт иткән һәр хеҙмәткәренә оло рәхмәтемде еткерәм. Киләсәктә яңы ижад үрҙәре, һаулыҡ, бәрәкәт теләйем. Ә беҙ, радио тыңлаусылар, өйҙәребеҙҙә, машинала сәйәхәт иткәндә радио тыңлау мәҙәниәтен тергеҙәйек. Милли баҫмалар уҡыу, телевидение ҡарау һәм радио тыңлау үҙебеҙҙән башлана икәнен онотмайыҡ.

***Нурия АБДУЛЛИНА, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, "Юлдаш" радиоһының иң тәүге алып барыусыларының береһе:*** Мин 1996 йылда радиоға эшкә килдем, ул саҡта Радио-2 каналында башҡорт, татар, урыҫ телдәрендә бер-беребеҙ артынан сәғәттәрҙе алмаштырып эшләй инек. Күпмелер ваҡыт үткәс, ул "Сәфәр" радиоһына әйләнеп китте, артабан инде рустар - СпутникФМ, беҙ "Юлдаш" исеме менән башҡорт һәм татар телдәрендә тапшырыуҙар алып бара башланыҡ. 1996 йылда уҡ, мәғлүмәти-музыкаль канал асылғас, халыҡ "аһ" итеп, йотоп алырҙай булып, радио тапшырыуҙарын күтәреп алған, оло бүләк итеп ҡабул ителгән мәл булды ул. Сөнки быға са милли тапшырыуҙарға аҙ ғына ваҡыт бүленһә, ҡапыл тәүлек әйләнәһенә башҡортса һәм татарса тапшырыуҙар яңғырап тороуы әкиәти тормошҡа барып ингән кеүек булғандыр, тип уйлайым. "Юлдаш"ҡа әйләнгәнгә тиклем үк киске сәғәт 7-нән төнгө 1-гә тиклем бер тауыш менән бер кеше тапшырыуҙар алып бара торғайныҡ, әммә тауышың ни тиклем матур булмаһын, бер тауыш ул тамашасыны ялҡыта. Шулай булһа ла беҙ тулҡынланып, оло яуаплылыҡ тойоп, шатланып, ҡыуанып эшләй башланыҡ. Музыкаль биҙәүгә килгәндә, ул ваҡытта магнит таҫмалары ҡулланыла ине. Музыкаль биҙәлеш мөхәррирҙәре Урал Ниғмәтуллин, Әминә Хафизова нисек тапшырыуҙарға кәрәкле көйҙәр, йырҙар табып өлгөргәндер - һаман аптырата. Шул уҡ ваҡытта тура эфирҙа һирәк булһа ла хикәйәләр уҡыйһың бит инде, ниндәйҙер урында гармун тауышы йәки ҡурай моңон ебәрергә кәрәк. Үҙебеҙ уҡыйбыҙ, үҙебеҙ гармун уйнаған, ҡурай уйнаған хәрәкәттәрҙе ымлап күрһәтәбеҙ. Бик йыш булмаһа ла, таҫмалар өҙөлөп киткән саҡтар ҙа булғыланы. Шул замандар менән бөгөн бер төймәгә генә баҫып йыр ҡуйып ебәреүҙе сағыштырһаң, радионың нисек эшләй башлауына был бәләкәй генә бер дәлил булып тора. Һуңынан баш мөхәррир булып Миләүшә Ғәлиева килде. Тапшырыуҙар ваҡытын рубрикаларға бүлеп, төрләндерҙек. Радио - ул заман менән, халыҡ менән бергә үҫә, уға талаптар арта бара, шуға йыл һайын ниндәйҙер яңылыҡ кәрәк. Башҡортостан, халыҡ өсөн уның әһәмиәте, үҙенсәлеге нимәлә - тормошта ул ысын мәғәнәһендә юлдаш булып тора. Күптәр иртән тороу менән радиоһын ҡабыҙа, юлдағылар автомагнитолаһын беҙҙең тулҡындарға көйләй - ул эшләп тора, гөрләп тора, яңылыҡтар тыңлап та, музыкаль тулҡындарҙа бәүелеп тә, радиоһөйләшеүҙәрҙә ҡатнашып, тормошта булған ниндәйҙер күренешкә фекерҙәрен, мөнәсәбәттәрен белдереп тә өлгөрәләр һәм ошо тормошта ҡайнап йәшәйҙәр. Шул уҡ ваҡытта хәҙер интернет селтәре булғас, күптәр үҙенә кәрәкле мәғлүмәтте, йыр-моңдо селтәрҙәр аша ла эҙләп таба, шуға ҡарамаҫтан, "Юлдаш" һаман да үҙенең юғары рейтингын һаҡлай, халыҡ уны үҙенең дуҫы итеп һайлаған һәм ул - ысын мәғәнәһендә халыҡ радиоһы.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**яҙып алды.**

## АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КЕШЕ БЕЛЕМ МЕНӘН,

## ер яуын менән йәшәрер

Кесегә шәфҡәт итеп юл бир, олоға хөрмәт итеп ҡул бир.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Әгәр ҙә булдыра алмайым тип ышанаһың икән, моғайын, һин хаҡлы.

**(Мэри Кей Эш).**

Яза түгел, енәйәт хурлыҡ.

**(Иоганн Гердер).**

Яй кеше ауырлыҡтар менән ғүмере буйы көрәшә.

**(Гесиод).**

Йөҙәрләгән ҡалын китаптарға ҡарағанда, бәхеттә тәрән аҡыл күберәк.

**(Максим Горький).**

Дошманын дуҫҡа әйләндерә алыусы аҡыллы.

**(Ирланд мәҡәле).**

Хоҙай барыһын да нисек теләй, шулай эшләй, ә кеше - нисек хәленән килә.

**(Григорий Богослов).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Юл ситендә бер ҡарт ултырған һәм артынан саҡсаҡ өлгөрөп йүгереп барған малайҙы эйәрткән бер кеше килгәнен күргән. Кеше уның тапҡырына еткәс туҡтаған да, малайға һыу һәм икмәк кисәген ҡартҡа алып бирергә ҡушҡан. "Бында нимә эшләп ултыраһың, ҡарт?" - тип һораған юлсы. "Һине көтәм! - тип яуаплаған ҡарт. - Был баланы һиңә тәрбиәгә биргәндәр, шулаймы?" "Дөрөҫ!" - тигән, аптырап, үткенсе. "Былай булғас, үҙеңә бер аҡыл ал: Кешегә ағас ултыртып бирәм тиһәң, емешлеһен ултырт. Кешегә ат бүләк итер булһаң, иң шәп юртаҡ булһын. Әгәр ҙә һиңә тәрбиәгә баланы ышанып тапшырһалар, уны ҡанатлы итеп ҡайтар". "Быны нисек булдырайым икән һуң, үҙем оса белмәйем бит", - тип ғәжәпләнгән юлаусы. "Улай булғас, малайҙы тәрбиәгә алма!" - тигән дә ҡарт, йөҙөн күккә төбәгән.**

**Йылдар үткән. Ҡарт шул уҡ урында һауаға ҡарап ултыра икән. Бер мәл осоп барған малайҙы күреп ҡалған, уҡытыусыһы артынан килә, ти. Улар ҡарт эргәһенә еткәс, ергә төшкән дә, баш эйгәндәр. "Эй ҡарт, хәтереңдәме, һин миңә малайҙы ҡанатландырып ҡайтарырға ҡушҡайның? Мин әмәлен таптым... Күрәһеңме, ниндәй ҡанаттар үҫте!" - тигән ғорурланып уҡытыусы һәм шәкертенең ҡанаттарын иркәләп кенә һыйпаған. Әммә ҡарт уҡытыусының ҡанаттарына еңелсә генә ҡағылған һәм иркәләп кенә шыбырлаған: "Ә мине һинең ҡауырһындар нығыраҡ шатландыра..."**

1 582218 911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99, 246-03-24** |
| **Матбуғат таратыу** | **246-03-23** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
2 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3007
Заказ - 789/10